ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

19-25 декабрь (аҡъюлай) 2015

№51 (677)

kiskeufa.ru • blog.kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы иреклe

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Беҙ бәхетле халыҡ -**



балаларыбыҙға һөйләр эпостарыбыҙ, әкиәттәребеҙ бар **8-9**

**"Көмөш Аҡбуҙат"...**

рухи ҡиммәттәргә нигеҙләндә



**10**

**Аҡыллы кеше...**

башҡалар тәжрибәһендә өйрәнә



**11**

**Эш ыратҡан - уңыр,**

юрағаны юш килер



**15**

**ТВ-программа 14**

***"Бер сит ил илсеһе Екатерина II шулай тип һорай икән: "Һеҙ, Ғәли йәнәптәре, нисек итеп үҙегеҙҙең тыңлауһыҙ дворяндарығыҙҙы тыңлата алыуға өлгәшәһегеҙ?" Екатерина II шулай тип яуап биргән: "Мин уларҙы бер ваҡытта ла уларға файҙалы булмаған эште эшләргә мәжбүр итмәйем".***

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

### РФ Президенты Владимир Путин Федераль Йыйылышҡа Мөрәжәғәтнамәлә, йәмғиәт өсөн әллә ни хәүефле булмаған енәйәттәрҙе административ хоҡуҡ боҙоуҙар рәтенә индереп, Енәйәт кодексын гуманлаштырыу хаҡында әйтеп китте. Был хаҡта һеҙ ниндәй фекерҙә?

***Шамил ТУЛӘБАЕВ, БР Адвокаттар коллегияһының Баймаҡ филиалы етәксеһе:*** Ил Президенты Владимир Путин билдәләп китеүенсә, бөгөн беҙҙә судҡа барып еткән һәр икенсе енәйәт эше ваҡ, әллә ни хәүефле булмаған хоҡуҡ боҙоуҙар менән бәйле. Был, тәбиғи, суд эшмәкәрлегендә иҫ киткес көсөргәнеш тыуҙыра; тәфтишселәр, судьялар мөһимерәк енәйәт эштәрен ҡарау урынына административ хоҡуҡ боҙоуҙарға тиң ошо ваҡ эштәргә алтындай ваҡыттарын сарыф итә. Икенсенән, хоҡуҡ нормаларын боҙоусы ундай ҡылығы менән тәүләп эләкһә лә, йәш кеше булһа ла, уның артабанғы яҙмышы - хөкөм эскәмйәһе, төрмә. Ә был уның үҙенә генә түгел, туғандары өсөн дә мәңгелек хурлыҡ. Хөкөмдән һуң бындай кеше хатаһын аңлап, дөрөҫ юлға баҫамы, әллә төрмә тигән аяуһыҙ мөхиттә холҡо боҙолоп, ысынлап та уҫал енәйәтсегә әйләнәме - әйтеүе ҡыйын. Шуға ла иҡтисади эшмәкәрлеге буйынса хоҡуҡ боҙоуҙарға, шулай уҡ алимент, һалым түләмәүселәргә, ялған документтар менән файҙаланыусыларға ҡарата законды йомшартыу, уларҙы административ яуаплылыҡ менән алмаштырыу кәрәктер ҙә. Тик бына кеше туҡмау, үлтереү менән янау, сәләмәтлеккә зыян килтереү кеүек енәйәттәр өсөн бирелгән статьяларҙың йыш ҡына көнкүрештә урын алыу ихтималлығы булған ауыр енәйәттәрҙе иҫкәртеүсе превентив статья икәнлеген дә оноторға ярамайҙыр. Ундай енәйәттәрҙең барыһын да ваҡ хоҡуҡ боҙоу эштәре тип ҡарау дөрөҫ булырмы икән? Еңелсә ҡурҡыу, йәғни штраф менән ҡотолған бындай кешеләр язаһыҙлыҡ тойоп, артабан да үҙ юлын ҡыумаҫмы? Дөрөҫ, был йәһәттән ошондай хоҡуҡ боҙоуҙарҙы ҡабатлап яһау енәйәт эше тип ҡараласағы хаҡында ҡәтғи иҫкәртелде Президент сығышында. Һәр хәлдә, Енәйәт кодексы статьяларының ҡайһы берҙәрен декриминаллаштырыу "тулайым" рәүештә башҡарылмаҫ, моғайын, еңелсә тип иҫәпләнгән һәр енәйәт осрағы ентекләп анализланыр һәм шунан һуң ғына уның ысынлап та енәйәтме, әллә административ хоҡуҡ боҙоумы икәнлеге хәл ителер.

(Дауамы 2-се биттә).

## ИҒТИБАР!

# БЕРГӘ-БЕРГӘ ФЕКЕР ҠОРАЙЫҠ!

**Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ! Гәзит-журналдарға яҙылыу кампанияһы тамамланыуға бер аҙна ғына ваҡыт ҡалды. Һуңлап ҡалмағыҙ. 50665 индекслы "Киске Өфө"гә - 545 һум 76 тингә яҙылып, квитанцияларығыҙҙы редакцияға ебәрегеҙ: бүләкле булыу мөмкинлеген дә ҡулдан ысҡындырмағыҙ.**



Йыл аҙағына тиклем квитанцияларын редакцияға ебәргәндәр араһынан кемдәрҙер **Мәрйәм Бураҡаеваның "Арғымаҡ"**, **Тамара Ғәниеваның "Ғүмер кисеүҙәре"**, **Рәшит Назаровтың "Ер һәм йыһан йыры"**, **Ә. Әсфәндийәровтың "История сел и деревень Башкортостана"**, **Нияз Мәжитовтың "История Башкортостана"**, **"Антология поэзии Башкортостана"**, **башҡортса "Дини календарь"**, **2016 йылға "Мәктәп календары"**, **Рауфан Мортазиндың "Космоэнергетика һәм сәләмәтлек"** китаптарын алып шатланыуы ихтимал. Әйҙәгеҙ, кем алыҡ?

• Ә кемдәрҙе бүләктәр ҡыҙыҡһындырмай, улар беҙгә **тыуған көндәрен** хәбәр итһен. Гәзитебеҙ аша гәзит уҡыусыбыҙҙы тыуған көнө менән ҡотлау - беҙгә лә мәртәбә, һеҙгә лә шатлыҡ өҫтөнә шатлыҡ өҫтәр.

• **"Киске Өфө" - бүләгем"** акцияһы ла дауам итә. Уға ҡушылып, ауылдарҙағы туғандарығыҙға, атай-әсәйҙәргә, мәсеттәргә, таныштарығыҙға гәзитебеҙҙе яҙҙырып шатландырығыҙ.

**Өфөлә йәшәүселәр өсөн гәзитебеҙгә яҙылыуҙың тағы шундай арзанлы юлдарын тәҡдим итәбеҙ:**

• Йәшәгән йортоғоҙ эргәһендәге "Өфө-матбуғат" киоскыларында баҫмабыҙға 438 һумға (50665) яҙыла алаһығыҙ.

• Яҡын йәшәгәндәр редакциябыҙҙа яҙылып, гәзитте аҙна һайын үҙе килеп алып йөрөй ала: ярты йылға 258 һум. Коллектив менән яҙылыусыларға (кәмендә 10 дана) гәзит ярты йылға шулай уҡ 258 һумға төшәсәк.

• **Иҫкәртеү.** Почталарҙа, киоскыларҙа гәзиткә яҙҙырыуҙан баш тарталар икән, йә яҙҙырған булып та, өйҙәрегеҙгә гәзитте алып килмәйҙәр икән, зинһар, редакцияға шылтыратып хәбәр итегеҙ.

• Беҙҙең сайт: www.kiskeufa.ru. Беҙҙең электрон почта: kiskeufa@mail.ru. Беҙҙең блог: blog.kiskeufa.ru.

**Бергә булайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ, донъя хәтәрҙәрен, борсолоуҙарҙы бергә еңәйек, шатлыҡ-ҡыуаныстарҙы бергә уртаҡлашайыҡ!**

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

12+

ӘЙТӘГҮР!

# ЯЛ КӨНДӘРЕН ҠЫҪҠАРТЫУҒА... ризаһыңмы, ҡаршыһыңмы?

**РФ Дәүләт Думаһы депутаттары ғинуар башындағы ял көндәрен ҡыҫҡартыу тәҡдиме менән сығыш яһаны. Закон проекты авторы, ЛДПР фирҡәһе етәксеһе урынбаҫары Алексей Диденко был "рәсәйлеләргә ғаилә бюджетын һәм һаулыҡтарын һаҡлап ҡалырға булышлыҡ итәсәк", тигән фекерҙә. Күптән өйрәнелгән һәм көтөп алынған Яңы йыл байрамы ялдарын ҡыҫҡартыуға нисек ҡарауҙарын белеү маҡсатында гәзит уҡыусыларыбыҙға мөрәжәғәт иттек.**

***Сәриә ҒАЙНАНОВА, дәүләт органы хеҙмәткәре:*** Был фекерҙе тулыһынса яҡлайым. Ысынлап та, был көндәрҙә әүҙем ял итеп булмай, сөнки туристик юлламаларҙың хаҡы ҡырҡа арта һәм күптәр өсөн ҡайҙалыр барыу бойомға ашмаҫ хыял булып ҡала. Хәҙерге ваҡытта күптәрҙең кеҫә яғы таҡырайҙы, шуға күрә хатта республиканың ял йорттарына, туристик базаларына барып ҡайтыу ҙа ауырлыҡ тыуҙыра.

Тышта ла ниндәй генә сафлыҡ-паклык булмаһын, һыуыҡта оҙаҡ йөрөп булмай. Кешегә нимә ҡала? Улар тәмле-татлы аш-һыу әҙерләп, көндәрен телевизор янында үткәрергә мәжбүр. Шулай уҡ ҡунаҡҡа йөрөү йышая. Ә өҫтәл артында йыйылып ҡунаҡ булыу әлеге лә баяғы спиртлы эсемлектәр ҡулланыуға ҡайтып ҡала. Ошо ун көндө эш кешеһенең ял көндәренә (отпуск) ҡушып биреү күпкә дөрөҫ булмаҫ инеме икән?

Ә оҙайлы ял көндәре һөҙөмтәһендә илдең иҡтисады ла зыян күрә. Эксперттар иҫәпләп сығарыуынса, ғинуар байрамдарында дәүләт ҡаҙнаһы триллион һумға яҡын аҡсаһын юғалта. Ә күпме сәнәғәт предприятиелары, завод һәм фабрикаларҙың эшмәкәрлеге кәмей. Әлбиттә, депутат тәҡдим иткәнсә, ял ваҡытын тик бер көнгә генә ҡалдырыу дөрөҫ булмаҫ. Ни тиһәң дә, Яңы йыл байрамдарында ял итеүгә өйрәнгәнбеҙ һәм ҡапыл ғына эшкә сығып китеү ҡыйыныраҡ булыр, тип уйлайым.

***Айнур ЯҠУПОВ, завод эшсеһе:*** Депутаттарҙың эше "ҡаты" инде ул. Сәғәт телдәрен борғослап арыһалар, ошо ял көндәренә йәбешәләр. Шәхсән үҙем Яңы йыл байрамдарын көтөп алам, сөнки 10 көн дауамында ғаиләм янында булам. Тәүлекләп эшләгәс, балаларҙы йыл әйләнәһенә күрмәйем дә тиерлек. Туғандар менән осрашыуҙар тураһында әйтеп тә тораһы түгел - күпселек байрамдар эш сменаһына тура килеү сәбәпле, ғаиләм менән ундай табындарға йөрөмәйбеҙ. Ә Яңы йыл ялдары бөтәһе менән дә күрешергә, хәл-әхүәлдәр белешергә, бер-беребеҙгә ниндәйҙер ярҙам күрһәтеп ебәрергә ярҙам итә. Яңы йылда эште яңы көстәр менән башлап ебәреүгә лә шәп сара был ялдар. Ошо көндәрҙе ғинуарҙан алып, йә май айына, йә отпускыға ҡушыу тураһындағы һүҙҙәр тормошҡа ашырылмаясаҡ, минеңсә. Шул рәүешле кешенең башын бутап, ял көндәре тураһында онотторорға иҫәп тоталар кеүек. Шуға күрә депутат әфәнделәргә ҡанға һеңеп бөткән ял көндәренә ҡул һуҙмаҫҡа, ә нисек бар, шулай ҡалдырырға тәҡдим итәм.

**Гөлназ МАНАПОВА яҙып алды.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## РФ Президенты Владимир Путин Федераль Йыйылышҡа Мөрәжәғәтнамәлә, йәмғиәт өсөн әллә ни хәүефле булмаған енәйәттәрҙе административ хоҡуҡ боҙоуҙар рәтенә индереп, Енәйәт кодексын гуманлаштырыу хаҡында әйтеп китте. Был хаҡта һеҙ ниндәй фекерҙә?

**(Башы 1-се биттә).**

***Разия БАЙЕГЕТОВА, БДУ-ның Сибай институты юридик факультеты уҡытыусыһы:*** РФ Юғары Суды Пленумы Енәйәт кодексына ҡараған ҡайһы бер енәйәт эштәрен административ хоҡуҡ боҙоуҙар рәтенә индереү хаҡындағы үҙгәрештәрҙең Дәүләт Думаһы ҡарауына сығарылыуын хупланы. Түбәндәге әллә ни хәүефле тип иҫәпләнмәгән эштәрҙе енәйәт эштәрен башҡарыу составынан алырға тәҡдим ителә: кеше туҡмау (РФ УК116 ст.), үлтереү менән янау һәм һаулыҡҡа зыян килтереү (УК 119 ст.), балиғ булмаған балаларына йәки ҡарауһыҙ ҡалған ҡартайған ата-әсәһенә алимент түләүҙән баш тартыу, ялған документтар менән файҙаланыу буйынса эштәр. РФ Президенты Мөрәжәғәтнамәһендә шулай уҡ Енәйәт кодексының иҡтисад буйынса ҡайһы бер статьяларын да енәйәт яуаплылығынан алыу тураһында һүҙ барҙы. Был нигеҙҙә граждандарҙың, юридик шәхестәрҙең, муниципаль һәм дәүләт берәмектәренең РФ Енәйәт кодексына ярашлы енәйәт яуаплылығына тарттырылырға тейешле милекселек һәм производство мөнәсәбәттәренә ҡағылышлы хоҡуҡ боҙоуҙар. Президент миҫалға килтергән мәғлүмәттәр буйынса, былтыр Рәсәйҙә иҡтисад енәйәттәре буйынса 200 мең енәйәт эше ҡуҙғатылған булһа, шуларҙың 46 меңе генә судҡа барып еткән, ә 15 мең эш суд процесында уҡ "тарҡалып" юҡҡа сыҡҡан. Шулай итеп, был эштәрҙең ни бары 15 проценты ғына хөкөм ҡарары сығарыу менән тамамланған. Уның ҡарауы, хоҡуҡ һаҡсыларының ошондай самаһыҙлығы арҡаһында ғәйепләнеүселәрҙең күпселеге, йәғни 86 проценты, тулыһынса йәки өлөшләтә бизнесынан яҙған, эшҡыуарлыҡ статусын юғалтҡан. Ә былдай хәл, Президент әйтеүенсә, ысынлап та, илдәге эшлеклелек мөхите файҙаһына түгел. Шуға күрә бындай эштәрҙе тикшереү барышында һаҡ аҫтында тотоуҙы һуңғы сара итеп ҡарарға һәм зыянды ҡаплатыу, штраф, залог, өйҙә һаҡ аҫтында тотоу, ситкә сығыуҙы тыйыу кеүек саралар ҡулланырға тәҡдим ителде. Енәйәт яуаплылығы буйынса статьяларҙың ҡайһы берҙәрен гуманлаштырыу, һис һүҙһеҙ, судтар һәм тикшереү органдары эшен еңеләйтәсәк һәм уларға ауыр, хәүефле енәйәттәр буйынса ныҡлап шөғөлләнергә форсат тыуасаҡ, тигән уйҙамын.

***Фәрит ИШБАЕВ, матбуғат ветераны, журналист:*** Был хаҡта һөйләшеүҙәр бара ине инде. Ошо йылдың авгусында РФ Юғары Суд Рәйесе В.Лебедев РФ Президенты Владимир Путин менән булған осрашыуҙа күтәреп сыҡҡайны был мәсьәләне. Рәсәй Юғары Суд Пленумы йәмғиәт өсөн хәүефле булмаған енәйәттәрҙе административ яуаплылыҡ ҡарамағына күсереү, йәғни РФ Енәйәт кодексының ҡайһы бер статьяларын декриминаллаштырыу буйынса закон проектын хупланы һәм ул парламент ҡарауына тәҡдим ителде. 3 декабрҙәге Мөрәжәғәтнамәһендә ил Президенты В. Путин Федераль Йыйылыштан Юғары Судтың ошо тәҡдимен яҡлауҙы һораны. Ысынлап та, уйлап ҡараһаң, судтар енәйәт эштәренә "баштан аяҡ" тигәндәй күмелгән. Был әлегесә ҡайһы бер ваҡ хоҡуҡ боҙоуҙарҙы ла енәйәт эше тип квалификациялау арҡаһында килеп тыуа. Мәҫәлән, Суд департаменты мәғлүмәттәре буйынса, Юғары Суд былтыр Енәйәт кодексы статьялары буйынса хөкөмгә тарттырылған 128 861 кешенән был яуаплылыҡты алып ташларға тәҡдим итә. Улар араһында хөкөм ителеүселәрҙең иң күбе - яман уй менән алимент түләүҙән ҡасыусылар - 62 меңдән ашыу. Тағы ла 30 меңләп кеше һаулыҡҡа ауыр зыян килтереүсе һәм үлтереү менән янаусылар. Ә 20 мең хөкөм ителеүсе кеше туҡмаған өсөн енәйәт яуаплылығына тарттырылған. Ялған документтар менән файҙаланған өсөн иһә 15 мең кеше төрмәгә ябылған. Был енәйәт эштәрен административ яуаплылыҡ менән алмаштырырҙан алда һәр бер осраҡ ныҡлап тикшерелергә тейештер, моғайын, сөнки енәйәт ҡылыу менән административ хоҡуҡ боҙоу факттарын ҡарау йыш ҡына ҡыйынлыҡтар тыуҙыра. Ваҡ хулиганлыҡты енәйәт эше итеп "төрөп" биреүҙә ҡайһы саҡ полиция хеҙмәткәрҙәре һәм тәфтишселәрҙең ғәйепләнеүсегә ҡарата субъектив мөнәсәбәте лә сәбәпсе була. Унан һуң, үҙ ғүмерендә бер нисә тапҡыр хоҡуҡ боҙоусылар ҙа байтаҡ икәнен онотмайыҡ. Әйткәндәй, был осраҡтар хаҡында Мөрәжәғәтнамәһендә В. Путин айырым баҫым яһап әйтте: ҡабатлап хоҡуҡ боҙоу факты һис һүҙһеҙ енәйәт эше тип баһаланасаҡ. Минең уйымса, Юғары Судтың административ тәртипкә күсерелергә тейешле тип күрһәтелгән әлеге енәйәт эштәренең бөтөнөһө менән дә килешеп булмайҙыр шулай ҙа. Нисек инде, кеше сәләмәтлегенә ауыр зыян килтергән осраҡты, йә булмаһа, үлтереү менән янау факттарына "күҙ йоморға" мөмкин? Административ яуаплылыҡ - ул, нигеҙҙә, иҫкәртеү, штраф түләтеү, административ ҡулға алыу, ниндәйҙер ҡорал, предмет ярҙамында хоҡуҡ боҙғанда ошо әйберҙе тартып алыу йә конфискациялау һ.б. Кеше туҡмаусыға ҡарата бындай еңелсә саралар уның башынан һыйпауға тиң булмаҫмы һуң - бына шуныһы борсой бигерәк тә. Енәйәтселәр тарафынан был реформа амнистия тип ҡабул ителергә тейеш түгел. Һәр кемеһе уларҙың үҙ урынын белергә бурыслы. Кеше туҡмаусы - ул иҫерек йә яуыз уйлы хулиган, кеше талаусы юлбаҫар икән, ти, мәҫәлән, ундайҙарҙың күпселегенең барыбер штраф түләү мөмкинлеге юҡ, сөнки тап аҡсаһыҙлыҡтан шул аҙымға бара ла бит улар. Ә кеше туҡмап, талап, урлап, юл баҫырға ғәҙәтләнгән яуыз әҙәм иректә йөрөһөн дә, бындай тормош рәүешен штраф түләп кенә туҡтатһын, имеш... Ваҡытлыса изоляторҙа (элеккесә КПЗ) ултырып сығыу ҙа хаҡ юлға баҫтырмаясаҡ ундайҙарҙы, моғайын. Ошондай ауыр осраҡтарға ҡарата, киреһенсә, ҡаты закон ҡулланырға кәрәк. Ә инде кешегә, йәмғиәткә әллә ни ҙур зыян тип иҫәпләнмәгән алимент, һалым түләүҙән тайпылыу кеүек башҡа вағыраҡ эштәрҙе, ысынлап та, енәйәт яуаплылығынан азат итеү кәрәктер ҙә. Күңелгә тағы бер нәмә тынғы бирмәй. РФ Юғары Суд Рәйесе В. Лебедев раҫлауынса, Енәйәт кодексы статьяларын декриминаллаштырыу илдә енәйәтселәр һанын ике тапҡырға кәметәсәк. Кеше талаусы, туҡмаусы, бур, юлбаҫар кеүек әҙәмдәр, тимәк, енәйәтсе булмай сығасаҡ. Ә нисек атап йөрөтөрбөҙ һуң уларҙы? Юғиһә, бүрегә һарыҡ тиреһе ябындырып ҡына енәйәттәр кәмей тип әйтеп булырмы икән һуң?..

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓ Рәсәй Президенты Владимир Путин 11-се тапҡыр сит ил һәм Рәсәй журналистары менән матбуғат конференцияһы уҙғарҙы. Мәскәүҙең Халыҡ-ара сауҙа үҙәгендә 1300-ҙән ашыу журналист дәүләт башлығына һорауҙар бирҙе. Матбуғат конференцияһында Башҡортостандың киң мәғлүмәт саралары вәкилдәре лә ҡатнашты. Осрашыу барышында Владимир Путин илдең социаль-иҡтисади хәленә баһа бирҙе. Милли валютаның тотороҡланыуын, сәнәғәт етештереүе үҫешен, ауыл хужалығының ыңғай динамикаһын билдәләне. Ауыл халҡына быйыл юғары уңыш алғандары өсөн рәхмәт белдерҙе. Дәүләт башлығы капиталдың ситкә китеүенең кәмеүен һыҙыҡ өҫтөнә алды.

✓ Хәмит Мәүлийәров Рәсәйҙең төҙөлөш министры урынбаҫары вазифаһына тәғәйенләнде. Ул ведомствоның ҡала төҙөлөшө эшмәкәрлеге һәм архитектура департаменты эше өсөн яуап бирәсәк. 2004-2008 йылдарҙа Хәмит Мәүлийәров Башҡортостандың Төҙөлөш, архитектура һәм транспорт министрлығын етәкләне. Һуңынан Рәсәй Президентының контроль идаралығында эшләне, унда ул төбәк үҫеше мәсьәләләре һәм милли әһәмиәттәге проекттар өсөн яуап бирҙе. 2012-2015 йылдарҙа "Олимпстрой" дәүләт корпорацияһының беренсе вице-президенты вазифаһын биләне.

✓ Башҡортостан торлаҡты сафҡа индереү буйынса Волга буйы федераль округында лидер - төбәктәр араһында беренсе урынды биләй. Башҡортостанстат мәғлүмәттәре буйынса, ағымдағы йылдың ғинуар-ноябрь айҙарында төбәктә финанслауҙың бөтә сығанаҡтары иҫәбенә дөйөм майҙаны 2406,1 мең квадрат метрлыҡ 29,5 мең фатир сафҡа индерелгән. Уҙған йылдың ошо уҡ осорона ҡарата күрһәткес 2,5 процентҡа артҡан.

✓ Мәскәүҙә "Башҡортостан тураһында дастан" китабы донъя күрҙе. Йыйынтыҡта рус теленә тәржемә ителгән Башҡортостандың хәҙерге шиғриәте тупланған. Китап "Күп телле Рәсәй шиғриәте" серияһында һәм "Рәсәйҙең аҡ торналары" проекты сиктәрендә баҫылып сыҡҡан. Унда 15 башҡорт авторының - Рауил Бикбаев, Тимер Йосопов, Ҡәҙим Аралбай, Фәкиһә Туғыҙбаева, Ирек Кинйәбулатов, Тамара Ғәниева, Азамат Юлдашбаев, Зөлфиә Ханнанова, Лариса Абдуллинаның шиғырҙары ингән. Һәр автор тураһында биографик белешмә бирелгән.

✓ *Балаларға ғаиләһе тураһында һөйләргә өйрәнеп килергә, тигән өйгә эш биргәйнек. Уҡыусылар бик яҡшы әҙерләнеп, ата-әсәһе тураһында ғорурланып һөйләнеләр, башҡалар иғтибарлап тыңлап, фәһем һәм өлгө алып ултырҙы.*



КИЛЕШМӘЙЕМ!

**Урамдарҙа, йорт алдарында машиналар күбәйгән һайын, тормошобоҙҙа проблемалар ҙа артҡандан-арта бара. Бер яҡтан, кеше машина һатып ала икән, тимәк, ул насар йәшәмәй. Дөрөҫ, машина байлыҡ күрһәткесе түгел, ә хәрәкәт итеү сараһы, тип ҡабатларға ярата ҡайһы бер "аҡыллы" баштар. Был һүҙҙәр менән килешмәҫкә лә мөмкин, әлбиттә.**

# МАШИНАҢДАН ТӨШ ТӘ ЙӘЙӘҮ АТЛА!



Машина кәрәк, һүҙ ҙә юҡ, йәшәгән урындан ситтә ятҡан алыҫ араларҙы яҡынайтыу өсөн. Ә бына ҡала эсендә машиналы кешеләр бик ҙур проблема тыуҙыра: экологияны бысрата, туҡтауһыҙ авариялар һәм тығындар яһай, йәйәүлеләргә ҡамасаулай... Хәҙер бит руль артындағыға түгел, йәйәүлегә лә йөрөүе бик ҡыйынлашты, сөнки машиналар тротуарҙарҙы ла баҫып алып бөттө. Дөрөҫөн әйткәндә, тротуарҙы улар уйлап та тормайынса туҡталҡаға әйләндереп алды. Шул уҡ ваҡытта бер генә урында ла "Стоянка запрещена" тигән билдә менән яҙыуҙы күрмәҫһең. Бындай тыйыуҙар, исмаһам, мәктәп, балалар баҡсалары, дауаханалар янында торһон ине. Исем өсөн булһа ла. Ә, ғөмүмән, беҙҙең халыҡтың ундай яҙыуға төкөрөп тә бирмәйәсәге билдәле бит, юғиһә. Иномаркаға атланып, "хәрәкәт сараһы"н үҙҙәренсә текәлек менән бутаусылар бар әле һаман да. Уларға, башың ике булмаһа, берәй иҫкәртеү яһап ҡара... Ник тыуғаныңа үкенерһең. Миҫал - аҙым һайын.

Беҙҙең редакцияға күрше подъезда, мәҫәлән, медицина-социаль экспертиза бюроһы урынлашҡан. Ләкин ҡарт-ҡоро, ғәрип-ғөрәбәгә бюро ишегенә килеп еткәнсе, әллә күпме машиналар араһындағы тар ғына лабиринттарҙы урап үтергә тура килгәнен күҙәткән бар. Бюроның тупһа ауыҙында уҡ торғандарының эйәләренә әйтеп ҡараған да булды, тик иртәгәһенә тағы шул уҡ хәл ҡабатлана. Әлеге машина хужалары киләсәктә үҙҙәренең ана шул ҡарт-ҡоро һәм ғәриптәр хәленә ҡалыу ихтималлығын уйлап ҡараһасы. Уларға яман уй теләгәндән түгел был һис тә. Йәйәү йәки йәмәғәт транспортында ла һә тигәнсе барып етә ала торған ергә лә машина ҡыуыу, берҙән, әйтеүемсә, урам хәрәкәтендә тоткарлыҡтарға сәбәпсе булһа, икенсе яҡтан, әүҙем хәрәкәтләнеүҙе онотоп, ғүмер буйы машинала ҡорһаҡ үҫтереп ултырыу барыбер яҡшыға алып килмәйәсәге былай ҙа аңлашыла. Сәләмәт йәшәүҙең төп нигеҙе, тартмау-эсмәү менән бер рәттән - хәрәкәтсәнлек икәнен онота шул беҙҙең халыҡ. Рәхәтте көҫәй һәр ваҡыт. Ә былай һәр саҡ машинала йөрөүҙе рәхәт тип тә әйтеп булмайҙыр ул. Юлда минут һайын осрап торған стресс хәлдәрҙән нервылар ҙа ҡаҡшай торғандыр.

Ошо йәһәттән бер хыял йәшәй күңелдә. Баш ҡалабыҙ Өфөлә айырыуса һуңғы йылдарҙа барлыҡҡа килгән халыҡ марафондары, велосипедсылар көнө кеүек бик матур традициялар йәшәп килә. Шуның кеүек, Йәйәүлеләр көнө лә булдырылһа, әгәр, Өфөбөҙҙә? Тик ул йылына бер тапҡыр түгел, ә, әйтәйек, һәр аҙнаның бер көнөнә тәғәйенләнһә? Минеңсә, иртәнсәк тороп йүгереүгә ҡарағанда, ҡасан тура килә, шул саҡ һәм мөмкин тиклем оҙағыраҡ йәйәү йөрөү күпкә файҙалыраҡ. Белгестәр шундай фекерҙе йыш ҡабатлай башланы. Йүгерергә яратҡан билдәле кардиохирург, академик Николай Амосов ҡапыл вафат булғас, ул инфаркттан барыбер йүгереп ҡотола алманы шул, тип ҡыҙғаныс белдереүселәр булғайны. Йәйәү йөрөүҙең файҙаһын яҡшы төшөнгән кешеләр арта бара хәҙер, тик уларҙың күбеһе - пенсионерҙар. Һәр хәлдә мин уларҙы иртәнсәк һайын эшкә барған юлымда - эргәләге мәктәп биләмәһенең спорт майҙанында осратам. Хәҙер улар саңғы таяғына оҡшаш махсус таяҡтар тотоп атлай башлаған. Был иһә йәйәүле скандинавтар (норвеждар) хәрәкәте тип атала. Ул беҙҙең илдә торған һайын популярлыҡ яулай бара. Ярай, быныһы - ялға сыҡҡас, ә әлегә эшкә йәйәү йөрөмәһәк тә, унан мотлаҡ йәйәү ҡайтайыҡ. Өсдүрт туҡталыш булһа ла. Ынғай һөҙөмтәһе оҙаҡ көттөрмәҫ.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ



**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**

# ИЛЕ БАРҘЫҢ - ТЕЛЕ БАР

***Илдар МОТАЛОВ, Өфө ҡалаһының Ф. Мостафина исемендәге 20-се башҡорт гимназияһы директоры:*** Тәү сиратта һәр кеше илһөйәр булырға тейеш. Тимәк, тыуған иленә, районыңа, ауылыңа, ҡалаңа, туғандарыңа һәм милләттәштәреңә ҡарата күңелеңдә һөйөү тойғоһо йөрөтөү мөһим. Һуңғы ваҡытта илдә рухи күтәрелеш һиҙелә, халыҡтың үҙаңы үҫешә бара. Милләттәштәр шуны аңлаһын ине: һәр беребеҙ илһөйәр, үҙ-ара дуҫтарса мөнәсәбәттә, берҙәм булмаһаҡ, илде тик техник алға китеш ярҙамында ғына һаҡлап, яҡлап ҡалып булмай.

Ә илһөйәрлек тойғоһон тәрбиәләү бик ныҡ әһәмиәтле булып та күренмәгән, ябай ғына факторҙарҙан башлана. Мәҫәлән, баланың үҙ ата-әсәһе, туғандары, шәжәрәһендәге зат-ырыуы тураһында мәғлүмәтле булыу ҙа илһөйәрлек, рух көсө тәрбиәләргә ярҙам итә. Балаларҙан ата-әсәйең ҡайҙа эшләй, тип һорашһаң, заводта, йәки врач тип ҡыҫҡа ғына яуап бирәләр. Әммә 8-9 синыф уҡыусылары ошолай ғына итеп яуап ҡайтарыуы дөрөҫ түгел. Балалар атаһының ниндәй заводта эшләүен, унда ниндәй ҡорамалдар сығарыла, күпме ил менән хеҙмәттәшлек итә, ниндәй майҙанда урынлашҡан, илгә ниндәй файҙа килтерә - барыһын да белергә тейеш. Бер синыф дәресендә балаларға ғаиләһе тураһында һөйләргә өйрәнеп килергә, тигән өйгә эш биргәйнек. Уҡыусылар дәрескә бик яҡшы әҙерләнеп килгәйне, ата-әсәһе тураһында ғорурланып сығып һөйләнеләр, башҡалар бик иғтибарлап тыңлап, фәһем һәм өлгө алып ултырҙы. Тәү ҡарамаҡҡа әллә ни әһәмиәтле күренмәһә лә, бик ҙур тәрбиәүи сара был. Шуға күрә, һәр милләттәш балаһын үҙ өлгөһөндә тәрбиәләһен, шәжәрәһен ентекле өйрәтһен һәм иң мөһиме, туған теленән мәхрүм итмәһен.

Туған тел тураһында ла бер-нисә һүҙ әйтмәй булмай. Йыш ҡына башҡорт телен беҙгә мәктәптә уҡытманылар, ата-әсәй өйрәтмәне тигәндәрен йыш ишетергә тура килә. Ә ни өсөн үҙ аҡылың менән уйлап ҡарап, үҙең өйрәнмәҫкә? Береһе лә башҡорт телендә һөйләшергә, уҡырға тыйып, артыңдан күҙәтеү ойоштормай. Йәки сиған халҡы кеүек мәктәптәре, яҙмалары, хатта тыуған иле лә булмаған халыҡ түгелбеҙ. Киреһенсә, туған телебеҙҙе өйрәнергә бөтә мөмкинлектәр тыуҙырылған, үҙебеҙҙең дәүләтселегебеҙ бар, тик һәр кемдең теләге булыуы ғына шарт. Үҙебеҙҙең ялҡаулыҡты башҡаларға япһарып, бала саҡта өйрәтмәнеләр, тыйҙылар, көлдөләр тип һылтауҙар эҙләүҙән туҡтайыҡ. Башҡалар беҙҙе ихтирам итһен, тарихыбыҙға һәм мәҙәниәтебеҙгә ҡарата яҡшы мөнәсәбәттә булһын тиһәк, тәү сиратта үҙебеҙгә башҡорт булыуҙан оялмаҫҡа кәрәк. Ҡайҙа барһаҡ та башҡорт телендә һөйләшеүҙән тартынмайыҡ. Урыҫ телендә һөйләшеү генә кешенең кимәлен үҫтермәй, тигән хәҡиҡәткә төшөнөү мөһим. Кешенең аң кимәле, аҡылы һәм фекерләү ҡеүәһе тик үҙаллы белемгә ынтылыу, күп телдәр белеү арҡылы ғына үҫешә. Башҡорт телендә уҡып, урыҫ телен аҙаҡ өйрәнгән билдәле шәхестәр, ғалимдар күп. Баланы башҡорт телендә уҡытыу уның интеллектын бер нисек тә сикләмәй, тип әйтмәксемен. Халҡыңдың тарихын, рухи ҡиммәттәрен яҡшыраҡ белеү өсөн туған телдә һөйләшеү мотлаҡ. Ә илһөйәрлек тойғоһо, һис шикһеҙ, кеше күңеленә нәҡ шул белем аша килә.

**Камила ҒӘЛИЕВА яҙып алды.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓ Төбәктә киҙеүгә ҡаршы халыҡты иммунизациялау буйынса план 100 процентҡа үтәлгән. Бөгөнгә республикала 1 миллион 166 мең кеше киҙеүгә ҡаршы прививка яһатҡан. Әлеге ваҡытта республикала 224 меңдән ашыу киҫкен респиратор вирусы инфекцияһы менән сирләү осраҡтары теркәлгән. Халыҡтың ауырыу кимәле эпидемик сиктән 13,7 процентҡа түбән. Киҙеү осраҡтары теркәлмәгән.

✓ Өфөләге Конгресс-холда "Торлаҡ-коммуналь хужалыҡ үҙгәрә" Бөтә Рәсәй форумы булып үтте. Сарала йәмәғәт ойошмалары, бизнес, торлаҡ-коммуналь хужалыҡ өлкәһендә эшләүсе компания вәкилдәре, торлаҡ һәм төҙөлөш өлкәһендә күҙәтеү буйынса дәүләт комитеты етәкселәре, Рәсәй субъекттары вәкилдәре - илдең 80 төбәгенән 500 самаһы делегат ҡатнашты.

✓ Быйыл Өфө эшҡыуары Рәсимә Мусина Берлинда үҙенең "Пышка" кулинария селтәрен асты. Сит илдәге тәүге башҡорт милли ризыҡтары магазины үҙәк урамдарҙың береһендә урынлашҡан. Берлиндағы бинаның тышҡы йөҙө Өфөләге "Пышка" магазиндарынан айырыла. Уны билдәле AD MODUM бюроһы биҙәгән. "Пышка" компаниялар төркөмө Өфөлә 1999 йылда барлыҡҡа килде. Әлеге ваҡытта Рәсәйҙә 20 корпоратив нөктә һәм 70-е франшиза буйынса эшләй.

✓ Бер йылда республикала Дөйөм Рәсәй халыҡ фронты ағзалары дөйөм суммаһы 200 миллион һумдан ашыу булған бер нисә тиҫтә шикле һатып алыуҙарҙы асыҡлаған. Йәмәғәтселекте йәлеп иткәндән һуң 80 миллион һумлыҡ һатып алыуҙар ғәмәлдән сығарылған.

✓ Былтыр Башҡортостанда онкология ауырыуҙары 11 процентҡа тиерлек артҡан һәм 100 мең кешегә 1884 сирле тура килгән. Күрһәткес Баймаҡ районында 742-нән алып Салауатта 3 меңгә тиклем үҙгәрә. Тәүге урында - һөт биҙе яман шеше (12,4 процент). Икенсе урында - ҡурылдай, үпкә (11,3 процент), өсөнсөлә - тире (9,6 процент), дүртенселә простата биҙенең яман шеше (8,4 процент) тора. Биш йылда яман шештән үлем осрағы 8 процентҡа артҡан. Үлемгә килтереүсе ауырыуҙарҙан тәүге урында тын юлдары (18,6), икенселә - ашҡаҙан (11), өсөнсөлә - һөт биҙе яман шеше (9 процент).

**"Башинформ"дан.**

БАШ ЙОРТТА



# ЯҢЫ ЙЫЛҒА ӘҘЕРЛӘНӘБЕҘ

**Баш ҡалала Яңы йыл байрамына ҡыҙыу әҙерлек бара. Ленин майҙанында һәм Конгресс-холл алдындағы майҙанға шыршылар ҡуйылған, байрам көндәрендә Өфө урамдарын яҡтыртып торасаҡ иллюминация яҡтылыҡ өсөн яуаплы предприятиелар тарафынан тикшерелгән. Иллюминация 40 километрға һуҙылған гирлянда һәм 46 мең ярым лампанан тора, тиҙҙән уны тоҡандырасаҡтар, тип көтөлә.**

Баш ҡаланың төп шыршыһы йылдағыса Ленин майҙанында урынлаштырылған. Был 28 метрлыҡ ҡупшыҡай Благовещен районынан килтерелде. "Горзеленхоз" хеҙмәткәрҙәре уны ошо көндәрҙә төрлө уйынсыҡтар менән биҙәргә йыйына. Байрам майҙанында шыршынан тыш тағы ла Ҡыш бабай көймәһе, майҙанға ингән ерҙә ике ҙур бүләк ҡумтаһы, шыршы алдына Ҡыш бабай менән Ҡарһылыу һәм 2016 йылдын хужаһы - Маймыл һындары урынлаштырыла. Былардан тыш, ҡала халҡы өсөн һырғалаҡ майҙансығы, ике бейек боҙло тау эшләйәсәк. Шулай уҡ Ленин майҙанындағы мөғжизәле ҡаласыҡта Яңы йылға тиклем ҡалған ваҡытты һанаусы светодиод сәғәт ҡуйыла, тип көтөлә.

Ә бына Салауат Юлаев һәйкәле алдындағы майҙанға Нуриман районы урманынан килгән ҡунаҡ - 25 метр бейеклектәге шыршы ҡуйылған. Өфөләрҙе был майҙанда традицион көнсығыш календары стилендәге биҙәктәр, боҙ һындар көтә. Боҙ тауҙары, лабиринттар, урғылып торған һыу формаһындағы боҙ ҡоролма һәм балаларҙы ғына түгел, ололарҙы ла байрам мөғжизәһенә ышандырған төрлө һындар, биҙәктәр ҡуйыласаҡ. Боҙ ҡаласыҡтарҙы тәүҙәге осталар әйтеүенсә, балаларҙың хәүефһеҙлеген тәьмин итеү өсөн бөтә һындарҙың мөйөштәре түңәрәкләтеп эшләнә, тауҙар һәҙәк итеп төҙөлә, балалар ял иткән урындар тәпәш ҡоймалар менән ҡамап алына. Шуға күрә, ҡала халҡы балаларының һаулығы өсөн һис хәүефләнмәй, был ял итеү майҙансыҡтарында саф һауала матур ял итә ала.

Өфө балалар филармонияһы бинаһы алдында ла боҙ ҡаласыҡ төҙөлә. Ундағы һындарҙы Рәсәй киноһы йылы темаһына арнап эшләргә һәм төрлө яҡтыртҡыс лампалар менән сағыу итеп биҙәргә йыйыналар. Был майҙансыҡта 23 декабрь "Где-то в зимнем царстве, в ледяном государстве" тип аталған уйын программаһы үткәрелә. Әйткәндәй, Өфөлә бөтәһе 19 боҙ ҡаласығы төҙөү планлаштырылған. Улар ҡала халҡы өсөн 25-27 декабрҙә асыла.

ЕТӘКСЕ ҺҮҘЕ



**Ҡала гәҙиттәре сәйер. Дөрөҫөрәге, ҡала кешеләренең гәҙиттәре сәйер. Йәшәгән йорто эргәһендә берәй сүп ятһын, уны әйләп алмай шул йортта йәшәгән кеше, ә торлаҡ-коммуналь хужалыҡты, унда эшләгән кешеләрҙе тәнҡитләргә тотона. Ул хатта йорто подъездындағы таҙалыҡ, тәртип өсөн дә үҙендә яуаплылыҡ тоймай. Торлаҡ-коммуналь хужалыҡ тармағында эшләгәндәр уның өсөн таҙартырға ла, һиперергә лә, йүнәтергә лә, яңыртырға ла тейеш. Эйе, бөгөн иң күп әр һүҙҙәре ошо тармаҡҡа эләгә. Ләкин тармаҡ эшләй, заман менән бергә үҙгәрә, талаптарға яуап бирергә тырыша икәнен күрергә теләгән һәр кем шөйләй ала. Өфө ҡала округы хакимиәте башлығының беренсе урынбаҫары Салауат Сәхи улы ХӨСӘЙЕНОВ менән баш ҡалабыҙҙы төҙөкләндереү буйынса атҡарылған ҡайһы бер эштәрҙе барлайбыҙ.**

# ҮҘЕҢДЕ ҠУНАҠ ИТЕП ТҮГЕЛ,

## хужа итеп той!

**➔ Салауат Сәхи улы, Һеҙ баш ҡала хужалығының иң ауыр тармаҡтарының береһе өсөн яуаплыһығыҙ. Алдағы бер-ике йылда был өлкәлә ниндәй йүнәлештәр өҫтөнлөклө урын алып торасаҡ?**

- Эшмәкәрлегебеҙҙең өҫтөнлөклө йүнәлеше - ҡаланың төньяҡ өлөшөн үҫтереү һәм төҙөкләндереү. Был йүнәлештә эштәр бөгөндән үк әүҙем алып барыла. Мәҫәлән, Беренсе май урамындағы "Енеү" паркы төҙөкләндерелде, элекке С. Орджоникидзе исемендәге мәҙәниәт һарайы алдындағы фонтанды реконструкциялау буйынса эштәр тамамланды, Индустриаль шоссе - С. Богородская - Невский урамдары саттары киңәйтелде. Шулай уҡ "Ҡала электричкаһы" программаһына ярашлы, "Спортивная" туҡталышына алып барыусы юлды төҙөү ҙә тамамланыу алдында. Ҡала округы хакимиәтенең Төҙөлөш, юлдарҙы төҙөкләндереү һәм яһалма ҡоролмаларҙы ремонтлау идаралығы тарафынан Интернационал, Вологодская, Беренсе май (Комаров урамынан Тыныслыҡ урамына тиклем) урамдарындағы юлдарҙы төҙөкләндереү эше алып барыла, Дежневский һәм Шумавцов юл үткәргестәрендәге уңайһыҙ урындар йүнәтелде.

Һуңғы йылдарҙа ҡаланы төҙөкләндереү йәһәтенән ҙур эштәр башҡарылды, ләкин алдыбыҙҙа тағы ла ҙур бурыстар тора. Әлбиттә, был эштәрҙе бер-ике йылда ғына атҡарып сығыу мөмкин түгел, шуға күрә ҡала башлығы тарафынан "100 парк һәм сквер" исемле программа билдәләнде. Уға ярашлы, ҡаланың бөтә райондарында ла яңы парктар һәм скверҙар асыласаҡ, ә булғандары яңыртыласаҡ. Шулай уҡ Өфө һәм Өфө райондарында тышҡы яҡтыртыу системаһын модернизациялау һәм яңы селтәрҙәр төҙөү буйынса ла эшмәкәрлек алып барыла.

**➔ Һуңғы егерме йылда ҡала хужалығының инфраструктураһы хәтһеҙ генә үҙгәрҙе. Был нимәгә бәйле һәм ул ҡала хужалығы эшмәкәрлегенең төп проблемаларын хәл итеүгә булышлыҡ итәсәкме?**

- Егерме йыл элек торлаҡ фондты ҡарау һәм уның менән идара итеү муниципаль ойошмалар өҫтөндә булһа, 2005 йылда РФ-ның Торлаҡ ко-

АФАРИН!

# ӨЛГӨ АЛЫР ШӘХЕСТӘР БАР



**Ошо көндәрҙә Өфөнөң Киров районы 14-се мәктәбендә үҙенсәлекле сара - Әхмәтзәки Вәлидиҙең тыуыуына 125 йыл тулыуға, БР Конституцияһы, РФ Конституцияһы көндәренә арналған байрам үтте. Уны Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты ҡарамағындағы Йәштәр советы БР Йәштәр сәйәсәте һәм спорт министрлығы, Киров районы хакимиәте һәм 14-се мәктәп коллективы менән берлектә ойошторҙо. Был көндә тарихсылар, төрлө йәмәғәт ойошмалары вәкилдәре, тиҫтәләгән йәштәр арҙаҡлы ғалимға ҡуйылған таҡтаташ эргәһенә сәскәләр һалды, байрам уңайынан ойошторолған төрлө спорт ярыштарында ҡатнашты, Әхмәтзәки Вәлиди исемендәге кабинет-музейға һаҡланған ҡомартҡылар менән танышты. Ете команда волейболда Әхмәтзәки Вәлиди исемендәге кубок өсөн көс һынашһа, батырҙар кемдең беләк һәм бил көсө ҡеүәтлерәк икәнлеген гер күтәреп һынаны. Беҙ үҙ сиратыбыҙҙа сара барышында яңғыраған ҡайһы бер фекерҙәрҙе ҡуйын дәфтәребеҙгә теркәй йөрөнөк.**

***Әлфинур ҒИЗЗӘТУЛЛИНА, 14-се мәктәптең башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы, Әхмәтзәки Вәлиди исемендәге кабинет-музей мөдире:*** Әхмәтзәки Вәлиди исемендәге кабинет-музей 2008 йылдың 11 декабрендә асылды. Музей фондын тулыландырыуға Киров районы хакимиәте, геройыбыҙҙың туғандары, Әхмәтзәки Вәлиди исемендәге Республика китапханаһы, төркиәтсе Әхәт Сәлихов гәйәт ҙур өлөш индерҙе. Музейҙа юлбашсыбыҙҙың китаптары, ҡулъяҙмалары, шәхси әйберҙәре һаҡлана.

Беҙгә йыл да төрлө яҡтан, хатта сит илдәрҙән ҡунаҡтар килә. Вәлидиҙең улы Сүбидәй менән ҡыҙы Иҫәнбикә лә, туғандары ла йыш була. Вәлидиҙең тыуған ауылы - Ишем-

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓Был аҙнала республикала бер аҙ һыуытты. Аҙнаның икенсе яртыһында һауа температураһы төндә 15-20, республиканың көнсығышында 25 градусҡа тиклем төштө. Көндөҙ 10-15, айырым райондарҙа 20 градусҡаса һалҡын булды. Йәкшәмбе, 20 декабрҙә, циклон яҡынлашыуы сәбәпле, бер аҙ ҡар яуыуы көтөлә. Буран сығыуы ихтимал. Уҙған аҙнала йылы һауа торошо ошо осорҙағы норманан 6 градусҡа юғары булды (норма - 9 градус һалҡын).

✓22 декабрҙә "Башҡортостан" дәүләт концерт залында төп Яңы йыл байрамы - республика Башлығы шыршыһы үткәрелә. Байрамға республиканан 780 бала саҡырылған. Улар араһында - уҡыу алдынғылары, мәктәп олимпиадаларында, ил һәм төбәк фестивалдәрендә, конкурстарҙа, спорт ярыштарында еңеүселәр, хеҙмәт бурысын үтәгәндә һәләк булған хәрбиҙәрҙең һәм эске эштәр органдары хеҙмәткәрҙәренең, аҙ тәьмин ителгән ишле ғаиләләрҙең балалары.

✓Зәйнәб Биишева исемендәге Башҡортостан "Китап" нәшриәтендә "Башҡорт теленең академик һүҙлеге"нең VII томы баҫылып сыҡты. Унда П, Р һәм С хәрефтәренән башланған һүҙҙәр тупланған. Һүҙлек төрлө лексик материалды, киң таралған диалектизмдарҙы, иҫкергән һәм яңы һүҙҙәрҙе, фәнни һәм халыҡ терминологияһын үҙ эсенә алған. Һүҙҙәрҙең һәм фразеологик берәмектәрҙең аңлатмаһы башҡорт һәм рус телдәрендә бирелгән. Баш һүҙ иһә - башҡорт, рус, инглиз, төрөк телдәрендә.

✓Ғинуар-октябрь айҙарында банктар Башҡортостан халҡына 21,09 миллиард һумға 15,4 мең ипотека кредиттары биргән. Уҙған йылдың ошо уҡ осоро менән сағыштырғанда төбәктә ипотека кредитлауы өстән бер өлөшкә кәмегән. Уртаса алғанда быйыл республикала ипотека кредиттары 14 йылға йылына 13,9 процент менән бирелгән. 2014 йылдың ғинуар-октябрь айҙарындағы уртаса күрһәткестәр - 15 йыл һәм 12,5 процент.

✓Рәсәй почтаһының Башҡортостан филиалында Яңы йыл байрамдарында бүлексәләрҙең эш режимы билдәләнде. 31 декабрҙә һәм 6 ғинуарҙа эш көнө бер сәғәткә ҡыҫҡара. 1,2,7 ғинуар - ял көндәре. 3, 4, 5, 8, 9, 10 ғинуарҙа почта бүлексәләре гәҙәти режимда эшләй.

✓ *Өфө халҡының да үҙҙәрен ошо ҡалала ҡунаҡ түгел, ә хужа булыуҙарын иҫтән сығармаҫҡа һәм үҙ йорттарын таҙалыҡта торорға тырышыуҙарын теләйем.*

дексы ҡабул ителгәндән һуң, күп фатирлы йорттарҙа милек эйәләренең роле артты. Әгәр ҙә 2010 йылда Өфөлә яҡынса 40-лап идара итеү ойошмаһы һәм торлаҡ милекселәренең 60 ширҡәте эшләһә, бөгөнгө көнгә иһә ҡалала 76 ТСЖ һәм 100 идара итеү ойошмаһы теркәлгән. Торлаҡ-коммуналь хужалыҡ өлкәһендә алып барылған реформа маҡсаттарының береһе булып һөҙөмтәле конкурентлыҡ мөнәсәбәттәрен үҫтереү тора. Был, үҙ сиратында, торлаҡ милекселәренә заманса талаптарға яуап биреүсе идара итеү ойошмаһын һайлау мөмкинлеге бирә. Шулай уҡ был торлаҡ фонды менән идара итеү, ремонтлау һәм тәьмин итеү сифатын яҡшыртыуҙа ла үҙенең ыңғай ролен уйнаясаҡ.

**➔ Өфөнөң торлаҡ-коммуналь хужалығы тармағында ниндәй яңы технологиялар ҡулланыла?**

- Был йәһәттән ҙур эштәр башҡарыла. Мәҫәлән, торлаҡ йорттарҙағы яҡтыртыу системаһы модернизациялана. Хәҙер күпселек йорттарҙың дөйөм ҡулланыу урындарын яҡтыртыу өсөн энергия һаҡлаусы, фотореле (көн - төн), энергияны әҙерәк ҡулланыусы светодиод яҡтыртҡыстар, хәрәкәт итеү датчиктары ҡуйылған. Шулай уҡ йылылыҡ һәм һыу менән тәьмин итеүҙә лә күп кенә яңылыҡтар бар.

Урам һепереүселәрҙең ҡул хеҙмәтен еңеләйтеү маҡсатында ҡышҡыһын йорт алдарын йыйыу өсөн бәләкәй габаритлы техникалар һатып алына. Бөгөнгө көндә ҡалала ошондай 18 техника ҡулланыла. Ихаталарҙың еңел автомобиль менән тулы булыуын иҫәпкә алғанда, бындай төр техниканың әһәмиәте ҙур.

Мәғлүмәти инфраструктура төҙөү сиктәрендә Өфө - Аэропорт юлында юл хәрәкәте менән автоматлаштырылған рәүештә идара итеүҙе күҙаллаған ҡоролмалар урынлаштырыу өсөн 7 яңы металл конструкция урынлаштырылды. Руль артындағыларға мәғлүмәтте 65 идара итеү знагы һәм 12 динамик мәғлүмәти табло еткерә. Юл хәрәкәте менән идара итеү автоматлаштырылған системала булыуы уны берҙәм үҙәктән контролдә тоторға, таблоға төрлө, шул иҫәптән һауа торошо тураһында мәғлүмәт бирергә мөмкинлек тыуҙыра.

**➔ ШОС һәм БРИКС саммиттары ваҡытында ҡаланың торлаҡ-коммуналь хужалығы хеҙмәткәрҙәре бөтә донъянан килгән ҡунаҡтарға бынамын тигән хеҙмәтләндереү өлгөһө күрһәтә алды. Ошо хаҡта нимә әйтерһегеҙ?**

- Саммиттарға әҙерлек барышында ҡаланың тышҡы йөҙөн яҡшыртыу маҡсатынан Өфө ҡала хакимиәте тарафынан оло эштәр башҡарылды. 2012-2015 йылдар дауамында халыҡ-ара кимәлдәге сараны ҡабул итеү өсөн ҡаланың торлаҡ фонды, башлыса биналарҙың фасадтары, төҙөкләндерелде. Ошо ваҡыт арауығында Өфөлә яҡынса 650 торлаҡ йорт һәм бина фасадтары ремонтланды, 541 ихатала юлдарға асфальт түшәлде. Ә быйылғы йылдың апрель-июль айҙарында ҡала биләмәһендәге 500 мең квадрат метр урам-юл селтәрендә төҙөкләндереү барҙы һәм әлеге көндә лә был эш дауам итә. Сағыштырыу өсөн: 2014 йылдың төҙәлөш миҙгелендә был һан 517 мең квадрат метрға тура килә.

Хакимиәт алдында торған төп бурыстарҙың береһе - "Өфө - Аэропорт" автомобиль юлын өҙлөкһөҙ хәрәкәт итеү магистрале кимәленә еткереү. Был эш уңышлы атҡарып сығылды. Шулай уҡ Чесноковка ҡасабаһы янында ике кимәлдәге транспорт саттары төҙөлдө, "Кооператив аҡлан", "Озерная", "Металл базаһы", "Ял кафеһы" янындағы йәмәғәт туҡталыштарында ер өҫтө үткәүеле эшләнде. Эштәр саммиттарға тиклем үк тамамланды. Халыҡ-ара саралар ваҡытында бөтә коммуналь хеҙмәттәр ҙә тәүлек әйләнәһенә эшләне. Коммуналь хеҙмәттәрҙең ойошҡан һәм бер йайға һалынған ритмда эшләүе ҡала һәм республика етәкселеге тарафынан оло баһаға лайыҡ булды.

**➔ Салауат Сәхи улы, гәзит уҡыусыларға ниндәй теләктәрегеҙ булыр?**

- Ҡаланың торлаҡ-коммуналь хужалығы хеҙмәткәрҙәре Өфөнөң таҙа һәм йыйнаҡ булыуы өсөн бар тырышлығын һала. Өфө халҡының да үҙҙәрен ошо ҡалала ҡунаҡ түгел, ә хужа булыуҙарын иҫтән сығармаҫҡа һәм үҙ йорттарын таҙалыҡта торорға тырышыуҙарын теләйем.

---

бай районы Көҙәндәге музей менән дә тығыҙ бәйләнештә эшләйбеҙ. Көҙәнгә уҡыусылар менән үҙебеҙ ҙә йыш ҡына походтарға, экскурсияларға йөрөйбөҙ. Әхмәтзәки Вәлидиҙең тыуған көнөндә беҙҙең мәктәптә йыл һайын конференциялар үтә. Уҡыусылар араһында әҙәби ижад, фән менән, Вәлидиҙең тормошо менән ныҡлап ҡыҙыҡһыныусылар барлығы беҙҙең күңелде йылыта. Ни өсөн был кабинет-музей беҙҙең мәктәптә асылды, тиһәгеҙ, әйтәйем. 1914 йылда Әхмәтзәки Вәлиди беҙҙең ошо мәктәптә уҡытып киткән.

***Әмир ИШЕМҒОЛОВ, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты рәйесе:*** Бөгөнгө йәштәребеҙгә мин ихтирам менән бағам. Йәштәребеҙ шул тиклем аҡыллы, төплө белемле. Уларҙың ошо аҫыл сифаттарын маҡсатлы рәүештә файҙаланыу - беҙҙең бурыс. Әле күптән түгел генә Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты ултырышы үтте, беҙ яңыса ҡараш менән эшләргә, йәштәр менән һөҙөмтәле хеҙмәттәшлек итергә тигән маҡсат алдыҡ алдыбыҙға. Бөгөн үткәрелгән сара беҙҙең бер төптән башҡарылған эштәрҙең матур башланғысы ул. Киләсәктә бындай сараларға Башҡортостанда йәшәүсе бөтөн милләт йәштәрен дә саҡырырға тейешбеҙ. Бөгөн беҙгә маҡсатлы, һау-сәләмәт, белем үрҙәрен артылған, республика өсөн илһамланып хеҙмәт иткән, тырышып тормош көткән йәштәр кәрәк. Донъя кимәлендәге бөйөк ғалимыбыҙ Әхмәтзәки Вәлиди һымаҡ эшлекле ғалимдар кәрәк.

***Азат ЯРМУЛЛИН, тарихсы:*** Әхмәтзәки Вәлиди, ысынында, милли батырыбыҙ Салауат һымаҡ феноменаль шәхес. Ул булмаһа, бәлки, XX быуат башындағы башҡорт милли хәрәкәте лә икенсерәк төҫ алған булыр ине. Беҙ бөгөн уның рухын иҫкә алабыҙ икән, был әле тейешле иғтибарҙың әҙе генә. Йәштәребеҙ ошондай шәхестәребеҙҙе, тарихыбыҙҙы өйрәнергә тейеш. Сөнки тарих - ҡуласа, ул ҡабатланып тора. Тарихты яҡшылап өйрәнһәк, заман һынауҙарын да әҙерлекле ҡаршылап, уларҙы еңелерәк үткәрербеҙ. Зәки Вәлидиҙең хеҙмәттәрен, шәхси өлгөһөн өйрәнәйек.

***Рифат БИКҠОЛОВ, Йәштәр советы рәйесе урынбаҫары:*** Әхмәтзәки Вәлиди 30 йәшендә генә милләтебеҙ, республикабыҙ өсөн шундай бөйөк эштәр эшләп өлгөргән. Уның көрәштәше Шәйехзада Бабич язалап үлтерелгән сағында ни бары 24 йәштә генә булған. Ысынлап та, кемгә тиңләшергә, кемдән өлгө алырға тип аптырарға кәрәкмәй беҙгә - шәхестәребеҙҙең тормош юлына һәм эшмәкәрлегенә күҙ һалыу ҙа етә.

**Илгиз ИШБУЛАТОВ яҙып алды.**

---

*КӨН ҠАҘАҒЫ*

# ЯДРО ҠОРАЛЫ ТЫЙЫЛМАҺА...



**Ағымдағы йылдың 7 декабрендә Берләшкән Милләттәр Ойошмаһының Генераль секретары Пан Ги Мун донъялағы бөтә ядро ҡоралын юҡ итергә саҡырып, нәүбәттәге сығышын яһаны. Ошо уҡ ваҡытта тиерлек Польшаның Оборона министры урынбаҫары Томаш Шатковский, Варшава НАТО-ға АҠШ-тың ядро ҡоралын үҙ биләмәһендә урынлаштырыуҙы һорап мөрәжәғәт итә ала, тип белдерҙе. Министр урынбаҫары был һүҙҙәре менән БМО Генераль секретарының сығышын бөтөнләй инҡар итте. Ул, ғәмәлдә, альянс алып барған сәйәсәттең ике яҡлы булыуын асып һалды. Тимәк, яҡын арала ядро ҡоралы тирәләй барған хәл-ваҡиғаларҙың ыңғай тамамланыуын түгел, киреһенсә, ҡуйырыуын көтөргә кәрәк.**

Үҙ ваҡытында Советтар Союзында ядро ҡоралы булыу ғына өсөнсө донъя һуғышы башланыу мөмкинлеген туҡтатып килде. Был ҡорал "башбаштаҡланырға" әҙер илдәрҙе киҫкен аҙымға барыуҙан тотоп тороусы стратегик сара булды һәм әле булһа ошо ролде үтәй. Шуға күрә, әлеге мәлдә ер йөҙөндә булған бөтә ядро ҡоралынан ҡотолоуҙың альтернатив мөмкинлектәре ысынында юҡ. Һәм был, кемгә кемгә, ә Пан Ги Мунға яҡшы билдәле. Шулай ҙа ядро ҡоралына эйә булған илдәр әленән-әле бергә йыйылып, был хәүефте юҡ итеү тураһында фекер алыша, уны таратмау юлдарын барлай, тик уртаҡ фекергә килә алмай. Ғөмүмән, йәҙрә ҡоралына ҡағылышлы төрлө килешеүҙәрҙең "яҙмышы" ауыр хәлдә ҡала килә. Мәҫәлән, ядро ҡоралын ниндәй булһа ла мөхиттә (ер һәм һыу өҫтөндә, аҫтында, һауала, атмосферала) һынауҙы тыйған килешеүҙе ядро ҡоралына эйә дәүләттәрҙең тик 36-һы ғына раҫлаған. АҠШ, Ҡытай, Израиль, Иран һәм Мысырҙың килешеүҙе раҫлауға әле булһа "ҡулы етмәй". Ә Корея, Һиндостан һәм Пакистан килешеүгә ҡул ҡуйыуҙан бөтөнләй баш тартты.

Барлыҡ ошо күренештәр фонында Польшаның да ядро ҡоралына эйә булырға тырышып ятыуы хәүефләндермәй ҡалмай, әлбиттә. Быға тиклем был хәүефле ҡоралы булмаған илдең НАТО-ның ядро миссияһына ҡушылырға тырышыуы Ядро ҡоралын таратмау тураһындағы килешеүгә ҡапма-ҡаршы килә. Шуға күрә, әгәр ҙә НАТО Варшаваның был теләгенә ҡаршы бармайынса, АҠШ-ҡа ядро ҡоралын Польша биләмәһендә урынлаштырырға ризалыҡ бирһә, бөтә донъя кимәлендә ҡабул ителгән төрлө килешеүҙәрҙең һуҡыр тингә лә тормауы асыҡ сағыласаҡ. Был осраҡта, НАТО ағзаһы булмаған Рәсәйгә, хәрби-сәйәси блоктың етәкселеге һөйләгән һүҙҙәрҙең буш булыуын һәм альянс үҙенең ядро сәйәсәтен үҙгәртергә теләмәүен иҫтән сығарырға ярамай. Нимә генә тимә, килеп тыуған ауыр ситуацияны хәл итергә тырышыуҙан уны алдан иҫкәртеү һәм тейешле сараһын күреү күпкә яҡшыраҡ.

**Сәлимә АРЫҪЛАНОВА.**

---

## Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Микоз

❖ Микоз - кешелә һәм хайуандарҙа паразит бәшмәктәр ҡуҙғыта торған ауырыуҙарҙың дөйөм атамаһы. Тире ауырыуҙары араһында улар иң йыш осрай һәм көслө ҡысыу, тире ҡыҙарыуы, ярылыуы менән күҙәтелә. Башта үксәлә барлыҡҡа килгән бәшмәк яйлап балтырға һәм унан өҫкә лә күсә ала. Бәшмәк ауырыуҙары тирелә булғанда кешенең дөйөм хәле артыҡ үҙгәрмәй, әммә бәшмәктәрҙең эске ағзаларға үтеп инеү ҡурҡынысы бар. Микозды дауалағанда бәшмәкте юҡҡа сығарырға һәм иммунитетты күтәрергә кәрәк.

❖ Халыҡ медицинаһында тиреләге бәшмәкте аҡһырғаҡ (чемерица), эт ҡарағаты (черный паслен), ломонос, ҡалҡанут (щитовник), тис, саған (клен), келән ҡурай (дудник), күкбаш (синеголовник), фенхель, балтырған (борщевик), мәкә (бедренец), аир үләне, һырлауыҡ (плющ), меңъяпраҡ (тысячелистник), әсе үлән (горчак), дегәнәк (лопух), әрем (полынь), маргаритка, ромашка, еҙтөймә (пижма), бәпембә, артыш, ҡомалаҡ, мәк еләге (клюква), татлы тамыр (солодка), ҡурай еләге, мелисса, шалфей, етен (лен), көртмәле, ҡаҙ үләне (лапчатка), екән (рогоз), аҡ шыршы (пихта) дауалай. Үләндәрҙең һәр береһен йәки бер нисәһен бергә ҡушып төнәтмә эшләп, тирегә компресс һалырға, ваннаға өҫтәргә.

❖ Ҡайнап ултырған һыуҙа вазелинды йәки сусҡаның эс майын иретеп уға алда килтерелгән исемлектәге бер йәки бер нисә төр үләнде ҡушып, талғын утта 2-4 сәғәт ҡайнатырға. Һөҙөргә һәм бәшмәк менән зарарланған тирегә һөртөргә. Иртәле-кисле ҡулланғанда тағы ла яҡшыраҡ. Майҙы һыуытҡыста һаҡларға.

❖ Иммунитетты нығытыу өсөн: тәлмәрйен тәңкәһе (ряска), эт дегәнәге (чистотел), юшан (вероника), татлы тамыр (солодка), һаҙанаҡ (багульник) үләндәрен тигеҙ өлөштә алып, төнәтмә яһап эсәләр.

❖ Ашҡаҙан-эсәк трактын бәшмәк зарарлаһа: алтей, меңъяпраҡ (тысячелистник), бөтнөк (мята), бәпембә, бабаҫыр уты (горечавка), жостер, еркәүек (лабазник), гәрсис (горчица), ҡомалаҡ (хмель) төнәтмәләре ҡулланырға була.

**Айбикә ЯҠУПОВА.**

✓ *"Тотолған бур шикелле, ҡойолоп төштөм. Мин бит, үҙемә лә танырға ҡурҡып, шулай уйлап йөрөй инем. Хәҙер атайыма хыянат иткән ише тоям. Уның эскелегенән, иҫерек килеш көн дә күтәрелгән ғауғанан мин ялыҡҡайным шул".*



*ЙОЛАЛАРЫБЫҘ*



# ҺОМАЙ - тәү әсәбеҙ

**"Урал батыр" эпосында Һомай Урал батырҙың ярҙамсыһы булып сығыш яһай. Уға күктә йәшәгән фантастик атын, булат ҡылыс бүләк итә.**

Донъяны тыуҙырыусының һәм Урал батырҙың ҡатыны булараҡ, Һомай башҡорттар йәшәгән ерҙең тәбиғәтен булдырыуҙа ҡатнаша. Уның ҡушыуы буйынса, Урал батырҙың улдары булат ҡылыс менән тауҙарҙы уртаға ярып, Иҙел, Яйыҡ, Нөгөш йылғаларына баш бирә, ә Айһылыу менән Шүлгәндең улы Һаҡмар йылғаһы үҙәнен йырып ебәрә. Һомай Урал тауына йәнлектәр һәм ҡоштар эйәртеп алып килә, уларҙың артынан Уралға мифик үгеҙ Ҡатил һәм күк аты Аҡбуҙаттың нәҫеле күсеп килә. Билдәләнеүенсә, Һомай - Урал батырҙың ҡатыны һәм Иҙелдең әсәһе булараҡ, башҡорттарҙың ете ырыуының тәү әсәһе тип ҡабул ителә. "Аҡбуҙат" эпосында Һомай Шүлгәндең һыу аҫты батшалығында тотҡонда булған ҡыҙҙарҙың әсәһе тиелә. Ире һәләк булғандан һуң, мәңгелеккә аҡҡошҡа әйләнгән Һомай аҡҡоштарҙың тәү әсәһе була, йәғни, тотемик тәү әсә булып иҫәпләнә. Был идея башҡорттарҙың антропонимдарында ла сағыла. Улар араһында Һомай нигеҙле исемдәр киң таралған була: Хөмәйрә - ҡатын-ҡыҙ, Имай ир-ат исеме.

Ышаныуҙар буйынса, Һомай ҙур көскә, бәрәкәткә эйә. Башҡорт шағиры һәм ғалимы Т. Ялсығол (1768 - 1838) XVIII быуатта яҙып алған бер яҙмала әйтелеүенсә, әгәр ҙә һауала осоп барған Һомайҙың күләгәһе берәй кешегә төшһә, ул Йыһан батшаһына әүерелә.

"Һомай-ҡош" әкиәтендә бер поп Һомай ҡоштоң йөрәген һәм мейеһен ашатһа, тол ҡатынға өйләнергә ризалығын белдерә. Был ҡатын үҙенең ихатаһында йәшәгән Һомай ҡошто һуйып, ҡаҙанға башын һәм йөрәген бешерергә һала. Әммә был ризыҡтарҙы яңылыш ҡына үгәй улдары ашай ҙа ҡуя - өлкәне - йөрәген, кесеһе ҡоштоң башын. Асыуланған үгәй әсәй улдарын тауҙар артына алып барып, йәнлектәргә өҙгөләргә ташлай. Егеттәр урман эсендә аҙашып йөрөгәндән һуң, юлға килеп сыға һәм төрлө яҡҡа китәләр. Өлкән ағаһы батша һайланып ятҡан бер ҡалаға килеп сыға. Кемдең иңенә Һомай ҡош ултыра, шул батша булырға тейеш була. Һомай ҡош өс тапҡыр был егеттең иңенә ҡуна, ул батша итеп һайлана. Ә кесе ҡустыһы мәғжизәле әйберҙәрҙең хужаһы булып китә, ҡоштар телен аңларға өйрәнә һәм ҡош-ҡыҙға өйләнә.

Был сюжеттарҙа шуны күрәбеҙ: боронғо кешеләр тотем ҡош кешенең яҙмышын үҙгәртеп ебәреү һәләтенә эйә, тип уйлаған. Тотем ҡоштоң итен ашау йолаһы иһә уның үрсемен тағы ла арттырыу һәм уға тиңләшеү өсөн башҡарылған.

Һомай тураһындағы ошондай уҡ фекерҙәр "Аҡбуҙат" эпосының бер эпизодында ла күренә: яралы ҡанаттарын дауалаған өсөн рәхмәтле булған Һомай төп герой Һәүбәнде ҡанаттарына ултыртып, Мәсем хандың яуыз ярҙамсылары ете башҡорт батырын ҡол итеп һатҡан диңгеҙ арьяғындағы батшалыҡҡа алып барырға тәҡдим итә. Тик осоп барған саҡта Һәүбән үҙенең һәм азат ителгән батырҙарҙың бот итен ҡырҡып алып ашатып барырға тейеш була. Кире ҡайтҡас, Һомай уларҙың яраһын Аҡбуҙаттың ауыҙынан сыҡҡан күбек менән дауалай. Йәғни, башта ул йолаға бағышлау мәлендә үҙенә ҡорбан ала, һуңынан уларҙы терелтә һәм тәүге йәмәғәт ҡоролошоноң тулы хоҡуҡлы ағзалары итә.

**Азалия ИЛЕМБӘТОВА.**
**"Башҡорттарҙың изге ҡоштары" китабынан.**
**(Дауамы бар).**

*АТАЙ ҺҮҘЕ*

**Ата-әсә өсөн сабый баланы бағыу, уны тәпәй баҫтырып, кеше араһына сығарыу мәле татлы ла, үтә йонсотҡос та. Тамағын хәстәрләү, аҫтын бер туҡтауһыҙ ҡоротоп алыу, тәнен һылап тороу, йоҡоһоҙ төндәр, ҡабатланып торған сырхауға ҡаршы көрәш - ата-әсәнән сабырлыҡ талап иткән, бер нисә йылға һуҙылған көндәлек бөтмәҫ-төкәнмәҫ мәшәҡәттәр. Баланың йылмайыуы, ятҡан урынынан аяҡ-ҡулын сабыулап талпыныуы, тәпәй баҫып китеүе, тәүге һүҙе, һөйләшә башлауы - былар инде шул ыҙаларың өсөн мул бүләк, йәнеңә яғылған бал һәм май. Мин үҙебеҙгә һәм уландарыма тағы бер бүләк эшләгәнмен: балаларымдың шул ҡабатланмаҫ бала сағының ҡайһы бер мәлдәрен ҡағыҙға теркәп барғанмын. Шул яҙмаларымдан өҙөк тәҡдим итмәксе булдым әле "Киске Өфө" гәзитен уҡыусылар иғтибарына.**

# УЛАНДАР ТӘРБИӘҺЕ ТУРАҺЫНДА ҺӘМ...



## ул турала ғына ла түгел

### Ир балаға атай кәрәк

Балаға иң элек, әлбиттә, әсәй кәрәк. Атай кеше өс көн юғалып торһа ла, бала артыҡ көйһөҙләнмәҫ. "Атай ҡайҙа ул?" - тип, өйҙәгеләрҙе теүәлләп кенә һорар ҙа, яуабын көтөп тә тормай, яңынан уйынына керешеп китер.

Атай ҡәҙерен бала аҙаҡтан ғына белеп-тоя. Ирҙең ғаиләлә ҡәҙерһеҙ булып ҡалыуы ла ихтимал. Әгәр хужа дәрәжәһен тота алмаһа, мал тапмаһа, холоҡ-фиғеленән бала үрнәк алмаһа, уны тоғро, ышаныслы дуҫы күрмәһә...

Нәҡ ошо фекерҙең төбөнә төшөп етә алмай уйланып йөрөгәндә, тормошҡа фәлсәфәүи ҡарашлы эштәге бер коллегам: "Ғаилә тормошо оло ижадҡа бәрәбәр", - тип, уға юл ярҙы, үҫтереп ебәреүгә этәргес бирҙе. Ә ғаилә тураһында тәрән мәғәнәле һүҙҙең әйтелеүе тотош ҡаланы тетрәндергән фажиғәгә бәйле ине.

Ун дүрт йәшлек ҡыҙ бала зажигалка газы еҫкәп һәләк булды. Шулай газ еҫкәп, буш ваҡыттарын "күңелле" үткәргәндәр улар. Бер төркөм үҫмер, эңер төшкәс, тәүҙә ташландыҡ бер бинала өйкөлөшөп, алама шөғөлдәре менән булғандар. Шунан уны балалар баҡсаһы биләмәһенә инеп дауам иткәндәр. Улар - кемдәрҙеңдер ғәзиз, ҡәҙерле үә йән атып торған ҡошсоҡтары, ҡолонсаҡтары. Был ваҡытта ата-әсәләре киске аш әҙерләгәндер, бәлки, балаларын ашатып тышҡа сығарғас, телевизор ҡарап, интернет киңлектәрендә сәйәхәт ҡылып, эштән һуң ял итеп ултырғандарҙыр. Ата-әсә - өйҙә, балалары - урамда. Һәр ҡайһыһының үҙ тормошо. Ғаилә мөнәсәбәттәрен нығытыу, балалар юлдан яҙмаһын өсөн, был ике тормоштоң киҫешеү нөктәләре - яҡындан тороп аралашыу, бергә хужалыҡ эштәре менән булышыу, дәрес әҙерләү, концерт-театрға йөрөү - булырға тейеш. Юҡ икән - бәлә килерен көт тә тор.

Фажиғәле үлгән ҡыҙ баланың әсәһе өсөнсөгә кейәүгә сығып, ғаиләлә йәш бала тәрбиәләгәндәр. Бер йыл элек, өйҙән аҡса юғала башлағас, әсә балиғ булмағандар эше буйынса комиссияға мөрәжәғәт итә. Тимәк, үҙ балаһына баш була алмай, дәүләттән ярҙам һорай.

Күптәребеҙ үҙ балаларыбыҙ менән аңлаша алмай, ара боҙоу сигендә бер генә тапҡыр торманыҡ. Эйе, ысынлап та, ғаилә тормошо оло ижадҡа бәрәбәр. Балаларың менән аралағы йылы мөнәсәбәтте емереп ташлау өсөн күп кәрәкмәй: киҫкен мөғәмәлә, бер нимәгә ҡарамай үҙ һүҙеңде һүҙ итергә ынтылыу, баланы ла ихтирам итергә кәрәклеген онотоу, уның намыҫына теййеү, кәмһетеү. Бындай баҫымға дусар ителгән бала, характерына ҡарап, йә баҫыла, йә йәшерен үс алыу юлын һайлай, йә "ҙурайып алайым әле..." тип, асыуын йәшерә.

1991 йыл, декабрь. Эш аҙнаһы үтеп китте. "Мунсаға барһаң, минә инеп сыҡ. Миндек алам. Аҡыртып сабырмын үҙеңде", - Кәбир ағай эштән ҡайтып барышлай шулай тине... Йома көнө эштән һуң беҙ дөйөм мунсаға йөрөй торғайныҡ.

Алда - ике көн ял! Аҙналыҡ тирҙе йыуып, талсыҡҡан тәнде сабып алһаң, яңынан тыуғандай булаһың. Ике көн ялың үҙе бер кинәнескә әүерелә. Йәйләп үҙ эштәрең менән булаһың, ҡабаланмай, ләззәтләнеп башҡараһың уларҙы. Диванға һуҙылып төшөп ятып, уҡылмаған гәзит-журналдарҙы ҡарап сығаһың... һәм абайламаҫтан ойоп китеп, әүен баҙарына барып ҡайтаһың. Телевизор ҡарайһың - ни ҡылһаң да үҙ ихтыярыңда.

Тик мин үҙ иркемдә түгелмен. Минең ике кескәй улым - йән киҫәктәрем бар. Улар иғтибар, иғтибар һәм иғтибар талап итә.

- Атай, уйнайыҡ, атай, "оп" ит, - тип ҡулдан тартып торғанда, нисек итеп үҙеңдең кинәнесең тураһында уйлайһың инде. Һин - ошо кескәйҙәр ихтыярында!

Мунсала үс ҡанғансы сабынып, инде ҡайтырға була кейенеп ултырғанда ошо уйҙар үтте башымдан. Кәбир ағайға ҡарап, уның хөрриәт тормошона көнләшеп ҡуйҙым. Өс балаһы ла башлы-күҙле. Ҡатыны менән икәүләп өс бүлмәле фатирҙа йәшәйҙәр. Баҡсаһы, һарайында ҡош-ҡорто булғас, баҙы ла, һыуытҡысы ла ризыҡ ниғмәттәре менән тулы. Бөгөн уның бер ниндәй ҡайғы-хәстәре юҡ. Донъяһы етеш, бөтөн. Ҡайтҡас, рәхәтләнеп баллап, сәй эсер, йомшаҡ диванынан урын алыр, телевизорын ҡабыҙыр. Атай бурысын намыҫлы атҡарып, инде ҡартая башлаған кешегә тағы ни кәрәк был донъялыҡта?

Бер ваҡыт мин дә шул йәшкә етермен. Ә әлегә эшкә киткәндә Айгиз миңә: "Атай, пока", - тип ҡул болғап ҡала. Кейемгә үрелгәнде күргән Айнур ҙа: "Атай", - ти башлай талпынып.

Ғаиләле кеше - ирекһеҙ кеше! Насармы был? Кешенең ирекһеҙләнеүе насар, әлбиттә... Тик был осраҡта түгел. Сөнки ғаилә нәҫел ебен дауам итеү өсөн ҡорола һәм ҡорбанһыҙ булмай.

Был юлдарҙы яҙыуы ғына анһат, ә, асылда, башкөллө ғаиләңә, балаларыңа бирелеп китеү бик ауыр һәм байтаҡтар өсөн мөмкин дә түгел. Бигерәк тә ирҙәр өсөн. Беҙҙең аҫҡы аңда бала тәрбиәләү, усаҡ утын һаҡлау - ҡатын-ҡыҙ бурысы тигән инаныу ныҡлы урын алған. Мәғрифәт, мәҙәнилек киң таралған бөгөнгө заман йәмғиәтендә лә ул үҙ позицияларынан сигенергә ашыҡмай.

Минең бер яҡын дуҫым, асылып китеп, үҙенең күңел яраһы тураһында һөйләгәйне. Ул, ун йәшлек бала, атаһы үлгәс, бөтә туғандары менән бергә ҡайғырған, илаған, шул уҡ ваҡытта бынан ары ғаиләләренең, үҙенең дә тормоштары ыңғайға үҙгәреүен аҫҡы аң менән тойомлап, кинәнгән дә. Уйтойғоларын үҙе лә аңларлыҡ йәштә булмаған малай, кисерештәренә артыҡ иғтибар бирмәй, мауыҡтырғыс бала саҡ мәшәҡәттәре менән йәшәп ятҡанда, башҡа ауыҙҙан үҙ халәтенә ҡағылышлы хәбәр ишетә. Йәйге селләнең төнө лә тынсыу. Өйҙә - тын алғыһыҙ. Шуға ул eләҫтә - соланда - йоҡлай. Иртәнсәк сепаратта һөт тартырға килгән күрше инәй менән әсәһенең һөйләшеүенә уянып китә.

- Балаларға ҡыйын, атайһыҙ ҡалдылар, - ти әсәһе уфтанып.

- Атайһыҙлыҡ яҡшы түгел инде. Етемде ҡыйырһытыуы бер ни тормай. Икенсе яғынан ҡараһаң, эскесе, янъялсы атайҙан да ялыҡҡайны бит балаларың. Хәҙер тынсып, атайҙың булмағаны яҡшы, тип йөрөүҙәре лә ихтимал, - тип үҙ фекерен белдерә күрше инәй. "Ошо ерҙә, тотолған бур шикелле, ҡойолоп төштөм. Мин бит, үҙемә лә танырға ҡурҡып, шулай уйлап йөрөй инем. Хәҙер үҙемде хыянатсы, атайыма хыянат иткән ише тоям. Ғәйепһеҙ ғәйеплемен. Ысынлап та, уның эскелегенән, иҫерек килеш көн дә күтәрелгән ғауғанан мин ялыҡҡайным шул", - тип эске кисерештәре менән уртаҡлашҡайны дуҫым.

Үлеменә үҙ балаларың ҡыуанһа, бынан да аянычлыраҡ нимә булыуы ихтимал? Уның атаһы бал ҡорто иләүендә һоро ҡорт булып йәшәгән, ғаиләһендә эше булмаған, тимәк.

Күҙ алдымда икенсе күренеш тора. Айнурға ете йәш. Ул дуҫтары менән телевизорға тоташтырып уйнатылған "плейстейшен"дың теремек персонаждарын экранда мәрәй артынан ҡыуалата. Тик бер мәл күп тотоноуҙан ҡаҡшап бөткән пульты тағы эшләүҙән туҡтаны.

- Атай, йүнәтеп бир әле, - тип янына килде ул.

Йәбештергесте алып, ҡыҙҙырырға ҡуйҙым да, өҫтәл артына ултырып, пультты астым. Айнур малайҙары менән өҫтәлдең икенсе башына ҡунаҡланы. Йәбештергес ҡыҙҙы. Мин айырылып сыҡҡан сымды урынына йәбештерә башланым.

- Атай, һин добрый, ивит, - ти бер ваҡыт Айнур бер сәбәпһеҙ. Ике ҡулын өҫтәлгә һалған да, уларға эйәген терәгән, күҙҙәре - миндә. Йөҙө ҡояштай балҡый. Бар булмышында - бәхетле балаға ғына хас ҡиәфәт: йөҙө йылмая һәм сикһеҙ ҡәнәғәтлек менән балҡый. Эргәһендә ике-өс дуҫ малайы тора. Уларҙың аталары юҡ ине. Бәлки, Айнур атайлы малай булыуҙан шулай кинәнеп торғандыр. Әллә дуҫтары алдында, ана, минең атайым ҡайһылай: әйткәйнем, шунда уҡ эшләй ҙә башланы, тип маһайҙымы? Нисек кенә булмаһын, ул бәхетле ине. Һәм улымдың шул мәлдәге бәхетенә мин дә өлөш индергәйнем.

**Айбулат ҒАФАРОВ.**
**(Аҙағы. Башы 48-50-се һандарҙа).**

*КИТАБЕННАС*

# ҠӨРЬӘН ҺҮҘЕ...

## йөрәктәрҙе яулауын дауам итә

**Хаҡ мосолмандар өсөн иң бөйөк Китап - Ҡөрьән бик күп халыҡтарҙың йөрәген асты, маяҡ булып, уларҙы иман юлына алып килде. Хәйер, Китап индерелә башлағандан алып был процесс туҡталғаны юҡ. Ун дүрт быуат инде ул йәндәрҙең ҡояшы һәм шифаһы. Бөйөк Китап серҙәрен ныҡыраҡ белергә, хикмәтен аңларға, уға яҡын килергә тырышҡан милләттәр һаны күбәйә генә бара. Ҡөрьән бик күп телдәргә тәфсир яһалған. Мосолман булмаған халыҡ вәкилдәренең, ғалимдарҙың Ҡөрьәнде өйрәнеп, уға мөрәжәғәт итеп, артабан үҙҙәре лә Исламды ҡабул иткәндәре мәғлүм.**



Ҡөрьәнде ғәрәп телендә камил үҙләштерер өсөн беҙҙең ата-бабаларыбыҙ ҙа, йәйәүләп тә, атта-дөйәлә лә оҙон юлдар үткән. Башҡорттарҙың да ошо изге юлда мең йыллыҡ тарихы бар. Әйе, халҡыбыҙҙың меңәр йыллыҡ тарихы Ислам дине, Ислам донъяһы, Ислам ҡиммәттәре менән бәйле. Үткән осорҙарҙа йәшәп киткән ғалимдарыбыҙ, шәйехтәребеҙ әле лә йондоҙ булып рухи күгебеҙҙә балҡый. Ләкин дәһрилек осоронда иман ныҡ зәғифләнгәйне. Әле минең бала саҡта, ҡайһылыр ауылда мулла юҡ йыназа уҡырға тип икенсе ауылдан алып килгәндәр, тип һөйләй торғайнылар. Бабайҙарҙы әбейҙәр алмаштыра башлағайны. Ләкин бер хәҡиҡәт бар: Аллаһ һүҙе донъяла бөтөнләй юҡҡа сыҡҡаны юҡ. Бәйғәмбәребеҙ аша индерелгән Изге китаптың һүнмәҫ ҡиммәттәре ун дүрт быуат буйы быуындан-быуынға тапшырыла килә. Ә бит был дәүерҙәр эсендә нимәләр генә булып үтмәне - һәр төрлө формациялар алмашынды, революциялар яһалды, батшалар ҡолатылды, әллә күпме яңы илдәр барлыҡҡа килде. Ер йөҙө һаман үҙгәрә тора, ә Ҡөрьән бар, йәшәй һәм ахырызаманға тиклем хәрефе лә үҙгәртелмәйәсәк. Уны Аллаһы Тәғәлә Үҙе һаҡлай.

Ҡөрьән һүҙе йөрәктәрҙе яулауын дауам итә. Урыҫ телендә лә бит тәфсирҙәр байтаҡ. Сүрәләрҙе, аяттарҙы урыҫ телендә шиғри рәүештә ишеттереү шулай уҡ иғтибарға лайыҡ түгелме ни! Туҡһанынсы йылдарҙа Рәсәй зыялылары йәнә Ҡөрьән-Кәримде өйрәнеү, тәфсирләү эше менән мәшғүл булды. Теодор Шумовскийҙың шиғри тәржемәһе быға миҫал булып тора. Телсе ғалим: "Ҡөрьәнде прозала аңлатыу уның матурлығын, сағылышын юҡҡа сығара", - тип асыҡтан-асыҡ әйтә. Валерия Порохованың Ҡөрьәндең шиғри телдәге тәржемәһе шулай уҡ киң ҡатламда ҡыҙыҡһыныу уятты. Ул үҙенең эшен "Перевод смыслов Корана" тип атай. Ысынлап та, Аллаһы Тәғәләнең телмәрен тәржемә итеү мөмкин түгел. Сүрәләрҙә - сикһеҙ һәм оло мәғәнәләр. Улар аша һәр бер дәүер яңы асыштар яһай. Валерия Порохованың хеҙмәте лә мосолман өммәтен йәнләндереп ебәреүгә сәбәп булды. Ҡөрьәнде урыҫ теленә тәфсирләү - Уны киң ҡатламға еткереү мөмкинлеге, тигән һүҙ. Миллионлаған кеше уны ҡулына алды. Рәсәй мосолмандарын төрлө милләт кешеләре тәшкил итә һәм Ҡөрьән-Кәримдең татар телендә лә, ҡумыҡ телендә лә тәфсирҙәре бар. Дағстандың халыҡ шағиры, арабист ғалим Абдурагим Ҡандауров ошо эште атҡарҙы. Уның хеҙмәте художестволы тәржемә тип атала.

Беҙҙә хәлдәр нисегерәк тора һуң? 1993 йылда 50 мең тираж менән сыҡҡан Ҡөрьән тәфсире ҙур ваҡиға булды. Ижади төркөм ысынлап та ҡаһарманлыҡ күрһәтте. Динебеҙ менән ҡыҙыҡһыныу бермә-бер арткан мәлдә тәфсир ошо бушлыҡты тулыландырырға булышлыҡ итте. Был китап әле лә ҡулланма булып тора. Байышев, Сөйәрғолов, Мәһәҙиевтарҙың фиҙаҡәрлеге арҡаһында күптәр Ислам ҡиммәттәренә яҡыныраҡ килде. Хәҙер ауыҙ тултырып әйтергә була: 90-сы йылдарҙағы үҙгәртеп ҡороуҙар, демократик башланғыстар рухиәт донъяһына яңы һулыш бирҙе. Башҡортса Ҡөрьән тәфсире ҙур тираж менән сыҡты. Илле мең дана тиҙ арала һатылып бөттө һәм ул әле лә һәр ғаиләлә тиерлек ҡулланылышта. Бер ни тиклем ваҡыттан һуң ҡайһы бер хаталар, теүәлһеҙлектәр асыҡланды, шуға ҡарамаҫтан, ул башҡорт телендә тәфсирләнгән иң ҙур хеҙмәт булып ҡала. Был ваҡыттан алып хәҙер тотош бер быуын үҫеп сыҡты, йәш дин әһелдәребеҙ бар, улар ҙа иң башта ғаиләлә ошо китапты ҡулға алғандыр. Заман үҙгәрә, Аллаһ һүҙе генә үҙгәрмәй. Мәңгелек. Тик уны аңлау кимәле тәрәнәйә бара. Кисәге талаптар менән генә йәшәп тә булмай. Рухи ихтыяж үҫә бара.

Илһөйәр шағир Мәүлит ағай Ямалетдин оҙаҡ йылдар Ҡөрьәнгә шиғри аңлатмалар биреү өҫтөндә эшләне. Был эште туҡтатманы, даими алып барҙы. Беҙ уның теге йәки был матбуғат баҫмаларында шиғри юлға һалынған аңлатмалары менән таныша торҙоҡ. Үтә яуаплы эш ул бөйөк Китапты икенсе телдәрҙә яңғыратырға тырышыу. Етмәһә, был эш дин әһелдәре тарафынан бик хупланмай. Төп талап - Ҡөрьәнде төп нөсхәһендә уҡыу. Ләкин бөгөн бөтөн кеше лә ғәрәп телен өйрәнә алмай. Мосолман кешеһе тәфсир һәм аңлатмаларҙы үҙ телендә уҡырға, өйрәнергә теләй икән, быным яҙыҡлығы юҡтыр. Ә ул телде өйрәнә башлар өсөн һуҡмағы, юлы, этәргесе булыуы ихтимал. Башҡорт энциклопедияһы ғилми нәшриәт комплексында шағирҙың Ҡөрьән-Кәрим сүрәләренә шиғри аңлатмаһы донъя күрҙе. Халыҡ рухы менән янған шағирҙың маҡсаты ла изге, уның шәрехтәре Ислам ҡиммәттәрен аңлауға бер һуҡмаҡ. Мәүлит ағайҙың ихтиһат итеүе бушҡа булманы. Изге Зөлхизә айында беҙ аңлатманы ҡулыбыҙға алдыҡ. Китапта 76 сүрәгә аңлатма бирелгән. Тимәк, Ҡөрьәндең яртыһынан күберәк өлөшө башҡорт телендә шиғри формала яңғыраш ала. Һәр сүрә алдынан ҡыҫҡа, әммә бик йөкмәткеле итеп сүрәнең индерелеү ваҡиғаһы бәйән ителә. Ошо тарихи конкретика сүрәнең мәғәнәһен ныҡыраҡ аңларға ярҙам итә. Бирелгән мәғлүмәттәр ябай ҙа, аныҡ та, шуның өсөн һәр сүрәнең ни өсөн әһәмиәтле икәне күңелгә һеңдерелә. Һылтанмалар шулай уҡ киң шәрех менән бирелә. Улар аша ла әһәмиәтле тарихи мәғлүмәт менән байыйсаҡбыҙ. Һүҙҙең монон тоябыҙ. Маҡсатҡа өлгәштерә торған мәргән атылыш, тип әйтер инем уны. Беҙ был хеҙмәтенең ташҡа баҫылыуы менән Мәүлит Ямалетдиновты ҡотлайбыҙ.

Дөйөм алғанда, Ҡөрьән һүҙҙәрен шиғри юлдар аша ҡабул итеү ниндәйҙер күңел бөйөклөгән хасил итә. Камиллыҡты һәм аһәңлекте тоймау мөмкин түгел. Бер Аллаһтың барлығын, берлеген, бөйөклөгөн тойоу шиғри камиллыҡ аша ныҡыраҡ бирелә-лер, күрәһең. Теүәл үлсәнгән рифмалы юлдар быға ярҙам итә. Шиғри сәнғәт аша аңлатыу, тип әйтергә мөмкиндер. Күп һүҙ йөрөтөү, ситләтеүҙәр, уратыуҙар юҡ.

Билдәле булыуынса, халҡыбыҙҙың мәшһүр улдары, ир-азаматтары изге яуға барғанда, оло ғәмәлдәр атҡарғанда Ҡөрьән менән ант иткән. Был бөйөк Китап киләсәктә лә сауаплы эштәргә илһамландырыр. Мәүлит ағайҙың шиғри аңлатмалары ла халыҡҡа Ҡөрьәндең йөкмәткеһен, мәғәнәһен, асылын аңларға булышлыҡ итер, ул да замандың рухи ихтыяжын ҡәнәғәтләндерә, Аллаһтың мәңгелек китабына йөҙ борорға, диҡҡәт итергә саҡыра. Тимәк, беҙ бында дини китаптарыбыҙ аша киләсәккә юлыбыҙға ла яҡтылыҡ өҫтәйбеҙ, тип әйтергә хаҡлыбыҙҙыр. Шиғри аңлатма ғалимдарыбыҙ тарафынан өйрәнелер әле, етди һығымталар яһалыр, тип уйлайым. Сүрәләрҙең телебеҙҙә шиғри формала яңғыраш алыуы ҡабатланмаҫ күренеш.

*Мәңге тере, мәңге бар*
*(һәм мәңге буласаҡ) Алла,*
*Унан башҡа илаһ итеп*
*тотор зат юҡ донъяла.*
*Уны һис тә серем алмай,*
*солғамай Уны йоҡо,*
*Күктәрҙә һәм ерҙәрҙә ни*
*бар - бөтәһе лә Уныҡы.*

**Фәрзәнә АҠБУЛАТОВА.**

*БАШҠОРТ ҠАМУСЫ*



*Иван ЛЕПЕХИН*

# XVIII БЫУАТҠА СӘЙӘХӘТ

Башҡа тарафтарҙан тау ныҡ ҡаялы. Тауҙың яланғас түбәһе башҡорттарҙа - артыш ағасы, ә беҙҙә казак можжуһаны, тип йөрөтөлгән үҫемлектең үҙенсәлекле төрө менән ҡапланған. Был үҫемлек беҙгә башҡорттарҙың тағы бер хөрәфәтен асты. Ошо үҫемлекте өҙөп ала башлағанда беҙ тауҙың икенсе осонда инек. Бигерәк тә тырыш булып тойолған бер башҡорт тау буйлап беҙгә табан йүгереп килгән ыңғайы, төрлөсә ишаралап, беҙгә уны кәтөн тороу кәрәклеген белдерҙе (бик көслө ел һәм ямғыр арҡаһында беҙ уның тауышын ишетмәй инек); килеп етеү менән һорай ҙа башланы: һеҙ артыш ағасы ботаҡтарын ни өсөн һәм ниндәй нәҙер менән һындырып алаһығыҙ? Был ботаҡтарҙы тик ҡыҙыҡһыныуыбыҙ өсөн генә алып, нәҙер әйтеү өсөн бер ниндәй ҙә сәбәп булмауы тураһында белдергәс, ул беҙгә асыуланып яуап ҡайтарҙы: беҙ тауға уларҙы үҙ ихтыярынан тыш менергә мәжбүр иткәнбеҙ; бер кәрәкһеҙгә һәм бер ниндәй нәҙер әйтмәйенсә генә ағас һындырып, икенсе енәйәт ҡылғанбыҙ икән; был улар өсөн эҙһеҙ үтмәйәсәк. Был башҡорт ошо һүҙҙәрен хөрәфәткә ышаныуҙан әйттеме, әллә беҙҙең тауҙа ниндәй ҙә булһа бүләк ҡалдырыуыбыҙға өмөт иттеме, белмәйем; бәләкәй генә әйбер артынан да тауға менергә ялҡауы килмәй башҡорттоң: әммә һуңынан асыҡлауыбыҙса һәм үҙ күҙәребеҙ менән күреүебеҙсә, башҡорттар ғына түгел, татарҙар ҙа (XVII быуатта урыҫтар төрки халыҡтарҙы татар, тип атай. - **Ред. иҫк.**) артыш ағасын өйҙән ен-бәрейҙе ҡыуып сығара алыусы көскә эйә булыуы арҡаһында хөрмәт итә икән, һәм һәр кем татар (төрки - **Ред. иҫк.**) өйҙәрендә ошо хөрәфәтте осрата ала.

Башҡорттар, беҙгә үҙ ярҙамын күберәк күрһәтергә теләп, был тауҙа үҙҙәре иң мөһим тип иҫәпләгән нәмәне лә йәшермәне. Улар тауҙың ҡаялы төньяҡ ҡырында Нуғай хандың ике дөйә менән килтерелгән хазинаһы йәшерелгән мәмерйә булыуы тураһында һөйләп, шуны иҫбатларға тырышты; саф алтынкөмөштән торған хазина ниндәйҙер билдәһеҙ мосолман әүлиәһе тарафынан сихырланған булып, уны бер кем дә алыу ғына түгел, күрә лә алмай. Уларҙың әйткәне ысынында уйҙырма булһа ла, уйлап сығарылған хан байлығын табыу өмөтөнән түгел, ҡыҙыҡһыныуыбыҙ арҡаһында шул мәмерйәне ҡарап сығырға булдыҡ. Беҙгә тау башынан текә ҡая буйлап түбәнгә илле сажинға тиклем төшөргә кәрәк ине. Тауҙар буйлап болан кеүек йөрөргә өйрәнеп бөткән башҡорттар алды менән төшөп барған ыңғайы емерелеп төшөп торған ташта беҙгә баҫҡыстар яһаны; әммә көслө ел, ямғыр һәм ышаныслы таш беҙҙе ошо эшкә тотоноуыбыҙ өсөн үкенергә, ә ҡайһы берәүҙәрҙе, бәлки, ысынлап та ант итергә мәжбүр иткәндер; шулай ҙа ахыр сиктә беҙ данлы Хан мәмерйәһенә төшөп еттек. Уның тышҡы яғынан биш сажин ҙурлығындағы ауыҙы бар ине, ә ҡалған өлөшө емерелеп төшкән ҙур таш киҫәктәре менән тулғанлыҡтан, бер нисек тә эскәрәк үтеү мөмкинлеге булманы, һәм беҙҙең бар тырышлыҡтарыбыҙҙың әжере шул мәмерйә эсендә ултырып, тышта яуған көслө ямғырҙан һаҡлана алыуҙан ғибәрәт булды. Шул мәмерйәнән тау итәгенә тиклем төшөү баяғыһы кеүек уҡ ауырлыҡ һәм хәүеф менән атҡарылды: сөнки элекке һуҡмаҡ менән өҫкә менеү мөмкин булмаған эш ине.

***✓ Тағы бер нәмәгә баҫым яһап китке килә. Беҙҙә, ниңәлер, эпосты, шулай уҡ ҡобайырҙарҙы яттан һөйләүселәрҙе "сәсән" тигән исем менән телгә ала башланылар. Әҙер әҫәрҙе уҡыусы кеше нишләп сәсән булһын ул?***

# БЕҘ БӘХЕТЛЕ

## балаларыбыҙға һөйләр эпостарыбыҙ,

**Беҙ үҙебеҙҙең рухи ҡомартҡыларға бай халыҡ икәнебеҙҙе беләбеҙ. Көнкүрешебеҙҙә, мәҙәниәт, мәғариф кеүек барлыҡ донъяуи төшөнсәләрҙә лә борон-борондан килгән милли ҡарашыбыҙ, үҙаңыбыҙ бар. Ата-бабаларыбыҙ шулар нигеҙендә ғүмер иткән, балалар үҫтергән, ер-һыуын, ҡан, тел таҙалығын һаҡлап килгән. Бөгөн иһә йәшәйеш икенсерәк юҫыҡ алып, милләтте дөйөм халыҡтар төркөмөнән айырып алып милләт иткән үҙенсәлектәр икенсе планға күсеп, хатта ки юғалып ҡалды һымаҡ. Ниңә беҙ йолаларыбыҙҙан, халыҡ тәрбиәһенән, кәсептәребеҙҙән, аш-һыуҙарыбыҙҙан, ҡанундарыбыҙҙан ситләштек әле? Ни өсөн улар бөгөн сәхнә тамашаһы, күргәҙмә биҙәге генә булып ҡалды? Был өлкә менән махсус ҡыҙыҡһынған, ул һорауҙарға яуап бирә алған кешеләр, бәхеткә күрә, бар. Улар халыҡ байлығын туплау, һаҡлау һәм онотторамау өсөн фиҙаҡәр хеҙмәт көсө һала. Шундай зыялы шәхестәребеҙ Башҡортостан Республикаһы Мәҙәниәт министрлығы ҡарамағындағы Республика халыҡ ижады үҙәге директоры урынбаҫары Нәфисә Булат ҡыҙы ТУЛЫБАЕВА һәм Рәсәй Фәндәр академияһы Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтының Өфө фәнни үҙәге фольклор бүлеге етәксеһе, филология фәндәре кандидаты Гөлнур Рәүил ҡыҙы ХӨСӘЙЕНОВА менән халыҡ ижадының бөгөнгө торошо хаҡында һөйләшеү ойошторҙоҡ.**



**▸ Белеүебеҙсә, халыҡ ижады 50-70-се йылдарҙа күпләп йыйылған, шул нигеҙҙә әллә күпме баҫмалар донъя күргән. Бөгөн, мәҫәлән, экспедицияла йөрөгәндә халыҡ араһында ниндәйҙер былаға ишетелмәгән рухи хазина табырға буламы икән?**

**Г. Хөсәйенова:** "Халыҡ ижады - мәңгелек шишмә" тигән Кирәй Мәргән. Халыҡ ижады 60-70-се йылдарҙа ғына халыҡ ижады булған да, йыйылып бөткән, хәҙер нимәлер белгән әбей-бабайҙар юҡ, тигән ҡараш йәшәй. Тик был ҡараш дөрөҫ түгел. Быуындан-быуынға ниндәйҙер белем барыбер күсә килә. 2003 йылдан 2015 йылға тиклем беҙ 32 экспедицияға сыҡтыҡ. Әлбиттә, Кирәй Мәргәндәр ойошторған экспедициялар менән сағыштырғанда, материалдар табыу күпкә ауырлашҡан. Улар ваҡытында эпос, әкиәт, риүәйәт кеүек ҙур жанрҙар йәшәүен дауам иткән. Бөгөн беҙгә ул жанрҙарҙың тик саҡтыларын ғына табырға тура килә. Дим буйында "Заятүләк менән Һыуһылыу"ҙы төрлө варианттарҙа өҙөк-йыртыҡ белгән кешеләр булһа, Ырымбур яҡтарындағы ололарҙың: "Бәләкәй саҡта егет һыу ҡыҙын һөйгән, тип, һамаҡлап әҫәр һөйләйҙәр ине", - тигәне лә ҡыуандыра.

Әкиәттәргә килгәндә, Мәскәүҙә йәшәүсе танышым Рязань өлкәһе фольклорын өйрәнә ине, бына шул ғалимә минең китабымды ҡарап сыҡҡанда: "Һеҙ ҡайһылай бәхетле, һаман да әкиәттәрегеҙ бар икән", - тип аптырауын белдерҙе. Уларҙа әкиәт тигән нәмә күптән онотолған икән. Был халыҡ ижадының йәшәүе барыбер ҙә милләттең рухлы булыуын күрһәтә. Улар боронғо йән аҙығын онотмай, онотмай, онотторомай һаҡлап килә, тимәк. Шулай уҡ халыҡ хәтере шундай тәрән һәм төрлө-төрлө кескәй уйпаттарға бай. Күптән түгел Силәбе өлкәһендә булғанда шундай бер уйпаттан "Үгәй ҡыҙ" әкиәтендәге яңы һамаҡ килеп сыҡты. Был үҙенә күрә бер табыш.

Классик йырҙарыбыҙ, бәйеттәребеҙ, эпостарыбыҙ, әлбиттә, тарихта ҡалды, ундай бөтөн һәм камил әҫәрҙәрҙе табып та булмаҫ, әммә йыр, таҡмаҡ, бәйет, мәҡәлдәр заман менән бергә йәшәүен, төрләләнеүен дауам итә. Йәғни, халыҡ ижады йәшәй.

**Н. Тулыбаева:** Эйе, был өлкәлә эшләүсе фән белгестәренең бурысы - рухи байлыҡты эҙләп табыу, һаҡлап ҡалыу, фондтарға урынлаштырыу. Ә беҙҙең Халыҡ ижады үҙәгенең бурысы - ошо табылған байлыҡты ғәмәли кимәлдә һаҡлау. Йәғни, беҙ уларҙы ғәмәлдә ҡулланыусылар. Былар ябай ғына һүҙҙәр түгел. Шул уҡ ҡурайсылар, йырсылар, сәсәндәр, йола, ғөрөф-ғәҙәттәрҙе сағылдырыусы саралар - барыһы ла халыҡ ижады, халыҡ хәтере ул.

Был эштең мөһимлеге бигерәк тә ситкә сыҡҡанда, республикалар, төбәктәр араһында, Рәсәй кимәлендә үткәрелгән конференцияларҙа күренә. Сөнки бында сағыштырып ҡарау мөмкинлеге бар. Кемдәр нисек һаҡлай үҙ тамырҙары һутын? Файҙаланамы улар бөгөн был ҡиммәттәрҙе? Һәм ошо мәлдә беҙ үҙебеҙҙең шундай көслө, бай, оло нигеҙҙә баҫып тороуыбыҙҙы аңлайбыҙ. Һәм шул уҡ ваҡытта әле барыһын да аңлап та етмәйбеҙ кеүек. Сөнки, тотонолмаған, өйрәнелмәгән, файҙаланылмаған рухи байлығыбыҙ бихисап әле. Уларға таянып, әллә күпме программалар, мәҙәни саралар сығарырға, фәнни эштәр яҙырға була. Был тәңгәлдә беҙҙең фольклор йыйыусыларға рәхмәттән башҡа һүҙ юҡ, улар ваҡытында быларҙың барыһын да йыйып, туплап өлгөргән һәм тап әле бына ошо йыйылғандарҙы халыҡҡа кире ҡайтарыу мәле етте. Тик был тәңгәлдә һаҡланған жанрҙарҙың барыһын да бер тигеҙ хәрәкәткә килтерергә кәрәк икәнде онотмайыҡ. Юғиһә, бөгөн бейеү менән йырға ғына баҫым яһала. Ҡайҙа беҙҙең шул уҡ әкиәттәр, бәйеттәр, ҡобайырҙар, мөнәжәттәр, тиҙәйткестәр һ.б. Ошоларҙы күҙ уңында тотоп, күптән түгел Сибайҙа, Стәрлебашта мөнәжәт бәйгеләре уҙғарылды. Ошондай онотолғанды кире ҡайтарыу, тергеҙеү эштәрендә Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы эргәһендәге "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһының, уның район-ҡалаларҙағы ойошмаларының эшмәкәрлеген юғары баһалап китке килә.

**▸ Халҡыбыҙҙың иң ҙур халыҡ ижады ҡомартҡыһы шулай ҙа эпостары, тиһәк, килешәһегеҙме? Уларҙы пропагандалау ҙа, минеңсә, яҡшы ойошторолған. Йыл һайын республика кимәлендә балалар араһында үткәрелеп торған "Урал батыр" эпосын яттан һөйләүселәр бәйгеһе генә лә ни тора!**

**Г. Хөсәйенова:** Килешмәү мөмкин түгел. Сөнки эпос - ерле халыҡтың был донъяға барлыҡҡа килеүе, урыны, йәшәү миссияһы һәм рухы тураһындағы космик һәм асыҡ танытмаһы. Үҙ ерендә этнос булып формалаша башлау дәүеренән алып, үҙаллы милләт булғанға тиклем берҙәм, бер идеялы, тоғро бер телле халыҡ ҡына һәм тамыр аңы, үҙ ырыуы, тел, мәҙәниәт ҡәрҙәшлеге менән берләшкән ҡәбиләләр бөтөнлөгө генә эпослы була ала. Халыҡтың тел хазинаһы, фәлсәфәһе, сәнғәте, тарихы, этнографияһы туҡылған был әҫәрҙәр әлегә тиклем тере хәтерҙә йәшәй һәм ошоноң менән дә башҡорт эпосы үҙ халҡының тарихи-генетик ҡеүәтен, серен һаҡлаған ҡомартҡы булып тора. Мәҙәни, гуманитар феномен ғына түгел, ә киләсәктә һәр кем уның фәлсәфәһен төшөнөп, кеше булырға тейешлекте аңғартҡан бөйөк ҡаҙаныш ул. Эпосын һөйләмәгән халыҡ үҙ хәтерен һәм рухи асылын онотҡан маңҡорт була. Әгәр бер халыҡ эпосын икенсе милләт үҙләштерә икән, ул үҙенең тарихи репутацияһына зыян килтермәй ҡалмай. Сөнки эпоста һәр һүҙ, билдә, фекер, моң, тел, йола һ.б. артефакттарҙың тарихи, этногенетик нигеҙе генә түгел, ә уларҙы бар иткән сәбәп-һөҙөмтә, ваҡыт-арауыҡ, миссия-идея бәйләнештәре лә ифрат объектив кәүҙәләнеш ала. Тик диалектика һәм генетика ҡағиҙәләрен белмәгәндәр генә бер милләт эпосын икенсе милләттеке тип әйтә ала.

Тағы бер нәмәгә баҫым яһап китке килә. Беҙҙә, ниңәлер, эпосты, шулай уҡ ҡобайырҙарҙы яттан һөйләүселәрҙе "сәсән" тигән исем аҫтында телгә ала башланылар. Әҙер әҫәрҙе уҡыусы кеше нишләп сәсән булһын ул? Ул бары уны уҡыусы, яттан һөйләүсе генә. Шулай уҡ алдан яҙып, әҙерләнеп әйтешеүселәр ҙә әле сәсән түгел. "Сәсән" тигән оло һүҙҙең бәҫен төшөрмәһәк ине...

**▸ Йолаларға, ғөрөф-ғәҙәттәргә килгәндә, уларҙың беренсел бирелешен, бөтөнлөгөн, мәғәнәһен һаҡлап ҡалыу мөмкинме икән хәҙер? Бөгөн бит ул йолаларҙың күбеһе юҡ, булғандары ла ярайһы үҙгәрештәр кисергән. Мәҫәлән, бөгөн күптәр йәштәр өйләнешкәндә ҡыҙ әйттерә барыу тигән йоланы үтәп тормай. Йәки йорт күтәрер алдынан берәйһе уның нигеҙе урынын өшкөртә микән?**

**Г. Хөсәйенова:** Ваҡытында йолалар халыҡ теленән һөт өҫтө шикелле итеп һөҙөп алынған, йыйылған. Улар әле халҡыбыҙ йолаларҙы иҫләгән замандарҙа, уларҙы нисек үтәүҙе белгән кешеләр барҙа уҡ тупланған. Шунлыҡтан беҙҙең "йолалар онотолған" тигән һүҙҙе әйтергә хаҡыбыҙ юҡ. Бар улар барыһы ла, яҙылған, төшөрөлгән - фондтарҙа ята. Бөгөн бер аҙ онотола төшкән икән - ынтылып ҡына ал, өйрән, тормошҡа ашыр.

**Н. Тулыбаева:** Әллә нисәмә быуатлыҡ тарихы булған халҡыбыҙҙың йолалары, ғөрөф-ғәҙәттәре бик күп. Йола ижады - быуаттар буйы халыҡтың тормош-көнкүрешен, рухи байлығын сағылдырыусы боронғо мираҫ. Бәлки, ысынлап та, уларҙың ҡайһы берҙәре онотола ла төшкәндер. Әммә, алда әйткәйнем бит инде, бөгөн онотолған рухи ҡиммәттәрҙе кире ҡайтарыу, тергеҙеү мәле, тип. Был тәңгәлдә республикабыҙҙа әүҙем эштәр алып барыла. Ниндәй генә мәҙәни бәйге йәки сара булмаһын, ул мотлаҡ үҙ эсенә йола күренешен дә ала. Мәҫәлән, туй күренештәре йолалары, байрам аштары, бала тыуыуға бәйле йолалар, миҙгел йолалары һ.б. беҙҙең фестивалдәрҙең, конкурстарҙың йәме булып тора. Ә инде беҙҙә ерләүгә бәйле йолаларҙы, дини йәки аш-һыу ғөрөф-ғәҙәттәрен үтәмәй йәшәгән ғаиләләр бик һирәктер, тип уйлайым. Ә инде ул йолаларҙы нисек итеп башҡарыуҙары, тейешле итепме, әллә еренә еткермәй йәки үҙгәртепме - уныһы һәр кемдең белем һәм аң кимәленән тора.

**▸ Глобалләшеү заманында йәшәйбеҙ. Ил, республика сиктәренең юҡҡа сығыуы менән бер рәттән, рухи ҡомартҡыларҙың уртаҡҡа әйләнә барыуы ла күҙәтелә. Мәҫәлән, татарҙар беҙҙең ҡурайҙы үҙләштерә икән, тигән хәбәр йөрөй. Шул уҡ ваҡытта улар тарафынан ҡайһы бер йырҙар, хатта шәхестәрҙең дә исеме үҙләштерелә. Ни өсөн беҙ "үҙебеҙҙеке" булғанды үҙебеҙгә законлы рәүештә беркетеп ҡуя алмайбыҙ? Юҡмы әллә рухи ҡомартҡыларҙы һаҡлар закон? Рустарҙың матрешкаһына, балалайкаһына ҡул һуҙа алмайҙар ҙа инде...**

***Ҡайһы берәүҙәр, ҡурай беҙҙең музыка ҡоралы, тип, сәхнәгә сығып уйнай, китаптар, энциклопедиялар, белешмәләр сығара ул. Әммә уны нисек кенә үҙләштереп маташмаһындар, ниндәй генә китаптар сығарылмаһын, барыбер ҙә ысынбарлыҡтан китеп булмай. Сөнки ҡурай үҙенең башҡорт ерлегенән башҡа ҡурай түгел. Ҡурайҙы ерлегенән айырһаң, ул биш тишекле һыбыҙғы ғына. "Ерлек" тигән һүҙ үҙенә бик тәрән мәғәнә һыйҙыра. Ерлек - ул беҙҙең тарих, көйҙәребеҙ, ул беҙҙең меңәр йылдар һуҙымында тарихыбыҙҙы, йырҙарыбыҙҙы хәҙергегә килтереп еткергән данлыҡлы ҡурайсылар. Беҙ уларҙың исемдәрен беләбеҙ. Башҡа халыҡтар иһә, был беҙҙең ҡурайсыбыҙ, тип бер кемде лә әйтә алмай, уларҙың ҡурайҙа уйнай торған көйҙәре лә юҡ. Ҡурай үҙенең тулы мәғәнәһе, йөкмәткеһе менән тик башҡорттоҡо ғына.***

ЙЫЛ ВАҠИҒАҺЫ

**Ғәҙәттә, бөтөн кинофестивалдәр ҙә бер маҡсатҡа хеҙмәт итә. Беренсенән, улар быға тиклем танылыу яулап өлгөрмәгән актерҙар, режиссерҙарға мөмкинлектәр аса. Икенсенән, фестиваль был сара үткән ҡалала йәшәүселәргә, кино һөйөүселәргә ҙур байрам алып килә. Үткән аҙнала ғына үҙенең еңеүселәрен билдәләгән "Көмөш Аҡбуҙат" II Халыҡ-ара милли һәм этник кино фестивале лә был йәһәттән үҙенең бурыстарын лайыҡлы үтәне. Шулай ҙа уның төп үҙенсәлеге - Рәсәй халыҡтарының мәҙәни мирасын һаҡлау, был мәҙәни ҡиммәттәрҙе тамашасыларға күрһәтеү булғандыр. Етмәһә, ул быйыл халыҡ-ара Евразия гуманистик форумы сиктәрендә ойошторолдо.**

# "КӨМӨШ АҠБУҘАТ"...

## рухи ҡиммәттәргә нигеҙләнде



Фестивалдең конкурс программаһында 10 илдән - Тажикстан, Әзербайжан, Ҡырғыҙстан, Мысыр, Эстония, Бангладеш, Әрмәнстан, Иран, Һиндостандан һәм Рәсәйҙең 11 төбәгенән 36 фильм ҡатнашты. "Милли этник кино бөгөнгө заманда бигерәк тә кәрәк. Сөнки Ер шарында төрлө милләттәр йәшәй һәм, исмаһам, күрше халыҡтарҙың тарихын белеү беҙҙе күп аңлашылмаусанлыҡтарҙан ҡотҡарыр ине. Халыҡтар бер-береһен ни тиклем яҡыныраҡ белә, дуҫлыҡ ептәре лә шул тиклем нығыраҡ буласаҡ. Республика етәкселегенә, ҡала хакимиәтенә был фестивалгә ярҙам иткәндәре өсөн рәхмәт", - тигәйне баһалама ағзаһы, театр һәм кино актеры, режиссер, драматург, продюсер Владимир Грамматиков. Быйылғы фестиваль бар халыҡтар өсөн дә ерҙәге тыныслыҡтан да ҙурыраҡ бәхет юҡ һәм булмаясаҡ икәнен хәтеребеҙгә тағы бер ҡат төшөрҙө. БР Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары Салауат Сәғитов та үҙенең сығышында халыҡтарҙың уйҙары, күңелдәре төрлө булыуын, әммә бер үк ваҡытта беҙҙең ни тиклем оҡшаш икәнебеҙҙе аңлауҙың мөһимлеген һыҙыҡ өҫтөнә алды.

Этник фильм бер ҡасан да коммерция маҡсатын эҙәрлекләмәй. Әммә бөгөнгө заманда һәр дәүләт милли кино төшөрөүгә ярайһы ҙур иғтибар бүлергә тырыша, сөнки тап милли сәнғәт, мәҙәниәт, әҙәбиәт кенә халыҡтарҙы башҡаларҙан айырып тороу һәм уларҙы донъяға танытыу көсөнә эйә. Кинорежиссерҙарҙың үҙҙәрен дә был өлкә ҡыҙыҡһындыра. Документаль кино жанрында "Иң яҡшы герой" номинацияһында еңеү яулаған "Жизнь в тайге" фильмы режиссеры Ксения Артеева тап этник йүнәлеш халыҡтар араһында татыулыҡ һаҡларға ярҙам итәсәк, тигән фекерҙә. "Беҙ бер-беребеҙҙең мәҙәниәтен өйрәнергә тейеш. Ниндәйҙер сиктәр эсендә йәшәү, дөйөм наҙанлыҡ конфликттар сәбәбе булып тора", - ти ул. Ханты-Манси автономлы округынан килгән Ксения тайгала көн күргән 72 йәшлек ябай ханты ҡатын-ҡыҙы аша был халыҡтың йолалары тураһында һөйләй. Фильм Әмир Абдразаҡов исемендәге "Милли рух өсөн" призы менән дә бүләкләнде. Әйткәндәй, быйыл фестиваль тәртибен бер аҙ боҙоп, баһалама ағзалары документаль фильм жанрында иң яҡшы режиссер, иң яҡшы оператор эше номинацияларынан баш тартып, өс фильмға "Иң яҡшы герой" бүләген тапшырҙы. Улар - Андрей Русскихтың "Лади Мари" һәм яҡташыбыҙ Вилүрә Иҫәндәүләтованың "Тәүбә" документаль фильмдары.

"Жизнь в тайге" картинаһы цивилизациянан йыраҡ йәшәүҙең кире, бәлки, ыңғай яҡтары менән таныштырһа, "Небесное кочевье" фильмында бейек тауҙарҙа боронғоса йәйлеү аҫырап, ҡымыҙ эсеп йәшәгән ҡырғыҙ ҡартының был төбәккә лә заманса уңайлыҡтар килеренә өмөт биргән тимер юлы төҙөлә башлағас, ауырып, аяҡтан йығылыуы һүрәтләнә. Был образ бер мөһим һорау ҡуя тамашасы алдына: әгәр ҙә ул һинең үткәнеңде емерә икән, киләсәккә ҡарарға тырышыу дөрөҫмө? Ҡарт үҙенең ейәндәренең өйрәнгән ғәҙәти тормошон ҡала фатирҙарына алыштырасағына ышанғыһы ла килмәй. Фильмдың рәссамы Адис Сейталиев әйтеүенсә, бөгөнгө Ҡырғыҙстанда ошо киноны төшөрөү өсөн урын эҙләп, республиканы урап сығырға тура килә, сөнки кеше аяғы баҫмаған, кеше ҡулы теймәгән тәбиғәт юҡ хәҙер. Ошоларҙы ла белгәндән һуң, цивилизацияның тәбиғәтебеҙҙе генә түгел, асылыбыҙҙы ла үҙгәртеүен танырға мәжбүр булаһың. Бындағы һәр әрнеү һинең күңеленә шул тиклем яҡын. "Небесное кочевье" фильмы "Тулы метрлы кино" жанрында иң яҡшы режиссер эше буйынса баһаланды.

Шуныһы ҡыҙыҡ, заман кинорежиссеры үҙенең темаһын йышыраҡ халыҡ ижады, тәү сиратта, легендалар аша эҙләргә тырыша. Ошо йүнәлештә ижад итеүсе башҡорт яҙыусыһы Шәүрә Шәкүрова ла ҡыҫҡа метрлы кинола "Иң яҡшы сценарий" авторы тип билдәләнде.

Фестиваль күрһәтеүенсә, бөгөн донъя буйынса этник кинолар күпләп төшөрөлә. Башҡортостанда ла һуңғы осорҙа был йәһәттән эштәр йәнләнә төштө. Мәҫәлән, беҙ быйыл фестивалгә бер жанрҙа булһа ла 6 эш тәҡдим итә алдыҡ.

"Көмөш Аҡбуҙат" кинофестивале сиктәрендә беренсе тапҡыр "Дебютанттарҙың башҡорт питчингы" үтте. Унда Силәбенән Константин Пухов, Өфөнән Фәрзәнә Утарбаева менән Вадим Вәлиуллиндың проекттары еңеп сыҡты. Питчинг эшендә ҡатнашыусы сценарист, РФ Кинематографистар берлегенең Йәштәр үҙәге идараһы рәйесе урынбаҫары Олег Богатов, һеҙ кино революцияһы тупһаһында тораһығыҙ, тип тә күңелдәргә йылы өҫтәне. Ысынлап та, бөгөн төбәктәрҙә мәҙәни тормош гөрләй, сифатлы милли кинолар ҙа күберәк төшөрөлә. Рәсәй киноһы йылы алдынан мәскәүҙәрҙең быны таныуы бик әһәмиәтле.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Ҡыҫҡа метрлы кино жанрында "Иң яҡшы оператор эше" - "Трико" фильмына (Алтай), "Иң яҡшы режиссер эше" номинацияһы "Кукла" фильмына (Рәсәй) тапшырылды. Тулы метрлы фильм жанрында "Иң яҡшы оператор эше" - "Теваник" (Әрмәнстан), "Иң яҡшы сценарий" "Мой велосипед" (Бангладеш) фильмдарына бирелде. Ғилван Әмиров исемендәге приз "Трагедия в бухте Роджерс", тамашасылар һөйөүен Ирандан "Элегия", Башҡортостан мәҙәниәт министры призы "Февраль" (Чечен Республикаһы) фильмына тапшырылды. Фестивалдең Гран-приһын йәш актер һәм режиссер Кирилл Плетневтың "Настя" фильмы алды. Фильм ысын булған ваҡиғаға нигеҙләнгән. Режиссер үҙе билдәләүенсә, әгәр ҙә кеше һайлау алдында торғанда баҙап ҡала икән, уның өсөн юлды яҙмыш үҙе һайлаясаҡ.**

Ләйсән НАФИҠОВА.

АЛДАР МЕНӘН ЕРӘНСӘ ҠОРО




# ҒӘЛЛӘМОВ АҒАЙ ҺАБАҠТАРЫ

**БДУ-ла уҡыған саҡта минә һоҡланғыс педагог Абдрахман Әбдрәхим улы Ғәлләмовтан һабаҡ алыу бәхете тәтене. Ҡырҡ биш йылдан ашыу ваҡыт үтһә лә, уның дәрестәрен һағынып иҫкә алам. Ғәлләмов ағай башҡортса дөрөҫ уҡыу-яҙыуға, матур итеп һөйләргә генә өйрәтмәне, ул әле балалыҡ сылбырынан ысҡынып та өлгөрмәгән илке-һалҡы күңелебеҙгә педагогика тигән фәндең тәүге орлоҡтарын сәсте. Мин Ғәлләмов ағайҙың дәрестә һөйләгән ҡайһы бер фәһемле мәҙәктәрен дә яҙып барғанмын икән. Шуларҙы һеҙгә лә тәҡдим итмәксемен.**

### Йүгерек уҡыу

Инспектор булып эшләп йөрөй инем. Бер мәктәпкә барып инһәм, балалар класта туҙан туҙҙырып йүгерешеп, китап уҡып йөрөйҙәр. Уҡытыусылары, ҡәнәғәт йылмайып, мөйөштә ултыра.

- Нимә эшләйһегеҙ? - тием аптырап.
- Йүгерек уҡыу, иптәш, йүгерек уҡыу. Бына бит, программала ла шулай тип яҙылған.

### Тәүге һынау

Балалар мәктәпкә килгән яңы уҡыусыны ғына түгел, яңы уҡытыусыны ла һынап ҡарай. Мәктәпкә биология уҡытыусыһы алғайныҡ. Алтынсы класс уҡыусылары зоология дәресе алдынан журнал эсенә туҙбаш йыланы һалып ҡуйған. Уҡытыусы инеп, иҫәнләшеп, журналды асһа, йылан ята икән. Ҡото осҡан бының, һүҙ ҙә әйтә алмай, ҡатҡан да ҡалған. Ә балалар ни көлә алмай, ни йыланды ала алмай, баштарын түбән эйеп тик ултырған.

Мин был мәктәптә завуч булып эшләй инем. Барып индем дә, журнал эсендәге йыланды, ап-аҡ булған уҡытыусыны күреп, барыһын да аңланым. Тиҙ генә йыланды кеҫәгә тыҡтым да, сығып киттем. Зоология уҡытырға ингән уҡытыусыһы йылан менән һынап ҡараған өсөн уҡыусыларҙы нисек әрләйһең инде?

### Шулай ҙа була

Минең бер таныш уҡытыусы балаларға эш биргән дә, үҙе тәҙрә төбөндәге өҫтәл өҫтөнә менеп ултырып, китап уҡып ултыра. Мин шым ғына индем дә, бер малай янындағы буш урынға ултырҙым. Был малай ултырҙы-ултырҙы ла, ҡыҙыҡһынып:

- Ағай, һин кем? - тип һораны.
- Инспектор.

Бер ваҡыт бер-береһенең ҡолағына шыбырлай башланы былар: "Инспектор, инспектор, инспектор..."

Иң ситтә ултырған малай уҡытыусыһына ымлай:

- Ағай, инспектор килгән!
- Ә, кем тиһең?
- Инспектор...

Теге ҡото осоп, һикереп төштө лә, мине күргәс:

- Ә, Ғәлләм, һин икән дә, - тигән булды.

### Дүрәк ағай

Ҡайһы берҙә балалар, уҡытыусы ни әйтһә лә, "Эйе, эйе" тип тик ултыра. Шундай саҡта уларҙы һынар өсөн:

- Һаҡмар Ирәндек аша аға, эйе бит, балалар? - тигән булам.
- Эйе, ағай, эйе.

Шунда бер шуҡырағы икенсеһенең ҡолағына эйелде лә: "Әллә дүрәкме икән был ағай?" - тип шыбырланы.

### Демократтарса

- Ағай, был һөйләмдә өтөр була бит.
- Ә, шулаймы ни? Йә, балалар, тағы кемдәр ниндәй тамға ҡуйҙы?
- Һы-ҙы-ы-к...
- Ярай, улай булғас, былай итәйек: кем өтөр ҡуйыла, ти, ҡулын күтәрһен. Бер, ике, өс, ун - күпселек. Балалар, бында һыҙыҡ булмай, өтөр ҡуйыла.

### Суҡытыусы

Бер уҡытыусы уҡыуҙың беренсе көнөндә үк беренсе класс уҡыусыларын берәмләп торғоҙа ла: "Ас китабыңдың 17-се битен", - ти икән.

*ЯҘЫУСЫҒА ӨС ҺОРАУ*

# АҠЫЛЛЫ КЕШЕ...

## башҡалар тәжрибәһендә өйрәнә



**Кеше ғүмере ҡыҫҡа ғына. Ошо ваҡыт арауығында донъяның асылын аңларға, тойорға тырышыу теләге менән яна бәндә. Был яныу, моғайын, кешенең йәшәйешендә сағылалыр ҙа инде. Ә инде был кеше шағир булһа - икеләтә. Шиғриәттә, классик шиғриәттә ритм нисек урынлы файҙаланылһа, ғаләмдең дә үҙ ритмы бар. Икенсе яҡтан, әҙәбиәттән дә, ғаләмдән дә ябай кеше аңлата алмаҫлыҡ серҙәр, мөғжизәләр бөркәлөп тора. Әҙәбиәттең иң төп мөғжизәһе нимә? Ул уҡыусының күҙ алдында тотош бер донъяны барлыҡҡа килтереү һәләтенә, мөмкинлегенә эйәме? Асылмаған һәм, бәлки, асылмаҫ та һорауҙарға яуап эҙләнек шағир, тәржемәсе, журналистарҙың Шәһит Хоҙайбирҙин исемендәге премияһы лауреаты Дамир ШӘРӘФЕТДИНОВ менән.**

**➔ Шағир, яҙыусы йә рәссам булыу өсөн тәбиғәт балаһы булыу кәрәк, тиҙәр. Бөгөн тәбиғәттең ни икәнен белмәгән ижадсылар ҙа етерлек. Нисек уйлайһығыҙ: тәбиғәттең ижадҡа йоғонтоһо бармы икән?**

- Тәбиғәт балаһы булыу бер кемгә лә ҡамасау булмаҫ ине лә... Кеше былай тәбиғәттең айырылғыһыҙ бер өлөшө булып яратылған да, тик беҙ үҙебеҙгә яһалма микроклимат, әйләнәбеҙҙә теплица шарттары булдырып, ысынбарлыҡтан ныҡ ситкә тайпылдыҡ. Әлбиттә, сығышыбыҙ шул төпкөлдәрҙән булғас, тәбиғәт тә беҙҙең күңел донъябыҙҙың формалашыуына шаҡтай йоғонто яһай.

Шулай ҙа мин һорауыңдағы икенсе һөйләмгә ентекләберәк туҡталыр инем. Тәбиғәт менән ныҡ бәйләнештә йәшәмәгән кеше лә ысын ижадсы була ала бит. Ижад ул - күңелдең асыштарға һәләтлелеге. Ә асыштар техника өлкәһендә лә, йыһанда ла, шул уҡ үҙ ҡыуышында ғына айырым микроклимат төҙөүҙә лә була ала. Әйткәндәй, урбанистик тип аталған шиғриәт, әҙәбиәт тә бар бит әле. Башҡорт әҙәбиәтендә урбанистика юҡ, тип зарланыуҙар ҙа байтаҡ. Рус әҙәбиәтендә ҡалала тыуып үҫеп, шунда формалашҡан шағирҙар бар. Блок, Маяковский, Цветаева, Заболоцкий ижадында тәбиғәт әллә ни ҙур урын биләмәй, ләкин беҙ уларҙы бөйөктәр иҫәбенә индерәбеҙ бит. Тормош күркәмлеген тәбиғи матурлыҡта ғына түгел, ә бөтә әйләнәбеҙҙә лә күреп тә, уҡыусыға күрһәтеп тә була. Шағирҙар араһында математиктар, физиктар, химиктар ҙа бар. Тәбиғәттең ни икәнен белмәгән ижадсыларҙың булыуы ғәжәп түгел: кеше тәбиғәттең күпселек өлөшөн үҙ яйына үҙгәртеп ҡороп, яһалмаға әйләндереп бөттө инде. Хатта ауыл балалары ла хәҙер тәбиғәт ҡосағында йәшәмәй, ә унда ара-тирә экскурсияға ғына сыға. Ә ҙур ҡала балаһына ни һан!

Тәбиғәттең ижадҡа йоғонтоһо бар һәм ул йоғонто Тәбиғәттең үҙенең оло ижадсы булыуынан килә. Беҙҙе ул бер тапҡыр ҙа ҡабатланмай торған матурлығы менән һоҡландыра, ғәжәпләндерә, ҡыҙыҡһындыра, ана шулар килтерә лә инде үҙенсәлекле табыштарға. Ана шул күренештәр беҙҙе асыштарға әйҙәй, ижади ҡараш үҫтерә.

**➔ Бөгөн уҡыусыны арбар, аптыратыр темалар ҡалмаған да кеүек. Тарих та, драмалар ҙа, детективтар ҙа, мистик әҙәбиәт тә асылған инде. Нимә менән ылыҡтырырға мөмкин уҡыусыны? Поэзияла, мәҫәлән?**

- Донъя әҙәбиәтендә ни бары бер нисә генә сюжет бар, бөтә яҙылған әҫәрҙәр шул тирәлә өйөрөлә, тиҙәр. Был ысынлап та шулай. Шул схема буйынса мин, мәҫәлән, кино сериалы башланыу менән уның нисек тамамланасағын әйтеп бирә алам. Детектив формаһы ғына иң аҙаҡҡа тиклем кәрттәрҙе асмауға ҡорола, ә ҡалғандары - барыһы ла бер ҡалыпҡа һалынған. Беләбеҙ бит инде: тамаша башында сәхнәлә мылтыҡ эленеп торһа, ул мотлаҡ атырға тейеш.

Нимәлер тураһында һүҙ барғанда, һәр ваҡыт аҙаҡтан сығыш яһаусыларға ҡыйыныраҡ: барыһын да алдан һөйләүселәр әйтеп бөтөргән. Хәҙерге әҙәбиәттә лә бөгөн тапалмаған һуҡмаҡтар ҡалмаған, унда үҙенсәлекле яңы юлдар ярыу мөмкин дә түгел. Шуға, яҙыусы халҡының оригиналлек, креативлыҡ артынан ҡыуып, "туҙға яҙылмаған" нәмәләр уйлап сығарыуы йышайҙы. Элегерәк ул фантастика өлкәһендә генә үҙен аҡлай ине, бөгөн иһә әҫәрҙе уҡып ҡарайһың да, "Улай булмай ҙа инде" тип ҡуяһың, ләкин авторҙың фантазияһы һоҡландырмай ҡалмай. Был киноларҙа бигерәк тә асыҡ күренә, сөнки унда сценарийға режиссер фантазияһы ла ҡушылғас, ана шул "тормошсан түгеллек" күпләтә артып китә. Ут эсенән теп-тере килеп сығыу, бомба шартлағанда иҫән ҡалыу, бер диск патрон менән сәғәт буйы атышып йөрөү - ана шундай ышандырмай торған, әммә сағыу күренештәр.

Бөгөн әҙәбиәттә уҡыусыны тик тормошсанлыҡ менән, геройҙың төрлө осраҡтарҙағы күңел торошон һүрәтләп кенә "үҙ яҙмаңда" тотоп ҡалырға мөмкин. Шиғриәттә - ихласлыҡ менән. Һин бәләкәй генә күренеште, кисереште, тойғоно ни тиклем ихласыраҡ һүрәтләп бирәһең, уҡыусы уны күңеленә шул тиклем яҡын ҡабул итәсәк һәм үҙе кисергәндәй ышанасаҡ. Ихласлыҡтың ышандырыу көсө тураһында әҙәби геройҙарҙың ҡылыҡтарын барлап сығып, тотош фәнни хеҙмәт яҙырлыҡ. Бына ни өсөн балалар әҙәбиәте ябай һәм ихлас булыуы менән алдыра - балалар алдаша белмәй, улар яһалмалылыҡты йәне-тәне менән тоя. Ғөмүмән, шиғриәт һәр ваҡыт ысын кисерештәрҙе ихласлап һүрәтләүе менән прозанан айырылып торҙо: лириканы бит беҙ авторҙың үҙ тойғолары тип атайбыҙ, ә сәсмә әҫәрҙә герой кисерештәре йә йыйылма образ була, йә сит кеше яҙмышын прототип итеп алалар. Документаль кино геройы менән художестволы кино геройы араһындағы айырма һымаҡ инде. Береһе - тормошсан, икенсеһе - яҙыусы фантазияһы.

**➔ Теләһә ниндәй әҫәрҙең дә биҙәге - мөхәббәт тарихы. Китапта йә кинола мөхәббәт күренеше юҡ икән - ҡыҙыҡһыныу кәмей. Ни өсөн шулай ул?**

- Кешенең тәбиғи асылында һалынған тойғоларҙың динамикаһын үҙендә түгел, ә ситтән күҙәтеү һәр ваҡыт ҡыҙығыраҡ. Үҙебеҙҙә соҡсонорға яратмайбыҙ беҙ, ә бына ситтәрҙе тикшерергә тиһәң - рәхим ит. Ундай миҫалдарҙы тик әҙәбиәттә генә күпләп табырға мөмкин. Ҡурҡаҡлыҡ, хыянат кеүек кире күренештәр һымаҡ уҡ, кешелә булған тойғоларҙан мөхәббәт хисе лә иң көслөләренән һәм, иң ҡыҙығы, унда ла кеше өлгө түгел, ә ғибрәт булырлыҡ осраҡтарға нығыраҡ иғтибар итә. Әйтергә кәрәк, тормошобоҙҙа бәхетле мөхәббәт осраҡтары һирәк осрай, ҡара төҫкә мансылған тарихтар күберәк. Өҫтәүенә, һәр кеше лә һөйөү тойғоһо кисереп, уның ни икәнен яҡшы күҙ алдына килтерә, шуға мөхәббәткә ҡағылышлы һәр ваҡиға ла ҡыҙыҡ уның өсөн. Ҡыҙыҡ ҡынамы - был илаһи тойғоно ул тағы, тағы ла кисереп ҡарарға риза!

"Беренсе саф мөхәббәт" тигән иҫәп башы бар, ә бит кеше тормошонда ундай кисерештәр бер нисә булыуы ихтимал. Шул ымһындырғыс тартылыу көсө кешене "башҡалар яҡҡан усаҡ йылыһында" йылынырға саҡырып тик тора. Ул тарихтар ни тиклем фажиғәлерәк булһа (әҙәбиәттә улар сағыуыраҡ һүрәтләнә), шул тиклем кисерештәр ҙә көслөрәк, сөнки тәбиғәтебеҙ шундай беҙҙең: матур өлгөләр түгел, ә насар миҫалдар нығыраҡ тәьҫир итә беҙгә. Аҡыллы кеше башҡалар тәжрибәһендә өйрәнә, тигән һымаҡ инде был. Әллә башҡалар фажиғәһен күреп, эстән генә "Минең менән улай булмаясаҡ" тигән өмөт ҡалдырамы кеше? Нисек кенә булмаһын, үҙең менән булған, йә булыуы ихтимал хәлдәр тураһында кемдәрҙер хикәйәләүен уҡыусы барыбер ҡыҙығыраҡ.

- Мин аса бел-мә-йем сул, апай, - тип яуап бирә бала иларға етешеп.
- Ниңә килдең һуң улай булғас мәктәпкә?
- Уҡырға, апай, уҡырға...

**Фәрит ӘХМӘРОВ.**
**Йылайыр районы Аралбай ауылы.**

# ӘБЙӘЛИЛ МӘҘӘКТӘРЕ

### Юҡ, кәләш алмайым...

Вәлиткә алты йәш. Күрше ағай ҡыҙыҡ күреп уға бер көн: "Вәлит, һиңә кәләш алып бирергә кәрәк", - ти икән. Был һүҙҙәрҙән күҙҙәре ҙурайып киткән Вәлит: "Юҡ-ҡ-ҡ! Мин кәләш алмайым! Улар арттан эйәреп тик йөрөй бит. Эҙләп, МТМ-ға ла баралар хатта" (МТМ - ирҙәрҙең бергә йыйылып автомобиль соҡоу, гәп һатыу урыны), - ти икән.

### Өс тин булһа ла аҡса ул...

Был хәл 40 йылдар элек булған. Үтәгән ауылынан Хисмәт ағай әсәһе Мәрзиә инәй менән Магнитогорск ҡалаһына бара. Ул ваҡытта ҡала менән ауыл араһында автобус йөрөмәй. Ҡайҙа йәйәү, ҡайҙа машинаға эләгеп килеп етәләр ҡалаға, ниһайәт. Ул ваҡыттарҙа ҡала урамдарында һыу эсеү автоматтары торған була. Махсус тишегенә 3 тин төшөрәһең дә, стакан тултырып, һыу эсәһең. 70 саҡрым ер килеп арыған, һыуһаған Мәрзиә инәй улынан һыу алып биреүен һорағас, Хисмәт ағай: "Ярай, ҡайтҡас туйғансы эсерһең, 3 тин булһа ла аҡса ул",- тип яуап биргән, ти. Хәҙер беҙҙең яҡтарҙа "3 тин булһа ла аҡса ул" лаҡапҡа әйләнгән һәм йыш ҡулланыла.

### Ҡойроҡло ҡусты

Әсәһенең ҡустыһы Әлтәфте йыуындырғанын бик иғтибар менән күҙәтеп ултырған Әлфиә: "И-и-и, ҡойроҡло ғына ҡусты бар бит әле ул", - тип, үҙенсә һығымта яһап ҡуя.

### Өс ай...

Күрше ауылда бер егет кәләш ала. Туйҙан һуң теүәл өс ай үтеүгә, йәш ғаиләлә бала тыуа. Аптырауға ҡалған йәш атай кәләшенән: "Өс ай эсендә бала тыуырға мөмкинме һуң?" - тип һорағас, кәләше уға: "Нимәһен бушҡа аптырайһың? Һин йөрөнөң миңә өс ай, мин йөрөнөм һиңә өс ай, март, апрель, май - бына һиңә туғыҙ ай", - тип яуап ҡайтара.

### Бер имсәкле һыйыр...

Ҡаланан ҡунаҡҡа ҡайтҡан бәләкәй Азат ағалары менән көтөү ҡаршыларға бара. Ауыл малдарының ҡайтыуын ҡыҙыҡһынып ҡарап торған малай бер ваҡыт ҡысҡырып: "Ағай, ағай, ә ниңә был һыйырҙың имсәге берәү генә ул?" - тип һорай колхоздың ҙур нәҫел үгеҙенә төртөп күрһәтеп.

### Ҡыш бабайға ышанаһыңмы?

Утыҙҙы үтеп, һаман кәләш алмаған егетте туғандары димләп өйләндерергә уйлай. Егетте, уның ата-әсәһен алып, кәләш булаһы тейеш ҡыҙҙың өйөнә баралар. Бер аҙ һөйләшеп ултырғас, ололар йәштәрҙең үҙҙәрен генә ҡалдырып, бүлмәнән сыға. Нисек һүҙ башларға белмәй, оҙаҡ ҡына ултырғандан һуң, егет ҡыҙҙан: "Ә һин Ҡыш бабайҙың барлығына ышанаһыңмы?" - тип һораған. Егеттең әле булһа кәләшһеҙ йөрөүенә ҡарағанда, был ҡыҙ Ҡыш бабай барлығына ышанмаған булып сыҡҡан, күрәһең.

### Ҡосаҡла ла ҡуй

Амангилде ауылынан ике апай алыҫҡа ҡурай eләге йыйырға бара. Береһе eләк йыйған ваҡытта алан-йолан ҡаранып, һәр "шырт" иткән тауышҡа һиҫкәнеп китә икән. Икенсеһе күҙәтеп йөрөгән дә: "Нимә, айыуҙан ҡурҡаһыңмы әллә? Ҡурҡма, айыу килеп сыҡһа ней, муйынынан һыҡҡансы ҡосаҡлайһың да, күҙенә тексәйеп туп-тура ҡарайһың. Бер нәмә лә эшләй алмай ул", - тип әйтә ти. Ҡайҙа нисектер, ә Әбйәлил яғында айыуҙы бына шулай ҡурҡыталар.

### Горная зона пляшет...

Был хәлгә 40 йылдар самаһы. Әбйәлил районының "Йәшлек" бейеү ансамбле йыш ҡына республика буйлап та, сит илгә лә гастролгә йөрөй. Ансамблдең төп составын тау-урман зонаһы бейеүселәре тәшкил иткән, ә ялан яғынан бейеүселәр бик һирәк булған. Уларҙың барыһының да төп эше колхозда: кеме һауынсы, кеме тракторҙа йөрөй һәм башҡалар. Ләкин йә гастроль тип сығып китеп, йә бейеү өйрәнеү өсөн район үҙәгенә йыш барып, былар колхоз эшенә ныҡ ҡына аяҡ салалар икән. Быға ныҡ йәне көйөп йөрөгән "Заветы Ильича" колхозы етәксеһе Исаак Геаргардович Пеннер бер йыйылышта: "Горная зоня пляшет, степная зона пашет", - ти икән асыуланып.

**Гөлназ САФУАНОВА яҙып алды.**

ИНТЕРНЕТТАН



# БАЛА-САҒАҒА...

## шәкәр ҙә кәрәк

■ Кеше нимә ашай, шул уның тиреһендә асыҡ сағыла, тиҙәр. Ниндәйҙер микроэлемент етмәһә, матдәләр алышыныу процесы шунда уҡ боҙола башлай. Шулай итеп, тирене йәш һаҡлау өсөн ниндәй витаминдар кәрәк һуң? С витамины коллаген епсәләре барлыҡҡа килеүендә ҡатнаша. С витамины етерлек булғанда, тире күгәреп бармай, ҡуҙәнәктәр ҙә әүҙемерәк яңыра. Был витамин аҙыҡ-түлек менән етерлек ҡулланылырға тейеш, ул йәшелсә, емеш-еләктә, мәҫәлән, ҡара ҡарағатта, цитрус емештәрендә, паприкала, шпинатта, кивила, сельдерейҙә күп. Е витамины тирене ультрафиолеттың насар эҙемтәләренән һаҡлай. Ул балыҡтың майлы сорттарында, йомортҡала, үҫемлек майҙарында, сәтләүектәрҙә бар. А витамины етешмәһә, тире кибә башлай. Тырнаҡтарҙың, сәстәрҙең сәләмәтлеге лә А витамины менән бәйле. А витамины сығанаҡтары - аҡ май, ҡабаҡ, эремсек, һыйыр бауыры.

■ Зирәклек күрһәткән кеше башҡаларҙың күҙе алдында бик уңышлы кеше булып күренә, ти Квинсленд университеты ғалимдары. Тикшеренеүҙәрҙә ҡатнашыусылар араһында эрудицияны тикшереүсе һорауҙарға тиҙ яуап биреүселәрҙе шулай баһалағандар. Һөҙөмтәләр аҡыл кеүәһенә, кешенең шәхси сифаттарына бөтөнләй бәйле булмай сыҡҡан. Ғалим Уильям фон Гиппель билдәләүенсә, социаль интеллект - ул белгәнен практикала ҡуллана алған кеше. Бындай кешеләр йыш ҡына лидер булып тора һәм уларҙы тап зирәклеге берләштерә лә инде.

■ Табиптар шәкәрҙе зарарлы тип иҫәпләй. Әммә Америка ғалимдары уның да файҙалы ягын асыҡлаған. Күптән билдәләнеүенсә, сабыйҙарға татлы һыу бирһәң, улар ауыртыуҙы яҡшыраҡ кисерә. Ғалимдар раҫлауынса, 5-10 йәшлек балаларға ла шәкәр ауыртыуҙы баҫыусы булараҡ тәьҫир итә. Был тәьҫир эндорфиндар менән бәйле, улар баш мейеһендә барлыҡҡа килә һәм ауыртыуҙы баҫыусы булып сығыш яһай.

■ Корнелл университеты (АҠШ) ғалимдары раҫлауынса, дисгезия - тәм тойоусанлыҡ боҙолоуы һөҙөмтәһендә кеше ашарға ярамаған нәмәләр ашап, организмына ҙур зыян килтерә. Ғалимдар 158 ауырлы ҡатын-ҡыҙҙан торған төркөмдә тикшеренеүҙәр үткәргән. Бындай тайпылыш уларҙың 47 процентында күҙәтелгән һәм улар йышыраҡ боҙ, крахмал, порошок, һабын, ҡағыҙ, пенопласт, аш содаһы ашаған. Тәм тойоусанлыҡ боҙолоуы, тәү сиратта, организмға тимер етешмәгәндә барлыҡҡа килә. Һынауҙарҙа ҡатнашыусыларҙың тәм тойоусанлығы боҙолоуы менән бергә гемоглобин кимәле түбәнәйеүе асыҡланған. Шуға ла бындай ҡатындар хәүеф төркөмөнә ҡарай, улар араһында ауырлығы нормаға тулмаған балалар табыусылар күберәк. Ашарға ярамаған нәмәне ашарға теләү тойғоһо тимер дефициты менән бергә ҙурая. Анемия мейегә йөгонто яһай һәм кеше ғәҙәттән тыш ашарға ярамаған әйбергә ынтыла башлай, әммә бынан гемоглобин кимәле күтәрелмәй. Ғалимдар иҫәпләүенсә, табиптар дисгевзияға тейешенсә иғтибар бүлергә тейеш, юғиһә, уның сәләмәтлеккә насар йоғонтоһо ҙур.

■ Организмға йод етешмәү арыуҙың сәбәбе була ала. Ғәҙәттә, яҙ һәм йәй миҙгелдәрендә энергия дефициты булырға тейеш түгел һымаҡ, шулай ҙа бындай күңелһеҙлек килеп тыуған икән, тукланыу режимына иғтибар итегеҙ, ти белгестәр. Әгәр ҙә тиҙ арыйһығыҙ, һалҡын тейеп бара, сәстәрегеҙ ҡойола, тирегеҙ кибә икән, етмәһә, хәтер насарайып, ишетеү һәләте түбәнәйһә, йөрәк тибеше боҙолһа, организмға йод етешмәү ихтимал. Йод дингеҙ кәбеҫтәһендә, балыҡ һәм дингеҙ ризыҡтарында күп. Йодлы тоҙҙо ла ҡулланырға була, әммә тоҙҙо оҙаҡ һаҡлаһаң, йодтың күпселек өлөшө юҡҡа сыға, сөнки йод - осоусан берләшмә.

ТӘҮБӘ



# МИН ЭСЕҮЕМДЕ ТАШЛАНЫМ

## Кемдәргәлер - һабаҡ, кемдәргәлер кәңәш һүҙе булһын...

### 15-се һабаҡ: "Һаумы, яңы тормош!"

Бер кеше аҡһаҡалдан көләргә уйлаған. Бының өсөн ул шундай уй-мәкер ауы ҡорған. Усына тере күбәләкте ҡамап тотоп, аҡһаҡалдан унда нимә булыуын, уның тереме-юҡмы икәнлеген һорашырға иткән. Әгәр ҙә аҡһаҡал "тере" тип әйтһә, күбәләкте ҡыҫып үлтерергә, әгәр инде "үле" тигән һүҙ ысҡындырһа, усын асып, күбәләкте осороп ебәреп, унан көләргә ниәтләнгән. Ярай, хуш, ниәтен бойомға ашырырға итеп, ул аҡһаҡал янына килгән.

- Минең усымда нимә? - тип һораған ул ил ағаһынан.

- Күбәләк, - тип яуаплаған аҡһаҡал.

- Тере күбәләкме, әллә үлеме? - тип төп дәлилен килтергән теге бәндә.

- Уның яҙмышы һинең ҡулыңда, үлтерһәң дә, осороп ебәрһәң дә - барыһы ла һинең ҡөҙрәтеңдә, - тип яуап биргән аҡһаҡал.

Шулай итеп, тегенең аҡһаҡалдан көләргә тигән уйниәте тормошҡа ашмаған. Уның ҡарауы, ошо һөйләнгән һүҙҙә йәшәүҙең төп мәғәнәһе ята: беҙ нисек теләйбеҙ, шулай йәшәйбеҙ, теләһәк, тормошобоҙҙо балҡытып, ғүмер юлыбыҙҙы йәшнәп үткәрә алабыҙ, теләмәһәк, йәғни ағым ыңғайына китһәк, тормошобыҙға тулҡыны беҙҙе яҡын арала ярға бырахтырып китәсәк. Нисек кенә булмаһын, барыһы ла, бәхетебеҙ менән бәхетһеҙлегебеҙ ҙә, үҙебеҙҙең ҡулда...

Күптәр ниндәйҙер уңышһыҙлыҡҡа осраһа, "яҙмыш" тигән һылтанманы ҡуллана. Йәнәһе, "яҙмышым шулай булғас, ҡалайтайым, яҙмыштан уҙмыш юҡ...". Кем белә, бәлки, ысынлап та, яҙмыш маңлайға яҙылалыр ҙа, әммә Аллаһы Тәғәлә шуға "Сәбәп ҡыл!" тигәнде лә өҫтәп әйткән бит әле. Ярай, үҙ бәндәһен һынар өсөн ул ауырлыҡтарын да, енеллектәрен дә берҙәй үк ебәрҙе, ти. Әммә улар тотош яҙмышты билдәләмәй, һәр ауырлыҡ артынан енеллек, һәр ҡайғы артынан шатлыҡ та килеүсән. Шул уҡ ваҡытта бер яҙмыш тик бәхеткә генә, йәки бәхетһеҙлеккә генә ҡоролмай.

Туҡтауһыҙ эскән һәм унан ҡотола алмаған кеше, мәҫәлән, был әмәлен яҙмышына япһара алмай, сөнки Аллаһы Тәғәлә Иблистең күңел аҙҙырғыс был сараһын бөтөнләй инҡар итә, уға ҡаршы мәңге көрәшә. Тимәк, эскеселек кеше тәбиғәтенә һәм яҙмышына бөтөнләй ят күренеш. Кемдер берәү эсеүенән ҡотола алмай, эскесе булып ғүмер һөрә икән, уның ысын, Аллаһы Тәғәлә һыҙған ғүмере бөтөнләй икенсе яҙмыш буйлап, эргәһенән генә үтә. Уйлаһаң, уйылып китерлек, сәстәр үрә торорлоҡ хәл бит был. Тимәк, эскән кеше Аллаһы Тәғәлә һыҙған юлдан түгел, Иблистекенән үтә һәм уның ғүмере хата булып сыға. Кем эсә, ул дөрөҫ йәшәмәй, тигәнде аңлата был билдәләмә. Күпме икән Ер йөҙөндә үҙ ғүмере, үҙ яҙмышы менән йәшәмәүселәр?

Мин эсеүемдән ҡотолғас ҡына үҙемдең донъялыҡтағы бик күп ҡиммәттәремде, бер ҡасан да ҡайтарып булмаҫ бәхетле мәлдәремде юғалтыуымды аңланым. Иң-иң ныҡ үкендергәне - тик йәшлектә була торған аҫыл тойғоло миҙгелдәремдең бахмур һөрөмө менән ҡапланыуы. Ул таңдар минән, йәшлегем кеүек үк, мәңгелеккә алыҫлашҡан, үкереп, ер тырнап илаһам да, кире ҡайтмаясаҡ. Күңелдә бер тапҡыр балҡыған һөйөү, мөхәббәт хисен кире тергеҙеп булмаған кеүек, ул тойғоларым менән мәңгелеккә бәхилләшкәнмен. Мөхәббәт тойғоһо минең күңелемдә таңғы нурҙарға сорналған йыр һымаҡ ҡына ине. Араҡы шауҡымы, тәмәке төтөнө зиһенемде бутаны, тын юлымды быуҙы, тауышымды ҡарлыҡтырҙы, ул йырымды йырлай ҙа алманым, шатлыҡ тойғоларым кисерелмәйенсә ҡалды.

Эсеүемде ташлағандан һуң бер йыл самаһы ваҡыт үткәс, тәүге мөхәббәтемә кире ҡайтырға ҡарар ҡылдым. Әммә, нисек кенә тырышһам да, был әмәлем бары тик йәшлегемде иҫкә төшөрөү, хыялымды ысынбарлыҡҡа әйләндерергә тырышыу өсөн өтәләнеү, тыпырсыныу ғына булып килеп сыҡты. Ни өсөн мин ул саҡҡа кире ҡайта алманым һуң? Сөнки шул йылдар менән бергә тик ул саҡтағы ғына булған ихласлығым да юҡҡа сыҡҡайны, үлгәйне шул. Ни эшләргә лә белмәйенсә, бары тик тыумыш асылыма ҡайтып, йәки уйҙарым менән сабый саҡтарыма барып, бөлмәгә бикләнеп, түгелеп-түгелеп иларға ғына ҡалды...

Ҡасандыр Аллаһы Тәғәлә минең өсөн генә тип һыҙған бәхет юлынан китеү мөмкинлеген шулай юғалтҡанмын икән. Хәҙер инде шул юлдан барырға тырышыуым ҡыланыу һымаҡ ҡына килеп сығасаҡ. Шулай булды ла. Ни эшләргә? Тик үткәндәргә илтер хәтирәләр менән генә йәшәргәме? Минең йәшәр әмәлем, юлым барҙыр бит? Кемдендер әҙер һуҡмағына төшөргәме? Юҡ, тапалған һуҡмаҡтан барыу шул тиклем күңелһеҙ һәм мин унан атлау ғына түгел, кешене, хатта үҙ-үҙемде лә ҡабатлап йәшәй белмәйем. Икенсе төрлө әйткәндә, саф шишмә һыуҙарын ғына эсергә яратам.

Айныҡ йәшәүемдең тәүге өс йылында яҙмыш арбаһынан төшөп ҡалған сабый кеүек хис иттем үҙемде. Әйтергә кәрәк, артабанғы тормошомдо нәҡ ошо йылдарым билдәләне лә инде. Дөрөҫөн әйткәндә, ошо өс йылда мин үҙ-үҙемде "яңғыҙлыҡ төрмәһе"нә бикләп, язаға тарттырҙым. Иң тәүҙә "Иблис һуҡмағынан йөрөгәнем өсөн" тип билдәләнем был язамды. Артабан яҡындарыма, туғандарыма килтергән бәлә-ыҙаларым өсөн дә үҙемә яза уйлап сығарҙым: барыһы өсөн дә уларға изгелек менән түләргә. Шулай итеп, үҙ-үҙемде язаға тарттырыуым артабанғы йәшәүемдең мәғәнәһенә билдәләне лә ҡуйҙы.

Әле барлығы 4015 көн, йәки 96360 сәғәт мин спиртлы эсемлек тәьҫиренән азатмын, йәғни ошо ваҡыт араһында ауыҙыма бер тамсы ла алмағанмын. Тәүҙә һәр бер көнөн, сәғәтен һанап барҙым һәм уларҙы үҙемдең оло еңеүем тип баһалайым. Ауылыма ҡайтҡанда мәсеткә таңғы намаҙға инеп ултырҙым, аҙаҡ, форсаты сығып, сиркәүгә лә инеп сыҡтым. Иртәнге тынлыҡта ауылыбыҙ аҡһаҡалдары менән донъя хаҡында гәпләшеп, аҙаҡ намаҙ тауышына ойоп ултырғанда, сиркәүҙә күмәк тауыш менән йырлауҙарын тыңлағанда, үҙемдең Аллаһы Тәғәләгә яҡынлағанымды аңланым. Барыһын да әшкәртте Аллаһы Тәғәлә: минә борғоланырға, йәки кире юлдан китергә әмәл юҡ. Аллаһы Тәғәләгә яҡынлағанмын икән, тимәк, ул мине ғәфү иткән. Шул саҡ күңелем һәм йөрәгем телгә килгәндәй булды, гүйә, "Һаумы, яңы тормош!" тип өндәште. Уларға ҡушылып ирендәрем дә шул уҡ һүҙҙәрҙе ҡабатланы. Һаумы, яңы тормош!

**Әхмәр ҮТӘБАЙ.**
**(Аҙағы. Башы 39-50-се һандарҙа).**

ӘЙҘӘГЕҘ...

# ҠАРА ЙОЛАҒА БУЙҺОНМАЙЫҠ!



Белмәйем, ҡайһы йылды ҡаршылап ултырғанбыҙҙыр. Ғәҙәттәге Яңы йыл өҫтәле. Сәғәт ун икене һуҡҡанын көтәбеҙ. Өҫтәл артында һеңлемдең, атайымдың ултырғанын иҫләйем. Бәлки, тағы ла кемдәрҙер ултырғандыр. Атай минә лә шампан шарабы ҡойоп бирҙе.

- Йә, күтәреп ебәр, - ти.

- Мин эсмәйем, - тием.

- Ҡуйсәле, ҡасан да булһа ла барыбер башларға кәрәк тә инде. Хәҙерҙән өйрәнә торһағыҙ, еңелерәк була. Мин һеҙҙе һөйрәлеп эсеп йөрөргә саҡырмайым бит. Самаһын белеп эсһән, бер зыяны ла юҡ ул...

- Бөтә нәмә лә шулай башланып китә инде. Самалар аҡрынлап киңәйә - һәм диңгеҙ тубыҡтан...

- Йә, йә. Өлкәнәйгәс, һеҙҙе ошондай байрамдарға, кисәләргә саҡырырҙар. Бөтәһе лә шат көлөшкәндә, күңел асҡанда, бер һин генә "эсмәйем" тип киреләнеп ултырһаң, уңайһыҙ ҙа һуң...

- Әй алйот, - тиеп енләнәм...

Был һөйләшеүҙән һуң бер нисә йыл ваҡыт үтеп китте. Мин мәктәпте тамамланым. Үҙемдең "айыҡлыҡ" сәйәсәтемде мәктәп аҙағынаса алып килеп еткерергә насип булды. Ә ошо ваҡыт эсендә ниндәй генә киске ултырыштар,

ХАЛЫҠ ДАУАҺЫ

# БАЛСЫҠТЫ АШАРҒА ЛА...

## уның менән дауаланырға ла мөмкин



Башҡорттар борон-борондан балсыҡты, ташты, көлдө һәм башҡа шуның кеүек матдәләрҙе үҙ мәнфәғәттәрендә файҙаланған. Йәшмә, мәҫәлән, кешене эстән таҙалай, ғүмерен оҙайта икән. Уны ҡыҙҙырып, һыулап ашай торған булғандар. Өләсәйем мәрхүмәнең әйтеүенсә, йәшмәне ҡулланыу ысулы әлегәсә һаҡланып ҡалмаған. Был ташты ҡан ағыуҙы туктатыу өсөн, ашҡаҙан, туҡ эсәк, талаҡ ауырыуҙарынан арыныу өсөн ҡулланғандар. Оҙайлы эс китеү осраҡтарында, ҡатындарҙың енси ағзалары ауырыған саҡтарҙа ла йәшмәне файҙаланғандар.

Утын ағыу һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килгән көл дә халыҡтың дауалау саралары иҫәбендә йөрөгән. Көлгә укшыткан ваҡытта мөрәжәғәт иткәндәр. Шулай уҡ ҡан ағыуҙы туҡтатыу өсөн, эсәктән ҡан килгәндә лә ҡулланғандар. Һейҙектә ҡан булғанда ла файҙаланғандар уны. Шуныһы ғына ҡәйефте ҡыра - йәшмә менән көлдө ҡулланыу ысулы һәм тәртибе тарих төпкөлөндә тороп ҡалған.

Ошо йылдың йәй уртаһында беҙ, өс ир-егет, Сәрмән эргәһендәге Рәз тауына сәйәхәт ойошторҙоҡ. Ашамлыҡ, кәрәк-яраҡтарҙан тыш, ике ҡаҙаҡ балсыҡ та алдыҡ - ашау өсөн һәм дарыу сифатында. Балсыҡты туктауһыҙ ашарға ярамай, сөнки ғәҙәткә инеп китеүе ихтимал. Өс көн ашап, өс көн ашамаҫҡа кәрәк уны. Беҙ иһә балсыҡты бер аҙна ашайбыҙ, бер аҙна туҡтатып торабыҙ.

Сәйәхәт ваҡытында шундай ваҡиға булды: Нуретдин улы Айҙарҙың уң аяҡ сикәһен ниндәйҙер бөжәк сағып китте. Ҡаяуын ҡалдырыуын ҡалдырманы, әммә ҡаҙаған урыныың ҡүгә яҡын икәнен билдәләү ауыр булманы. Үткәл йылғаһынан бер нисә һалҡын таш алып, ҡыҙарып торған нөктәгә алмаш-тилмәш һалып ҡараныҡ. Был дауалау ысулы файҙа килтермәне - ярты сәғәт үтеүгә Айҙарҙың уң күҙен зәңгәрҡыҙыл төҫтәге шеш тулыһынса уратып алды. Эстән гено уйлап ҡуйҙым: "Дуҫымды траж саҡманымы икән? Шеш бигерәк тиҙ ҡалҡып сыҡты бит!" Шул мәлдә Баҡмал оләсәйемдән ишеткән кәңәш иҫкә килеп төштө. "Балам, ҡырҙа йылан-мәҙар сағып китһә, шул урынға ҡалын итеп балсыҡ һыла. Ағыуын һурып ала ла ҡуя". Өләсәйемдең әйткәндәрен Айҙарға һөйләп торманым. Ғалинур ҡусты менән дуҫыбыҙҙың сикәһенә ҡалын итеп аҡ балсыҡ һыланыҡ. Иртәнсәк тороуыбыҙға шеш тулыһынса бөткәйне - ҡаяу ҡаҙалған урында кескәй күрән нөктәне генә күрҙек.

Нисек ашайҙар балсыҡты? Ярты балғалаҡ балсыҡты ауыҙға һалаһың. Шунан һыу уртлап, ауыҙ эсендәге иҙелмәне унға-һулға йөрөтәһен. Ни тиклем оҙағыраҡ йөрөтһәң, шул тиклем сихәте юғарыраҡ була. Балсыҡ иҙелмәне теш араһына тупланған микробтарҙы үлтерә, теш ҡаҙналарын һауыктыра һәм урттағы кескәй яраларҙы уналта. Төшкө йәки киске ашҡа тиклем ярты сәғәт самаһы ваҡыт ҡалдырып, шул мәлдә ашап ҡалырға кәрәк уны. Ни булһа ла, ас ҡорһаҡҡа ашау отошлораҡ балсыҡты. Тәүге осорҙа көнөнә бер балғалаҡ ашаһаң, шул етә. Иң күп тигәндә, көнөнә ике балғалаҡтан да арттырырға ярамай. Айына бер аҙна ашаһаң, буйтым етә. Тағы шундай кәңәш: балсыҡ ашауҙы ошо өлкәлә тәжрибәһе булған кеше етәкселеге аҫтында башлап ебәреү отошлораҡ буласаҡ.

Балсыҡты башҡа төбәктәрҙә лә ашайҙар. Хәрби хеҙмәтте мин Алыҫ Көнсығышта үттем. Шунда урындағы халыҡ вәкиле, орочон милләтенән ине ул, аҡ балсыҡ ашауҙары хаҡында һөйләп ултырҙы. Тәбиғи шарттарҙа ундағы балсыҡтың ҡар кеүек аҡ, ҡойҡа кеүек мөлкөлдәп тороуы хаҡында әйтте. Уны болан һөтөнә ҡушып та эсәләр икән. Бындай ризыҡтың нәзәкәтлеләрҙән иҫәпләнеүен дә телгә алды. "Уны беҙҙә иң хөрмәтле ҡунаҡтарға тәҡдим итәләр", - тине.

Балсыҡтың шифаһы шуның менән бәйле - ул ашҡаҙанға барып етеү менән серегән матдәләрҙе, артыҡ һелтене йә зыянлы лайланы үҙенә йыя башлай. Микробтарҙы ҡыра, улар эшләп сығарған ағыулы матдәләрҙе һурып ала. Шуның өсөн дә, ниҙәнелер ашап, ағыуланғаныңды һиҙһәң, балсыҡ ашарға кәрәк. Ул кешене йә ҡоҫтора, йә ағыуҙы үҙенә туплап, тышҡа сығарыуға булышлыҡ итә. Тарихсылар әйтеүенсә, Урта быуаттарҙа кешеләр, дошмандарынан ҡотолоу өсөн, йыш ҡына ағыу ҡулланған. Шуға күптәр эсемлек тәҡдим ителһә, һауыт эсенә балсыҡ киҫәге һала торған булғандар. Бындай мөмкинлек булмаған хәлдә, балсыҡты ҡунаҡ йортона барып инер алдынан ашағандар.

Балсыҡ иҫ киткес көскә эйә - ул бөтә ауырыуҙарҙы ла еңә ала. Хатта йөрәк тамырҙарына ултырған холестериндан да арындыра ала кешене. Яман шеш ныҡ аҙған саҡта ғына ярҙам итә алмауы мөмкин. Дауалауҙы, әлбиттә, һәр кем тормошҡа уңышлы ашыра алмай - бының өсөн тәжрибәле халыҡ табибына мөрәжәғәт итергә кәрәк.

**Самат МӨХӘМӘТЙӘНОВ,**
**философия фәндәре докторы, профессор.**
**(Аҙағы. Башы 50-се һанда).**

---

йыйылыштар, байрамдар булып үтмәне. Үҙемдең һыра эскән синыфташтарымдан көлә торғайным. Ләкин үҙемде лә алда оятһыҙ ғәмәлдәр көткән булған икән. Күрше егетте әрмегә оҙатҡанда беренсе тапҡыр араҡы тәмен татыным. Дуҫлашып йөрөгән ҡыҙым менән ташлашҡан сағым ине, күнелдә - шомло бушлыҡ, еңелеү тойғоһо тыуҙырған бойоҡлоҡ. Алдыма тулы рюмка ултырткандар ҙа: "Эс! Эс! Эс! Эс!.." - тиеп бөтә табындағылар өндәй башланы. Тегеүрше егет ҡолаҡ төбөмдә шыбырлай: "Күтәреп ебәргән бул, мине ихтирам итһәң. Эсмәһәң, минең күңелгә ҡыйын буласаҡ..." Өгөткә бирелдем.

- Һинең һаулыҡ өсөн! - тигән булам.

- Үәт, афарин! Үәт, булдыраһың, әй, - тиеп һөрәнләйҙәр. Ҡайһылары ғәжәпләнгән, ҡайһылары мут йылмая, ҡайһыларының иһә быға әллә ни иҫе лә китмәгән, ахыры. Ҡолаҡ тондо, тауыштар салыш-солош ҡына булып ишетелә. Ә шайтан һыуы ут булып яй ғына эсемә инеп ятты. Кире иҫемә килдем. Бер яҡтан, ғорурланам да: имеш, ҡайһындай компанияла мине үҙ иттеләр. Икенсе яҡтан, оят: ниндәй сиккә килеп еттем мин? Әммә шайтан оятымды тиҙ баҫты: "Рәхәтлән. Йәшлегеңдә күнелле итеп үткәреп ҡал. Тапҡанһың ҡайғырыр нәмә..."

Иртәгәһен әсәйем дә минең был бер рюмка араҡы эскәнем тураһында хәбәрҙе тыныс ҡына ҡабул итте. Әйтерһең дә, бер ниндәй ҙә ҡурҡыныс нәмә булмаған, был тәбиғи хәл...

Сығарылыш кисәһенән һуң синыф менән төнөн тау битенә сығып ултырҙыҡ. Күп итеп һыра алғайныҡ. Еҫе генә лә ниндәй ерәнес! Уны нисек танау төбөнә килтерәләрҙер инде?..

Иртән атай күңелле йылмая:

- Һеҙҙең яҡта һыра эскәндәр, тиҙәр ине. Бер йәйҙә араҡыны ла, һыраны ла тәмләп ҡараның инде, ә?

- Ха-ха, ә мин һыра эсмәнем!..

Синыф менән йәй буйына эсеп сыҡтыҡ. Йә береһе уҡырға ингән, йә икенсеһе, йә хушлашыу алды репетицияһы, йә оҙаҡҡа хушлашыу... Шулай күңелле лә, ҡыҙыҡ та кеүек ине.

Яҡтан ла айыҡлыҡ яғынан эштәр шәптән булманы. "Эсмәйем", тигән һымағыраҡ йөрөһәң дә, "бабай"ҙарҙың эсергә ныҡышмалы көсләүенә ҡаршы килеп булмай. Шул саҡта ғына улар үҙҙәренеке итеп ҡабул итә. Аҙаҡ, мосолман егеттәре менән танышып, улар йәшәгән фатирға күсеп китеүем генә минең эргәмдән ошо ҡурҡынысты, ниһайәт, алып ташланы. Һәм шул саҡтан алып бөгөнгәсә бер иҫерткес эсемлек тә ауыҙыма алғаным юҡ, Аллаға шөкөр, эсергә уйламайым да...

Хикәйәмде башлап ебәргән Яңы йыл кисенә кире әйләнеп ҡайтмаҡсымын. "Йәштәрҙең эскәненә аптырайбыҙ, ә тәү башлап рюмканы уларға кем һона һуң? - тип әсенеп яҙа был турала яҡташ журналист егет. - Байрамдарҙа, өмәләрҙә, туйҙарҙа ҡыҙмаса булып алған ата-әсә балаһына рюмканы үҙе тоттора түгелме һуң? Имеш, еңгәй хөрмәтенә берҙе күтәреп ебәргән бул. Тотмай ҡаршылашҡандарға ла яуабы әҙер уларҙың: "Ҡуй, инәлтмә, ҡасан булһа ла барыбер башларға тура киләсәк бит".

Был күренештә бәйән ителгән ваҡиғалар бер ғаиләнең шәхсән ғибрәте генә түгел, ә бөтә заманға хас бәлә. Күп башҡорт ғаиләләрендә был "кара йола" һаман да йәшәй әле һәм ул халыҡты упкын ситенә этәреүҙе дауам итә...

**"Бәйләнештә"ге "Ейәнсура мосолмандары" төркөмөнән алынды.**

---

УҢЫШ ҠАҘАН



# ҮҘ-ҮҘЕҢӘ ЫШАНЫУҘЫҢ ТӨП СЕРҘӘРЕ

## Икенсе сер

**Сағыштырыу ҡурҡыу тыуҙыра.** Сағыштырыу, ғөмүмән, түбән үҙбаһа билдәһе. Үҙен һәр саҡ башҡалар менән сағыштырыусылар гелән ҡурҡып йәшәй. Ул үҙенән юғарыраҡ тороусыларҙан ҡурҡа. Уларҙы яҡшыраҡ һәм аҡыллыраҡ тип иҫәпләй, бер ваҡытта ла шундай кимәлгә етмәм һәм компетентлы була алмам, тип уйлай. Ул хатта үҙенән түбәндәрҙән дә ҡурҡа, сөнки уларҙың бит ҡыуып тотоп, уҙып китеүе мөмкин. Ҙур компанияларҙа эшләгәндә бындай кеше үҙенең һиҙгерлеген юғалтмай, тирә-яғына ҡарана, берәй хәүеф яҡынлашыуын тоймай ҡалмайым, тип ҡурҡа. Ни тиклем хеҙмәт баҫҡысы буйынса юғарыраҡ күтәрелә, шул тиклем ҡолауҙан ҡурҡа. Ундай кеше был тормошта йәшәүҙең берҙән-бер ысулы - кешеләрҙе уларҙың үҙҙәренең ҡоралы менән үк туҡмау, тигән һығымта яһай. Әммә уның ынтылышы бары тик күршеһенең "танауына сиртеү" булғанлыҡтан, тормош уның өсөн барлыҡ матурлығын һәм ҡыуанысын юғалта.

**Көнәркәшлек - ижади ҡараш дошманы.** Дәғүәселектән, көнәркәшлектән телһә ҡайһы формаһы дошманлыҡ тыуҙыра. Уның ҡайһы бер төрҙәре дуҫтарса булһа ла, уларҙың төп дәлиле - икенсе кешенән яҡшыраҡ булыу йәки яҡшыраҡ эшләү. Һеҙ был ерге дәғүәләшергә түгел, ә ижад итергә, тәҙәргә, булдырырға килгәнһегеҙ. Әгәр үҙегеҙҙең ғәмәлдәрегеҙҙә бары тик дәғүәселек менән генә етәкселек итһәгеҙ, ул бер ваҡыт һеҙгә ҡаршы эшләй башлаясаҡ һәм үҙегеҙ үк ярыҡ ялғаш эргәһендә ҡаласаҡһығыҙ. Тормош мәғәнәһе дәғүәләшеүҙә түгел. Бер аҡыл эйәһе әйтмешләй: "Мин һеҙгә ҡаршы түгелмен, мин бары тик үҙем өсөн!"

Тәү ҡарашҡа, көслөләр генә йәшәй ала һәм ҡояш аҫтында үҙ урыныңды табыу өсөн көрәшергә кәрәк кеүек күренәләр. Әммә былай тип бары тик дәғүәләшеү ихтыяжын кисереүселәр генә уйлай. Күпселек, моғайын, бала саҡтан уҡ көнәркәшлекте яҡлау һәм хуплау принциптарын аңлап үҫкәнгә, был идеяны кире ҡағыр. Уларҙан, көнәркәшлек сәләмәт була аламы, тип һораһаң, улар ҙур энтузиазм менән уның сәләмәт кенә түгел, ә мотлаҡ кәрәк икәнлеген раҫлай башлаясаҡ. Уларға көнәркәшлек тормош мәғәнәһенән бирә, маҡсат билдәләй һәм үҫешкә йүнәлеш күрһәтә, ғөмүмән, кеше яҡшы эше өсөн "баһаһын" алырға тейеш кеүек тойола. Уларҙың башына бер ваҡытта ла наградаһың - һөҙөмтә түгел, ә эш процесы булыуы башына ла инеп сыҡмай.

Беҙ бер-беребеҙ менән үҙебеҙгә һәм үҙ һәләттәребеҙгә ышанмағанда ғына дәғүәләшәбеҙ. Көнәркәшлек - ул имитация ғына. Ул бала саҡта тирә-яҡтағыларға оҡшарға тырышыуҙан барлыҡҡа килә. Кешегә башҡалар унан яҡшыраҡ кеүек тойола һәм ул башҡаларҙы үтергә тырыша. Һөҙөмтәлә ул үҙен һәр саҡ башҡалар менән сағыштыра һәм һәр саҡ маҡтап тороусыларға мохтаж. Үҙлекле кешеләр, киреһенсә, көнәркәшлек ихтыяжын кисермәй, үҙҙәрен икенсе берәү менән сағыштырырға теләмәй йәки уларҙан яҡшыраҡ булырға тырышмай. Улар үҙ тормоштарын камиллаштырырға ынтыла һәм был юлда шәхси үҫеше өсөн бары тик үҙ-үҙҙәре менән генә ярыша.

**Роберт ЭНТОНИ.**

✓ *Бында йондоҙҙарҙың нисек урынлашыуы түгел, ә бөтә нәмәнең дә үҙебеҙҙең аңыбыҙға бәйле булыуын аңлау төп шарт. Үҙебеҙҙең көйләнешебеҙ һәм ғәмәлдәребеҙ үҙгәрештәрҙең ыңғаймы әллә кирегәме китеүенә сәбәп буласаҡ.*



ЫШАНҺАҢ - ЫШАН...

# ЭШ ЫРАТҠАН - УҢЫР,

## юрағаны юш килер



**2016 йылда Көнсығыш календары буйынса ҡыҙыл төҫтәге Утлы Маймыл йылын ҡаршылайбыҙ. Астрологтар күҙаллауынса, был йыл тормошта үҙгәрештәр, ыңғай тәьҫораттар һәм үҫеш өсөн бик күп мөмкинлектәр алып килә. Шуның өсөн, тип киҫәтә улар, үҙгәрештәргә яраҡлашырға тырышырға, тышҡы мөхиттең тиҙ алмашыныусан күп төрлөлөгөнә әҙер булырға кәрәк.**

Йыһан циклы киләһе йылдың артабанғы үҫеш юлдарын билдәләүсе йыл буласағына ишара яһай. Астрологтарҙың күпселеге юрауынса, киләһе йыл кешелек үҫешендә яңы кимәлгә алып сығыуға булышлыҡ итерлек тамырынан үҙгәрештәргә нигеҙ булмаҡсы. Ләкин бында йондоҙҙарҙың нисек урынлашыуы түгел, ә бөтә нәмәнең дә үҙебеҙҙең аңыбыҙға бәйле булыуын аңлау төп шарт. Тап ана шул үҙебеҙҙең көйләнешебеҙ һәм ғәмәлдәребеҙ үҙгәрештәрҙең ыңғаймы әллә кирегәме китеүенә сәбәп буласаҡ, тигән фараздар бар.

2015 йыл ахырында күҙәтелеүе ихтимал планеталар параде иһә иҫке системаның емерелеүенә килтереп, яңы, прогрессив үҙгәрештәргә юл асасаҡ. Шуға ла йондоҙҙар күп нәмәнең үҙ аңыбыҙға һәм көйләнешебеҙгә бәйле үҙгәрешен ҡат-ҡат киҫәтә.

Дөйөм дәүләт кимәлендә йыл социаль, мәғариф, һаулыҡ һаҡлау өлкәләрендә реформалар вәғәҙәләй. Әйтергә кәрәк, 2016 йылдың "хужаһы" ғәҙәти булмағансараҡ холоҡ эйәһе икәнен яҡшы беләбеҙ. Ул һис тә моңайып ултыра торғандарҙан түгел һәм беҙгә лә йоҡомһорарға ирек бирмәйәсәк, ахыры. Донъя аренаһында иҡтисади һәм сәйәси дауылдар ҡупҡан мәл. Күрәҙәселәр кемуҙарҙан заман ахыры менән ҡурҡыта: һыу баҫыуы, Ер планетаһына комета бәрелеүе, яңы химия ҡоралы уйлап сығарыу һәм башҡа шуның кеүек имеш-мимештәр таратыла. Тик теләһә ниндәй уйҙырмаларға иғтибар итмәү хәйерле. Маймыл йылының борондан күҙәтелгән тағы бер сифатын иҫкә төшөрә күрәҙәселәр: был билдә хужаһы, өҫтәүенә, аҡыллы, тынғыһыҙ, ҡыҙыҡһыныусан, иҫәпсел, һаҡсыл һәм үтә күреүсән дә йән эйәһе. Уның тап ана шул сифаттарына нигеҙләнеп, бер нәмәгә ныҡлы ышаныс бағларға ҡала: Рәсәй бирешмәйәсәк! Ул ғына ла түгел, бәлки, Евразия берлеген булдырыу һөҙөмтәһендә Рәсәй донъя аренаһында үҙенең иҡтисади һәм сәйәси йоғонтоһон нығытасаҡ ҡына. Амин, шулай була күрһен, тип теләйек һәм ошо урында маймыл йылының беҙгә шәхси планда ниҙәр "ниәтләүен" ҡарайыҡ.

Маймыл - мәрәкәләргә һәм уйлап сығарыуҙарға маһир. Ул ғәҙәти булмаганса, сәйер холоҡҡа эйә, тигәйнек. Өҫтәүенә, ул күпһөйәр, шаушыу ярата. Был, тимәк, уйындың уртаһында булыуға ишара. Кемдәр күптән үҙ яртыһын тапҡан һәм тынысланған, юшҡын баҫҡан хистәрҙе яңыртып алыу бер ҙә ҡамасаулаmaҫ. Ниндәй юлдар һәм саралар менән - быныһы хаҡында маймыл өндәшмәй генә күҙ ҡыҫа. Тимәк, быныһы һәр кемдең мәҙәни кимәле, фантазияһына бәйлелер, тигән уй ҡала. Кемдәр яңғыҙ-ярым, уларға ла моңайырға кәрәкмәй. Әүҙемерәк булырға, яңырыуҙан, өйрәнелгән стиль-имиджығыҙҙы үҙгәртеп алыуҙан һис тә ҡурҡырға ярамай. Маймылдың финанс мәсьәләләрендә алдан күрә белеүсәнлеген, хәйләкәр, һаҡ һәм һаҡсыл булыуын да иҫкә төшөрә йондоҙнамә. Бөтөн ғәмәлдәрегеҙҙе ете ҡат үлсәп, аҡса туҙҙырмай, кереһенсә, уны арттырыу сараһын күреп башҡарығыҙ. Аҡсағыҙ күп булһын өсөн, фэн-шуй белгестәре көмөш төҫөндәге тәңкәне (монета) ебәк ҡульяулыҡҡа төрөп, һул яҡ кеҫәлә йөрөтөргә кәңәш бирә.

Яңы йылды нисек ҡаршыларға? Яңы йыл кисәһен мотлаҡ тәбиғи (бәрхәт, ебәк, органза, атлас) туҡыманан тегелгән ҡыҙыл, ал, ҡуйы ҡыҙыл (сейә төҫлө), йә булмаһа, ҡыҙғылт һары (әфлисун), алтын-һары, перламутр, көмөш төҫтәге кейемдә ҡаршылау яҡшы, тиҙәр. Сағыу, һутлы был төҫтәр гаммаһы, һис һүҙһеҙ, бәхет һәм уңыш билдәһе. Алтын, гәүһәр, ҡыҙыл һәм аҡ диңгеҙ ынйылары кеүек биҙәүестәр ҙә бик урынлы буласаҡ. Ир-егеттәргә был кистә ҡара йә алтынһыу төҫтәге классик костюм килешер. Улар өсөн маймылды шатландырырлыҡ үҙенсәлекле һәм сағыу галстук йә "бабочка" бик мөһим.

Яңы йыл табыны. Байрам өҫтәленә майһыҙ, еңел салаттар әҙерләгеҙ. Йәшелсә-емеш мул булһын. Өҫтәл түренә банан ҡуйырға онотмағыҙ. Итле аш-һыу, балыҡ, һәр төрлө бәлештәр, тәм-том һәм яңы бешкән икмәк өҫтәлебеҙҙең йыл буйына мул буласағына ишаралар.

СӘЛӘМӘТ БУЛ!

# КУРКУМА ОНТАҒЫ ТУРАҺЫНДА

**Куркума онтағын күп ризыҡтарға сағыу һары төҫ индереү өсөн ҡулланғанды бөтәһе лә белә. Әммә был тәмләткестең йод, фосфор, тимер, төрлө витаминдар сығанағы булыуы барыһына ла мәғлүм түгел. Ҡытай һәм аюрведа дауаһында куркума электән ҡулланыла. Уның файҙалы үҙенсәлектәрен артабан ентекләберәк тикшерәйек:**

- куркума бауырҙы ағыулы матдәләр йоғонтоһонан һаҡлай, эшмәкәрлеген яйға һала;
- үт ҡыуыығын көйләргә ярҙам итә;
- көслө антисептик үҙенсәлеге бар;
- аш һеңдереү процесын тиҙләтә, эсәктең микрофлораһын яҡшыртырға ярҙам итә;
- ауыҙҙан насар еҫ килеүҙе бөтөрә;
- баш ауыртыуын баҫа;
- ҡан баҫымын төшөрә;
- ҡанды таҙарта;
- йөрәк мускулдарын нығыта;
- ҡанда холестерин кимәлен төшөрөргә ярҙам итә.

Ғалимдар был тәмләткестә булған "куркумин" матдәһе бауырға организмдан канцероген мат-дәләрҙе сығарыусы ферменттар барлыҡҡа килтерергә ярҙам итеүен асыҡлаған. Бик күп төрлө ауырыуҙарҙан дауалауына ҡарамаҫтан, куркуманы бик һаҡ ҡулланырға кәрәк. Мәҫәлән, ҡайһы бер ауырыуҙар ығата көсәйгән осраҡта тәмләткесте ашарға ярамай. Йөклө ҡатындарға һәм дарыу ашаған кешеләргә куркуманы күп ҡулланыу тыйыла. Ул дарыуҙарҙың тәьҫирен арттыра. Шулай уҡ, был тәмләткес ҡанды шыйығайта, антикоагулянттар менән бергә ҡулланырға ярамай. Куркуманы башҡа төр тәмләткестәр менән бутамау хәйерле.

Күп диетологтар һәм табиптар куркуманы ашар алдынан ярты балғалаҡ күләмендә ашарға кәңәш итә. Тик онтаҡты ҡапҡас та, күп итеп һыу эсергә кәрәк. Шулай уҡ, куркуманы үҙенә оҡшаған һәр аш-һыуға ҡушып һалырға була. Халыҡта куркуманан эшләнгән "алтын һөт" бик популяр. Уны әҙерләү өсөн 2 ҡалаҡ куркума онтағын бәләкәй һауыҭҡа һалып, бер стакан һыу ҡушып бутарға һәм ҡайнатырға. Ҡайнап сыҡҡас, талғын утта тағы ла 5-10 минут болғап ҡайнатырға. Кетчупҡа оҡшаған паста массаһы килеп сығырға тейеш. Уны банкаға һалып, һыуыҡтыҫта бер ай һаҡларға була. Масса әҙер булғас, бер стакан һөттө йылытырға ҡуйығыҙ, ләкин ҡайнағансы тотмайбыҙ. Был һөткә бер балғалаҡ куркума пастаһы ҡушабыҙ. Алтын төҫөндәге шифалы эсемлек ошо рәүешле әҙерләнә. Ул үрҙә һанап үтелгән ауырыуҙарҙан һәм башҡа күп сырхауҙарҙан ярҙам итә.

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1437 һижри йыл.*

| Декабрь (Рабигел әүүәл) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Ауыҙ асыу, аҡшам | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 21 (10) дүшәмбе | 8:09 | 9:39 | 13:30 | 15:18 | 16:48 | 18:18 |
| 22 (11) шишәмбе | 8:10 | 9:40 | 13:30 | 15:18 | 16:48 | 18:18 |
| 23 (12) шаршамбы | 8:10 | 9:40 | 13:30 | 15:19 | 16:49 | 18:19 |
| 24 (13) кесе йома | 8:10 | 9:40 | 13:30 | 15:19 | 16:49 | 18:19 |
| 25 (14) йома | 8:11 | 9:41 | 13:30 | 15:20 | 16:50 | 18:20 |
| 26 (15) шәмбе | 8:11 | 9:41 | 13:30 | 15:21 | 16:51 | 18:21 |
| 27 (16) йәкшәмбе | 8:11 | 9:41 | 13:30 | 15:22 | 16:52 | 18:22 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



### М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**19-20 декабрь Премьера "Йософ менән Зөләйха"** (Кол Ғәли, Ю. Сафиуллин инсц.), музыкаль риүәйәт

**22 декабрь "Бәхет хаҡы"** (Х. Мөҙәрисова), музыкаль мелодрама

**23-25 декабрь "Зөбәржәт ҡала тылсымсыһы"** (А. Волков), әкиәт

### М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**22-25 декабря "Приключения обезьянки Бьянки"**, сказка для детей. Начало 10.30, 13.00

### Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**23-25 декабря "Главный новогодний утренник Уфы"**, новогодний праздник. Начало 10.00, 13.00, 15.00

### Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**20 декабря "Морозко"**, музыкальная сказка. Начало 12.00

### Салауат дәүләт башҡорт драма театры

**22-25 декабря "Новогодние приключения гостьи из Африки"**. Начало 10.00, 12.00, 14.00, 16.00

ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

# ТАМАШАСЫҢ КӨЛМӘЙМЕ?

## Тимәк, юморыңды шымартаһы бар!



**Ошо көндәрҙә баш ҡаланың Конгресс-холл бинаһында Башҡорт асыҡ КВН лигаһының беренсе сирек уйыны үтте. Унда Өфө, Стәрлетамаҡ, Мәскәү ҡалаларынан һәм Баймаҡ, Бөрйән, Учалы, Ейәнсура, Ғафури райондарынан бөтәһе ун команда ҡатнашты. Һүҙебеҙ Башҡорт КВН-ы кимәле ниндәй критерийҙар менән үлсәнеүе, ҡыҙыҡ-мәҙәктәрҙең мәғәнәһе һәм юмор кисәһенән ҡалған тәьҫораттар тураһында.**

Башҡорт асыҡ КВН лигаһының беренсе сирек уйыны тамамланып барған Әҙәбиәт йылына ишаралап, "Дуҫ булайыҡ" темаһы аҫтында үтте. Зөйнәб Биишеваның әҫәрендә күтәрелгән дуҫлыҡ, ярҙамсыллыҡ, тәрбиә мәсьәләләре "Фристайл", "Видеояҙма" һәм "Бер йыр" конкурстары аша сағылдырылды. Бынан тыш, һәр конкурсҡа айырым бер йүнәлеш билдәләнгәйне һәм уйынсылар "Ҡыш бабайҙың шаян тоҡсайында", "Минең сәйер дуҫым", "Кемдә юмор, кемдә сессия" темаларын үҙҙәре аңлағанса тамашасыға көләмәстәр аша еткерергә тырышты. Тырышты, тием, сөнки былтырғы миҙгел уйындарындағы кеүек, халыҡтың дәррәү алҡыштарына күмелеп, бөтәһен дә бер тынала көлдөрөп, залды аяғүрә баҫырға мәжбүр итеүселәр булманы. Жюри ағзаһы, яҙыусы Зөһрә Буранҡаева әйтеүенсә, быны сәбәбе - тәжрибәле "Еңмештәр", "Кәкре сүкеш", "Бытбылдыҡ", "Хыялыйҙар" кеүек командаларҙың төрлө сәбәптәр буйынса КВН-да уйнауҙан туктауында һәм улар урынын яңы командалар алыуында. Яңы командалар ҙа камиллашыр, элеккеләргә тиңләшер, әлбиттә. Бигерәк тә башҡорт телендә дөрөҫ һөйләшеүгә күберәк иғтибар бүлергә кәрәк уларға. Юҡһа, сығыштарында ҡолаҡҡа ятышһыҙ һүҙҙәр бик күп булыуы шәйләнде. Бәхтиһән, Башҡортостанда "атҡаҙанған ат һауыусы" бар икән. Ул яңылыҡты Ейәнсуранан "Мыртый" КВН-командаһы аша белдек. Киләсәктә был хаталар иҫәпкә алынып, төҙәтелер, моғайын.

Ошондай "киләсәктә төҙәтелер" тигән өмөтлө һүҙҙәр ҡайһы бер командаларҙың көләмәстәренә лә ҡағыла. Бигерәк тә Стәрлетамаҡ ҡалаһының "Йәй" КВН-командаһының сығышы "төҙәлергә тейеш". Юғиһә, ошоға тиклем башҡорт юморында билдән түбән шаяртыуҙар яңғыратмаҫҡа ҡушып, саҡ-саҡ шул афәттән ҡотолоп барғанда ғына бөтә ҡаҙаныштарҙы юҡҡа сығара яҙҙы егеттәребеҙ. Башҡорт асыҡ КВН лигаһының мөхәррирәт ағзаһы Марсель Мөхәмәтйәров ошо уңайҙан шундай үкенес белдерҙе:

- Башҡорт асыҡ КВН лигаһында уйнаған башҡорт йәштәренең иң ҙур проблемаһы - ялҡаулыҡ һәм яуапһыҙлыҡ. Ошо холоҡтарын үҙгәртеп кенә улар ысын квнсылар булып китә аласаҡ. Бөгөн иһә, тамаша залының тулы булыуы ҡыуандырҙы ла, үкендерҙе лә. Сөнки былай матур залға тос, йор һәм сифатлы шаяртыу кәрәк ине. Тамашасылар шуны көттө, ләкин өмөттәр бигүк аҡланып бөтмәне...

Әлбиттә, Башҡорт асыҡ КВН лигаһының сирек уйынында иғтибарға лайыҡ матур шаяртыуҙар ҙа яңғыраны. Был юлы "Райком" (Учалы районы), "Нөктә.РУ" (Өфө ҡалаһы), "Дәрүиштәр" (Өфө ҡалаһы), "Өсмен" (Мәскәү ҡалаһы) КВН командалары иң тапҡыр, иң отҡор булып сыҡты. Улар тамашасыны һуғым осоро тамамланыуы менән дә ҡотланы, IV Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайын һәм донъя кимәлендәге сәйәси ваҡиғаларҙы ла күҙ уңынан ысҡындырманы. Бигерәк тә "Нөктә.РУ"-лар ҡойған йомаҡтар хәтерҙә ҡалды. Юмор кисәһенә килә алмаған булһағыҙ, "Береһе, менәм, ти, икенсеһе, төшәм, ти" йомағына яуапты үҙ аллы табып ҡарағыҙ. Шулай уҡ "Бәләкәй генә йорт, эсе тулы ҡорт" йомағының яуабы Сирия мигранттары икәнен белдек...

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Беҙҙең, ябай тамашасының, замана Ерәнсәләрен күрергә, үҙебеҙҙең Масляковтарҙы алҡышларға һәм Башҡорт КВН лигаһының махсус төҙөлгән бинаһында үтәсәк юмор кисәләренә йөрөргә теләгебеҙ ҙур. Ә ул хыял бары тик башҡорт КВН командалары халыҡ фекеренә ҡолаҡ һалып эшләгәндә генә тормошҡа ашырға мөмкин булыуын иҫтә тотайыҡ.**

**Сәриә ҒАРИПОВА.**

АТЫҢ КЕМ?

# МАТУРЛЫҠ ЯРАТҠАН ҠЫҘ



**Өфө ҡалаһының 13-сө башҡорт башланғыс мәктәп-балалар баҡсаһы тәрбиәләнеүсеһе Гөлзифа Ҡолһарина менән исем аңлатмалары тураһында һөйләштек.**

Уға исемде әсәһе Ләйсән һәм атаһы Фәнис кәңәшләшеп, һайлап ҡушҡан икән. Гөлзифаның Илназ исемле ағаһы һәм Нургизә исемле апаһы бар. "Ағайым һәм апайым уҡыйҙар, ә мин уйнарға ғына яратам. Миңә биш кенә йәш. "Ижад үҙәгенә" төрлө матур әйберҙәр эшләргә өйрәнергә барам. Унда беҙ һүрәт төшөрәбеҙ, төҫлө ҡағыҙҙарҙы йәбештереп эшләйбеҙ. Тағы ла мин йырлайым һәм бейейем, өләсәйемдең әкиәттәрен тыңларға ятам. Үҫкәс, фея булам. Теш төшһә, шуны балалар мендәр аҫтына һалып йоҡларға ята, ә фея төндә теш урынына тимер аҡса һалып китә. Ул фея үҙе матур", - тип, хыялдары менән уртаҡлашты Гөлзифа. Уны тыңлап, исеме есемена тура килмәгән, тип кем әйтер? Күреүенсә, "зифа, һомғол буй-һынлы, сәскә" тигән мәғәнәле исемде йөрөткән ҡыҙ кескәйҙән матурлыҡҡа ынтыла.

**Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА яҙып алды.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә әйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ӨЛӨШ БАР ЕРҘӘ...

## үлеш бар

Ереҙ һатһаң ауылыңа һат: бер ситенә үҙең барып ултырырһың.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Рюмка - алкоголизм юлының башы, ашаған ваҡытта бер-ике рюмка эсеүе - уртаһы. Ә аҙағы - эскән килеш үлтереү өсөн төрмәлә ултырыу, психиатрия дауаханаһында ятыу, ҡапыл ғына еңел ауырып үлеү... Бик күп аҡыл эйәләре, эшселәр, алданып ошо юлға баҫа, шарап үлемгә табан алып барған юлға.

**(Джек Лондон).**

Изге йөрәклегә рәхмәт әйтеүе ҡыйын түгел.

**(Д. Бомарше).**

Сәнғәт - ул кеше өсөн һыу һәм аҙыҡ кеүек үк кәрәк нәмә. Кеше теләйме, юҡмы, ижад һәм матурлыҡҡыҙ йәшәй алмай.

**(Ф. Достоевский).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер төркөм кеше бер аҡһаҡал эргәһенә килә һәм унын йәнәшәһендә йәшәргә, унан донъяуи аҡылға өйрәнергә теләүен белдерә. Аҡһаҡал күнә һәм улар бергәләп йәшәргә ҡарар итә. Әммә яңы төркөм кешеләре аҡыллы һабаҡтар алыу, тормош тәжрибәһе туплау урынына, аҡһаҡалдың етешһеҙлектәренә төртөп күрһәтеп, уны туктауһыҙ тәнҡитләй, игәй башлай. Был хәлгә ҡарата аҡһаҡал шундай һүҙҙәр менән яуаплай:**

**- Һеҙ мине таш кеүек шымартырға итәһегеҙ, ләкин таштың да шымартыуға бирелмәй торған ҡытыршы урындары булған кеүек, минең холҡомдоң да ҡытыршылыҡтары бар - был кешенең үҙлеге тип атала. Һеҙ ҙә төрлөһөгөҙ һәм мин шулай уҡ һеҙгә оҡшамағанмын. Шундай аҡыл бар: Ҡояш төрлө объекттарҙы үҙенә тарта. Берәүҙәре унын орбитаһында тороп ҡала һәм йәшәү сығанағы таба. Икенселәре Ҡояш эргәһендә үҙҙәрен насар тоя, сөнки улар үҙҙәрен барыһының да иғтибар үҙәгендә булыр яҡтыртыусы итеп тоя. Уларға, киреһенсә, Ҡояш эргәһендә түгел, ә барыһының да үҙе тирәһендә әйләнеүе мөһим була. Ләкин эсендә ут булмағас, Ҡояш булып булмай һәм башҡа объекттарҙы үҙенә тарта алмайһың. Ошо хәҡиҡәтте аңламайынса, ул икенселәр Ҡояштан айырыла һәм Йыһанға осоп, боҙ кисәгенә әйләнә. Ҡояш булырға теләү генә аҙ, эсеңдә Хоҙай уты йөрөтөргә лә кәрәк бит әле...**

**Аҡһаҡалдың телмәренән һуң бер аҙ уйланып та тормаҫтан:**

**- Был аҡһаҡал бигерәк мыжыҡ, үҙе тураһында юғары фекерҙә. Беҙ унын эргәһендә ҡала алмайбыҙ, - тигән теге төркөм кешеләре һәм үҙҙәренең өҫтөнлөгән танытырға теләп, икенсе тарафтарға юл тотҡан..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы: Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир: Гөлфиә ЯНБАЕВА.
Мөхәррирәт: Ләйсән НАФИҠОВА, Зөйтүнә ӘЙЛЕ, Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА, Гөлнаҙ МАНАПОВА, Илгиз ИШБУЛАТОВ, Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы: 450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1
Беҙҙең сайт: www.kiskeufa.ru
Беҙҙең блог: blog.kiskeufa.ru
E-mail: info@kiskeufa.ru kiskeufa@mail.ru
«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды (450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

Телефондар:
Баш мөхәррир 253-25-44
Баш мөхәррир урынбаҫары 246-03-24
Бухгалтерия 246-03-23
Хәбәрселәр 252-39-99
Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 18 декабрь 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте 253-25-44, 246-03-23 телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә. Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.
«Киске Өфө»нөң индекстары – 50665, 50673
Тиражы - 4717
Заказ 5810